ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1-7 август (урағай) 2020

№31 (917)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Йөрәгендә иң ҡәҙерлеһе - халҡы булмаған кеше кеше түгел. Кескәй генә йөрәгеңә бөтә донъя һыйһын - шунда ғына һин донъяның дуҫы булырһың. Йөрәгенә донъяны һыйҙырған кеше бер ҡасан да үҙе өсөн генә йәшәй белмәҫ. Тик шул бер нәмәне генә белгән кеше - бәхетле кеше.*

**Рәми ҒАРИПОВ.**

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Уҡыу йорто һәм гәзит**



6

**Йылан ырыуынан,**

**боронғо башҡорт затынан беҙ**



7

**Мин яңғыҙ ҡарағас...**



8-9

**Ҡурсаулыҡта нисә айыу?**



12-13

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Эш юк бит, ти ҙә ҡалалар. Ауылда эшһеҙлек буламы ни ул? Бөгөн ауыл ерендә ниндәй эштәр ойоштороорға мөмкин?

***Шәфҡәт ЯРЫШЕВ, Көйөргәҙе районы:*** Дөрөҫ һорау. Ауылда эшһеҙлек буламы ни? Юҡ, әлбиттә! Тырышҡан кешегә бында эш - муйындан. Бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға тиклем бил бөкһәң дә ахырына сығырлыҡ түгел. Эшләгеһе килмәгән йәки ауыл тормошон белмәгәндәр генә шулай ти бит ул. Эшһеҙ, аҡсаһыҙ нисек йәшәйҙәр икән, тигәндәрен үҙем дә ишеткәнем бар. Ауыл ерендә лә бына тигән итеп донъя көтөргә мөмкин. Теләк һәм елкә генә кәрәк.

Мин үҙем ҡаланы яратмайым. Шуға ла йәштән үк тыуған төйәккә тамыр йәйергә хыялландым. Колхоз тарҡалғас, күптәр юғалып ҡалыуына ла ғәжәпләнергә түгел. Дөйөм хужалыҡта әҙер фарман буйынса күптән һалынған һуҡмаҡтан атлап, аҙ ғына эш хаҡына ла риза булып, бер хәстәрһеҙ, уйһыҙ йәшәгәндәргә, һис шикһеҙ, ауырғараҡ тура килде. Ә маҡсатлылар ҡул ҡаушырып оҙаҡ ултырманы. Шәхси хужалығын үҫтерергә тотоноп китте. Кәзә мал түгел, тиһәләр ҙә, кәзә һауып та бынамын тигән көн иткәндәр бар хәҙер.

Шәхсән үҙемә килгәндә, йылҡы һәм һарыҡ үрсетәм. Боронғоларҙың, мал кешене байытмай, тота белеү байыта, тигәне бик тә раҫ. Йыл һайын бер өлөшөн һуйып һатам, бер өлөшө әйләнештә йөрөй, бер өлөшө тоҡом арттырыу өсөн. Дөрөҫөн әйткәндә, байтаҡ йылдар инде балаларҙы кейендереүгә лә, уҡытыуға ла, туй тантаналарына ла, йорт-ҡураны төҙөкләндереүгә лә ошо "тере валюта" тотонола. Берәү әйткән ти бит, ауылдыҡыларға рәхәт, аҡса кәрәк булһа, сыға ла малын һуя, тип. Ауыл тормошон белмәгән кеше генә шулай тип әйтә ала. Малды һуйғансы күпме ашатырға, тәрбиәләргә, үҫтерергә, бесән әҙерләргә кәрәк әле.

Быға тиклем ҡош-ҡортто ла күпләп тоттоҡ. Тик һуңғы йылдарҙа иген ҡиммәтләнде, шуға ла ҡошсолоҡто әлегә ҡуйып торҙоҡ. Ҡайһы берәүҙәр һорашмай-кәңәшләшмәй, башҡаларҙың тәжрибәһен уртаҡлашмай, һуйып һатырбыҙ, тип, күп итеп ҡаҙ йәки өйрәк ала ла... отола. Ишле ҡош-ҡортто үҫтереү-һимертеү өсөн аҙыҡ мул кәрәк. Ҡиммәт хаҡҡа һатып алалар ҙа, ҡаҙ үҫтереүҙең аҡланмауын күреп, төшөнкөлөккә биреләләр. Шуға күрә килем алыу ниәте менән ниндәй ҙә булһа эш башлар алдынан мотлаҡ сығымың һәм килемеңде өйрәнеү, иҫәпләү, үлсәү кәрәк. Хәҙер халыҡ сәләмәт туҡланыуға, хәләл ризыҡҡа өҫтөнлөк бирә. Бына бөгөн ошо хәрәкәтте ауыл ерендә уңышлы файҙаланырға була, тип уйлайым.

Мин үҙем йылҡы үрсетеүҙе 2008 йылда бер бейәнән башланым. Айғыр ҡолон тыуһа, уны бейәгә алмаштырҙым. Хәҙер уларҙың һаны егерме башҡа етеп бара. Киләсәктә ҡымыҙ етештереү эшен башларға ниәтләйем. Ғөмүмән, аттарҙы бик яратам. Яратҡан эшем дә, шөғөлөм дә ул. Төбәктә ат спортын үҫтереүгә үҙ өлөшөмдө индерҙем, тиһәм, яҡташтарым маҡтаныу тип ҡабул итмәҫ, тип уйлайым. Ат һарайымда тағы саф тоҡомло 5 саптарым бар. Улар менән төрлө бәйгеләрҙә ҡатнашам. Быйыл һабантуй булмағас, күңелһеҙ булып тора әле. Хужалыҡтар исеменән ярышып, иген һөйләшеп ҡайта инем. Шулай итеп, сабыштарҙың да үҙенә күрә файҙаһын күрәм. Етеш тормошта йәшәйем тиһәң, шулай төрлө юлдарҙы эҙләйһең инде. Байығыуҙың әҙер рецебы юк. Һәләтеңде, тырышлығыңды эшкә егергә генә кәрәк.

Баш ҡалала үткән "Терра Башҡортостан" ат спорты турнирының етенсе этабында дүрт йәшлек айғыр менән беренсе урын алдым. Ырымбурҙа үткән тоҡомло аттарҙы һынау ярышында ла икенсе һәм дүртенселекте яуланым. Бына шулай. Ауылда тора тигәс тә, донъянан артта ҡалып йәшәмәйбеҙ ул. Үҙебеҙгә етерлек йәшелсә үҫтерәбеҙ. Ҡыяр, помидор, картуф, һуған, кишер һәм башҡалар ҡыш буйына етә. Әлегә ҙур хужалыҡты алып барырға балалар, дуҫтар, класташтар ярҙамлашһа, киләсәктә, дөрөҫөрәге йылҡы малы артһа, уларҙы көтөшөргә көтөүсе ялларға уйлайым. Малдың көрлөгө көтөүсенән тиҙәр бит.

(Дауамы 2-се биттә).

КӨНАУАЗ

# БЕРҘӘМ ДӘҮЛӘТ ИМТИХАНЫ...

## ҡурҡытыу ҡоралына әйләнмәһен



**Был аҙнала Рәсәйҙә Берҙәм дәүләт имтихандарының төп өлөшө тамамланды, ҡабаттан һынау тотоу өсөн билдәләнгән өҫтәмә көндәр август уртаһына тиклем һуҙыласаҡ. Башҡортостанда быйыл бөтәһе 18265 уҡыусы 11-се синыфты тамамлай, Өфөлә улар 5205 кеше. БДИ тапшырырға теләк белдереүселәр һаны - 19093 кеше, шуларҙың 17647-һе быйылғы сығарылыш уҡыусылары, 1446-һы - мәктәпте элек тамамлаусылар. Уҡыусылар араһында иң популяр предмет рус теле - 16563 уҡыусы һынау тотто, унан ҡала профилле математика - 10627 һәм йәмғиәтте өйрәнеү - 5962. Шулай уҡ физиканы 4748 уҡыусы, биологияны 3812, химияны 3489, информатиканы 3070, географияны - 352, әҙәбиәтте 774 уҡыусы һайланы. Туғыҙ предметтан Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостандың 114 уҡыусыһы 100 балл йыйҙы. Шулай итеп, республикала Берҙәм дәүләт имтиханы күрһәткестәре үткән йылдар менән сағыштырғанда күтәрелә бара. Уҡыусылар ҙа, уҡытыусылар ҙа, атай-әсәйҙәр ҙә был имтиханды ғәҙәти хәл, мотлаҡ үтәлергә тейешле бурыс тип ҡабул итергә өйрәнә, күрәһең. Берҙәм дәүләт имтиханына нисек әҙерләнеүҙәре тураһында үҙҙәренән һөйләтәйек, булмаһа.**

(Дауамы 5-се биттә).

12+

✓ *Ауылда эш юҡ, аҡса юҡ, тигәнде ишетергә тура килә. Ә мин шуның киреһен әйтер инем: бөгөн ауылда ла үҙ эшеңде асырға һәм уны уңышлы алып барырға була. Мин йылҡысылыҡтан тыш, ҡорот ыҫлау эшен йәйелдерергә теләйем.*



ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ҮҘЕБЕҘҘЕКЕН ҺАЙЛА...

## үҙебеҙҙекен һатып ал



**Әүҙем тормош алып барған, үҙ эшенә юғары яуаплылыҡ менән ҡараған һәм төрлө кимәлдә ҙур уңышҡа өлгәшкән башҡорт эшҡыуарҙары бик күп. Улар араһында йөрәгендә милли рух йөрөтөп, халҡыбыҙ тарихын, мәҙәниәтен, боронғо кәсептәрен киләсәк быуынға еткереү хисе менән янғандары ла аҙ түгел. Шундайҙарҙың береһе - сәйәхәтсе, йылҡы үрсетеүсе Денис Өмөтбаев.**

Һәр ваҡыт яңылыҡҡа ынтылған, өлгәшелгәндә туҡтап ҡалырға яратмаған, яңынан-яңы маҡсат ҡуйып, алға ынтылған һәм үҙе артынан башҡаларҙы ла эйәртә белгән йәш эшҡыуар менән әңгәмәбеҙҙең төп темаһы - уның яңы башланғысы, атап әйткәндә, халҡыбыҙҙың ҡорот ыҫлау шөғөлөн тергеҙеп, уны ҡулланыусыға еткереп, тәмле лә, экологик яҡтан таҙа ла, файҙалы ла милли аш-һыуыбыҙҙы таратып, киләсәк быуындың сәләмәтлеген нығытыуға булышлыҡ итеп, ошо өлкәлә уңыш ҡаҙаныу тураһында булды.

- Бөгөн ҡала ерендә генә түгел, ауылда ла үҙ эшеңде асыу өсөн мөмкинлектәр бар. Әммә уларҙы ҡулланып ҡарарға тырышҡандар ғына аҙ. Ауыл хужалығын, малсылыҡты үҫтереүгә инвестиция һалғандар байтаҡ, әлбиттә. Һуңғы йылдарҙа республикала байтаҡ крәҫтиән-фермер хужалыҡтары барлыҡҡа килде. Был йәһәттән грант, субсидия алыу маҡсатында төрлө программаларҙың бойомға ашырылыуы ла үҙ һөҙөмтәһен бирә.

Шулай ҙа йыш ҡына ауылда эш юҡ, аҡса юҡ, тигәнде ишетергә тура килә. Ә мин шуның киреһен әйтер инем: бөгөн ауылда ла үҙ эшеңде асырға һәм уны уңышлы алып барырға була. Бына әле мин йылҡысылыҡтан тыш, ҡорот ыҫлау эшен йәйелдерергә теләйем.

Һуңғы осорҙа тормошобоҙға дөрөҫ туҡланыу тигән термин килеп инде. Халыҡ диетик аҙыҡтарға өҫтөнлөк бирә башланы. Маҡсатҡа өлгәшеү өсөн ошо сәләмәт ағымды уңышлы файҙаланырға мөмкин, сөнки ҡорот - элек-электән башҡорттарҙа дауа булараҡ киң ҡулланылған. Хәҙерге медицинала ла уның шифаһын төрлө дарыу менән сағыштыралар. Ҡоротто ашҡаҙан эшмәкәрлеген көйләү, аппетитты уятыу, холестеринды кәметеү өсөн ҡулланғандар. Шулай уҡ тамаҡҡа аш бармағанда ҡорот һыулап эскәндәр. Ҡорот ыҫлау эшенә тотоноу алдынан ошоларҙың барыһын да күҙ уңында тоттом. Ыҫланған ҡоротторҙоң өҫтөнлөктәрен сәйәхәттә саҡта ла күп тапҡыр һынап ҡарағаным бар ине. Уның тәмле һәм файҙалы ғына түгел, ә юлда йөрөтөү өсөн уңайлы икәнен дә татыным. Кипкән ҡорот ныҡ ҡатмай. Әлеге ваҡытта ҙур булмаған күләмдә етештереп, уны рекламалау, ҡулланыусыға еткереү менән шөғөлләнәм. Уны ашап ҡарағандарҙан әлегә ыңғай фекерҙәр генә ишетелә. Заказсыларымдың күбеһе - башҡорттар.

Аҙнаһына 10-15 баш ҡороттан башланыҡ. Беҙҙең продукция төҫө буйынса ла, тәме менән дә айырыла. Эксперимент рәүешендә төрлө ҙурлыҡта эшләп ҡарайбыҙ. Ҡуйған маҡсатыма яйлап яҡынаям, тип уйлайым. Әлегә был эш менән бер генә инәй шөғөлләнһә, киләсәктә был эшмәкәрлеккә бер нисә кешене йәлеп итергә мөмкин. Баймаҡ районы ауылдарының береһендә ҡорот ыҫлау цехы асыу өсөн йәтешле бина ла таптым.

Ғөмүмән, һыйыр һөтөнән төрлө аҙыҡ әҙерләргә була. Уларҙы эшләү традицияларын һаҡлау, таратыу ғына кәрәк. Бына мин йәнә сыр эшләүҙе яйға һалырға ниәтләйем. Сәйәхәт иткән ваҡытта уның төрлөһөн тәмләп ҡарарға насип булды. Ҡорот ыҫлау технологияһы бер ни тиклем сыр эшләүгә оҡшаған, шуның өсөн ул оҫталарға яңылыҡ булмаҫҡа тейеш. Ошо уйым барып сыҡһа, ауылда ҡатын-ҡыҙҙарға эш урыны барлыҡҡа киләсәк. Был да - минең төп бурыстарымдың береһе.

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Эш юҡ бит, ти ҙә ҡалалар. Ауылда эшһеҙлек буламы ни ул? Бөгөн ауыл ерендә ниндәй эштәр ойоштороорға мөмкин?

**(Башы 1-се биттә).**

***Радик АДИКАЕВ, Стәрлебаш районы:*** Ялҡауҙың ғына эше лә, ашы ла булмай - мин шундай фекерҙәмен. Ауылда йәшәп, эш юҡ, тип ултырғандарға аптырарға ғына ҡала. Хәҙер бит үҙеңдең шәхси хужалығыңды үҫтереүҙең төрлө юлы бар. Мал-тыуар үрсетеп тә, ҡош-ҡорт аҫрап та, умартасылыҡ менән шөғөлләнеп тә, баҡсасылыҡтан да ғаиләнде ҡарарлыҡ килем алырға мөмкин. Бер ниндәй сикләү юҡ.

Хәҙер бит кеше еңелдән еңелде эҙләй. Бер нисә йыл элек кенә Стәрлебашта туғыҙ көтөү ине. Ә бөгөн шуның өсәүһе генә ҡалды. Был нимә тураһында һөйләй: халыҡ хәҙер ауыл ерендә йәшәп тә, мал тотоуҙан ситләшә башланы. Көтөүлектәр сабынлыҡҡа әйләнде. Таныштарым араһында ла, магазинда һөт тә, ҡаймаҡ та бар, тип, һыйырын бөтөргәндәр күп. Һыйылы көнөң һыйырҙа тип, юҡҡа ғына әйтмәгәндәр бит. Үҙеңдекен һауһаң, эремсек, ҡорот, ҡатыҡ та үҙеңдеке була. Ғаиләңдән артһа, һата алаһың. Һыйыр йыл һайын быҙаулай, уны һуғымға тотонорға йәки һатып, аҡсаға әйләндерергә лә мөмкин. Иренмәҫкә генә кәрәк. Башҡа төбәктәрҙәге кеүек, көтөүсе табыу мәсьәләһе лә көнүҙәк. Шуныһына ла аптырарһың: эшһеҙҙәр күп, ә мал көтөргә кеше табып булмай. Ғәжәп бит был! Тимәк, эш эшһеҙлектә түгел, ә ялҡаулыҡта.

Байтаҡ йылдар умартасылыҡ менән шөғөлләнәм. Күп түгел, 15-ләп кенә баш, әммә йылы матур килһә, ярайһы яҡшы ғына килем килтерә. Бынан тыш, йыл һайын ун баш үгеҙ һимертеп һатам. Йәйен-ҡышын йүгерергә тура килә, әммә аяғың тыпылдамаһа, ауыҙың шапылдамай, тиҙәр бит. Иртә яҙҙан көҙгә тиклем көнөм һарай һәм умарталыҡ араһында үтә. Иртән малды тәрбиәләйем дә ҡорт ҡарарға китәм, ҡайтышлай бесән сабам. Кәмендә 500 төк бесән, 70 төк һалам , 15-ләп тонна ҡатнаш аҙыҡ кәрәк. Ҡалала эшләгәндәрҙеке кеүек ике көн ял да, отпускы ла юҡ. Шулай йыл әйләнәһенә. Әммә үкенерлек түгел, үҙеңдеке - үҙеңә. Элегерәк крәҫтиән-фермерлыҡ хужалығы асып маташҡайным, ҙур һалым менән аптырата башлағастар, яптым. Ул осорҙа күптәр эшен туҡтатырға мәжбүр булды.

Үҙеңдең ғаиләңде ҡарарлыҡ төрлө эш ойошторорға мөмкин. Тик ниндәй ҙә булһа эшмәкәрлеккә тотоноу алдынан аныҡ маҡсат ҡуйыу мөһим. Дөрөҫ йүнәлеш алыу өсөн ауыл иҡтисадын да белеү зарур. Ниндәйҙер кимәлдә сығым сығармай, килем дә алып булмай. Әгәр шөғөлөң миҙгел эшенә бәйле булмаһа, аҡсаңды тиҙ генә ҡайтарып та алмаҫҡа мөмкин. Инвестиция тигән әйбер бар иҡтисадта. Был инде артығыраҡ аҡсаң булһа, уны килем алыу маҡсатында ниндәйҙер эшмәкәрлекте үҫтереүгә, асыуға һалыу тигәнде аңлата. Бөгөн ауыл ерендә малсылыҡты йәйелдереү өсөн бөтә шарттар ҙа бар. Күпме аҫрай алаһың, шунса аҫра, күпме бесән саба алаһың, шунса сап. Теләк һәм дәрт кенә кәрәк. Хәҙер ауыл хужалығын үҫтереү йәһәтенән төрлө кимәлдә программалар, гранттар бойомға ашырыла, шуларҙы ла күҙәтеп барыу мотлаҡ.

***Ләйсән ИСМӘҒИЛЕВА, Күгәрсен районы:*** Килен булып төшкән йылда колхоз бөттө. Һөнәрем буйынса ашнаҡсымын, билдәле инде, ауылда миңә тигән эш юҡ башҡа. Нимә эшләргә? Күпме өгөтләһәм дә иремде ҡалаға китергә күндереп булманы. Уйланыҡ-кәңәшләштек тә, мал-тыуарҙы ишәйтеү буйынса бер фекергә килдек. Шулай итеп, һарыҡты ла, һыйыр һанын да арттырҙыҡ. Итләтә лә, терелә ҙә һаттыҡ. Иң тәүҙә, әлбиттә, яңылышыуҙар ҙа булды. Тап ошо хаталаныуҙар баҙар һорауын, шарттарын өйрәнергә мәжбүр итте.

Хәҙер һарыҡ итенең йәйен, кешенең һуғым ите бөткәс, шулай уҡ мосолмандарҙың дини байрамдары, бесән ваҡытында яҡшы һатылыуын белгәс, алдан уҡ яҡшылап тәрбиәләйбеҙ, ашатабыҙ, һимертәбеҙ. Гәзиткә иғлан да бирәбеҙ. Шулай итмәйенсә беҙҙә нимә барлығын кем белһен? Реклама - сауҙа двигателе. Уны бер нисек тә инҡар итергә ярамай.

Шулай уҡ һатып алыусы менән ғәҙел булыу кәрәк. Һиңә тағы ла килерлек булһын. Артыҡ һатыулашырға ла түгел. Хаҡының тейерен генә әйтеү яҡлымын. Бынан тыш, тағы бик мөһим нәмә - таҙа, хатта стериль булыу. Был талап кейемеңә лә, һауыт-һабаңа ла, продукцияңа ла ҡағыла. Айырыуса һөт аҙыҡтары менән эш иткәндә таҙалыҡ беренсе урында булырға тейеш. Ҡаймағыңды һатаһың икән, банкаң ялтырап торһон. Ҡорот, эремсегеңдән әсегән еҫ сыҡмаһын, майыңды ла ҡат-ҡат тасҡы. Ҡаймағыңа һөт ҡушма. Һәм тағы иң мөһим әйберҙең береһе - йомшаҡ һүҙле, намыҫлы бул. Былар - минең баҙар ҡанундарым. Шуларҙы мотлаҡ үтәгәндә генә сауҙаң уңышлы булыр. Быны мин йылдар дауамында күп һынаным.

Яҙын кеше йәшел тәмләткестәргә өҫтөнлөк бирә. Ҡояш йылы нурын һибә башлау менән укроп һата башлайым. Уны ҡупшы итеп үҫтереүе, әлбиттә, еңел түгел. Әммә була! Быйыл шуны һатҡан аҡсаға ғына утыҙ өйрәк бәпкәһе алдым - буштан килгән кеүек булды. Уның яртыһын, иң һимеҙе һәм матурын Яңы йыл алдынан өйҙән килеп алып китәсәктәр. Утыҙлаған ҡаҙым Себер яҡтарына "оса". Йыл да шулай. Ауылда эш юҡ тип әйтеп ҡара инде бына шунан һуң.

Үҙебеҙҙән артып ҡалған йәшелсәне, тоҙланған, маринадланған ҡыяр-помидорҙы ла һатам йәки үҙемдә булмаған әйбергә алмашам. "Һатырға оялам ул" тигән кешеләргә лә әйтер һүҙем бар: еткерер-еткермәҫ, таҡытоҡо йәшәүҙән кәмһенергә, урлашыуҙан, көнләшеүҙән оялырға кәрәк. Үҙеңдең хәләл көсөң менән тапҡан ризығыңды башҡалар менән уртаҡлашыуҙың, уны һатып, үҙеңдең көнитмешеңде аҙ ғына булһа ла яҡшыртыуҙың ни ояты бар! Ошо кәсеп менән машинаны ла, йортто ла яңырттыҡ, ике балабыҙҙы уҡытып сығарҙыҡ, трактор ҙа, уға тағылма, бесән сапҡыс-йыйғыс та алдыҡ. Вахта ысулы менән ситтарафта йәки аҙнаға бер ҡайтып, ҡалаға йөрөп эшләгәндәрҙән бер ҙә айырылмайбыҙ. Айырма тик шунда ғына: башҡаларҙан иртәрәк тороп, һуңыраҡ ятабыҙ...

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓30 июлгә мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 6711 коронавирус инфекцияһы теркәлгән. Һуңғы тәүлектә COVID-19 йоҡтороусылар һаны 36-ға артҡан. Коронавирустан вафат булғандар һаны тәүлек эсендә үҙгәрмәгән һәм элеккесә 22 кеше тәшкил итә. Республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, бөгөн төбәктә сирлеләр өсөн стационарҙарҙа койка фондының 43 проценты буш. "Коронавирусты дауалау өсөн кәрәкле дарыуҙар, шәхси һаҡланыу, дезинфекциялау саралары запасы ике айға етерлек", - тип белдерҙеләр ведомствола.

✓Июлдә Башҡортостанда йәшәүселәр араһында дауахананан тыш пневмония менән сирләүҙең артыуы күҙәтелә. Республика Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина һүҙҙәренсә, лабораторияларҙа пневмониялар, микс инфекциялар һәм башҡа ҡуҙғытыусылар раҫлана. "Әгәр элек беҙ һайлап ҡына эшләһәк, хәҙер иһә пневмонияның бөтә төрҙәре тикшерелә. Шуға ла ул күберәк асыҡлана", - тине Галина Пермина.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Сәрмән ауылынан һәләк булған ирекмәндең ғаиләһенә ярҙам күрһәтергә ҡушты. 60 йәшлек Рәсүл Сафин үҙ теләге менән Белорет районындағы Ҡыраҡа һыртына юлланған. Ир-уҙаман йөрәге ҡушыуы буйынса урман янғыны менән көрәштә ярҙам итергә теләгән. Ләкин ул урынға барып етә алмаған - йөрәге туҡтаған. Ерләү эштәрен ойоштороуҙа район хакимиәте булышлыҡ иткән. Республика етәксеһе мәрхүм ирекмәндең туғандары менән осрашты.

✓Башҡортостанда йәшәүселәргә туҡталыштарҙа һәм парктарҙа тәмәке тартыу закон менән тыйылды. Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексына үҙгәрештәр тураһында закон көсөнә инде, уға ярашлы, быны өсөн штраф - 500 һум, ҡабаттан боҙған осраҡта 1000 һум. Башҡортостан парламенты спикеры һүҙҙәренсә, халыҡ тәмәке тартыусыларға, айырыуса кальян төтәтергә яратыусыларға йыш зарлана. Республикала ошо көндән үткәүелдәрҙә, ял итеү, туризм зоналарында, физик культура һәм спорт менән шөғөлләнеү урындарында, асыҡ һауала мәҙәни, театр-концерт, спорт, ижтимағи-сәйәси саралар уҙғарған ваҡытта тәмәке тартыу тыйылды.

**✓ *Бал ҡорттарын һаҡлап ҡалыу саралары хаҡында ҙур һөйләшеү булырға тейештер, сөнки бал ҡорттарын һаҡлап ҡалыу глобаль проблемаға - ер йөҙөндә кешелек донъяһын һәләкәттән ҡотҡарыу мәсьәләһенә туранан-тура бәйле.***



*БЫЛ АЙҘА...*

# УРАҒАЙҘА УРАҠ ХӘСТӘРЕ



**Йәй ахыры - урағай ҙа килеп етте. Был айҙа июлдәге кеүек өтөп алыр эҫе күҙалланмаһа ла, иң юғары температура плюс 28 булыр тип фаразлай метеорологтар. Уртаса айлыҡ температура иһә плюс 18-20, төндә плюс 10 тирәһе тәшкил итеүенә өмөтләнә улар. Айҙың яртыһынан ашыуы аяҙ һәм алмашыныусан болотло булһа, ҡалған осорҙа яуым-төшөм күҙәтеләсәк.**

Һәр ваҡыттағыса, гидромет фаразлауҙарына ышаныу ҡыйын булһа ла, бөгөн барыбер берәй яҡшы һүҙ ишетке килә. Исеменән үк күренеп тороуынса, үҙ ваҡытында, ҡәҙимге килгән йылдарҙа был айҙа, ғәҙәттә, ураҡҡа төшәләр, ләкин стихия тормош тәртиптәренә үҙ төҙәтмәләрен индерә. Үткән ай ғәҙәттән тыш ҡоро һәм эҫе тороу сәбәпле, уңыш ваҡытынан алда өлгөрҙө, шуға күрә урып-йыйыу республикабыҙҙа июль уртаһында уҡ башланды. Урағай өлөшөнә ҡалырмы-юҡмы ураҡ эштәре, әйтеүе ҡыйын, ләкин беҙҙе июлдә борсоған проблемалар һәм хәстәрҙәр тулыһынса эйәрә килеп, был айға ла күсәсәк: шул уҡ COVID-19 һаман иңләй-буйлай илебеҙ тарафтарын. Улай ғына ла түгел, кешеләрҙең элементар һаҡланыу сараларын һанға һуҡмауы сәбәпле, ул тағы ла көсәйә төштө, етмәһә, уның хәүефле әҙемтәһе пневмония көсәйеп китте. Күптәр ҡабатлауынса, быйыл, ысынлап та, яҙы - яҙ, йәйе йәй булманы. Элеккесә йәйелеп китеп, уй-хәсрәтһеҙ, битараф йәшәү артабан мөмкин түгеллеге, ниһайәт, иң бошмаҫ әҙәмдәрҙең дә хатта аңына барып етә башланы, буғай. Әҙәм балаһы үҙ ҡылғандарының язаһын донъялыҡта күреп китеү форсаты тыуып торған мәлгә тура килдек. **Ә шулай ҙа күп әле арабыҙҙа уйһыҙ, фәҡәт үҙ ләззәтен ҡайғыртып, тормоштан умырып алырға ғына белгәндәр. Кешелек һәм уның йәшәйеш нормалары сиктәренә һыйғыһыҙ бер генә ҡылыҡ-ғәмәлдең дә яуапһыҙ ҡалмаясағын һәр кем төшөнөп еткәнсе дауам итер, тиҙәр, афәт ғазаптарын...**

Байрам, күңел асыу ҡайғылары ла китеп торған мәл. Икенсе яҡтан, тормош бер нигә ҡарамай дауам итә: никахтар ярала, сабыйҙар яр һалып донъяға килә, яңы йорттар төҙөлә, кеше эшкә бара, эштән ҡайта... Эшсән урағай календары ҡыҙыл байрам көндәре менән биҙәлмәгән, иҫтәлекле даталары ла һанаулы ғына һәм уларының да күпселеге ниндәйҙер набат, саҡырыу булараҡ ҡабул ителә. Мәҫәлән, Хиросима көнө. Бөтөн донъя ядро ҡоралын тыйыу өсөн хәрәкәт көнө **(6)** йәки ошо уҡ көндә билдәләнеүсе "Донъя табиптары - тыныслыҡ хаҡына" халыҡ-ара көн **(6)**. Эйе, бөтөн кешелек тарихы ошоғаса ер йөҙөндә именлек өсөн көрәш тарихы булды. Ләкин ана шул ғәзиз тыныслыҡты боҙоп, һәүетемсә тормош ағышын селпәрәмә килтереүсе, кеше ғүмерҙәрен өҙөүсе агрессиянан да яманыраҡ хәүеф баҫты ер йөҙөн: экологик һәләкәт, ҡырғын, климат аномалияһы. Уларҙың әҙемтәләре тормошобоҙға торған һайын тәрәнерәк үтеп инә бара, сөнки бер сәбәп-әҙемтә икенсеһенә эйәрсенле сылбыр рәүешендә бәйләнгән. Шуларҙың күҙ алдыбыҙҙа башҡарылыусы береһе - бал ҡорттары һәләкәте. Бөтөн донъя күләмендә, шул иҫәптән Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда. Ғәжәп эшсән, теремек, аҡыллы был йән эйәләрен ниндәй генә образдарға тиңләп сағыштырмайҙар! Ысынлап та, компьютер интеллекты һалынған был тәү ҡарашҡа ябай бөжәктәр, асылда, һис тә ябай ғына түгелдәр икән шул. Ер йөҙөнә янаған экологик, биологик һәләкәттәрҙең тәүге һиҙгер хәбәрселәре булараҡ, уларҙың был үҙенсәлегенә күптән фәнни иғтибар бирелеп килә. Ғалимдар тарафынан да, Ванга һәм уның кеүек күрәҙәселәр тарафынан да. Бөгөнгө экологик-биологик катаклизм кисә йә былтыр ғына башланманы. Эксперттар фекеренсә, уның тәүге билдәләре тиҫтәләрсә йылдар элек үк башланғайны инде. Ошоға бәйле бал ҡорттары менән дә хәүефле хәлдәр башланыуына иғтибар итә белгестәр. 2006 йылда бал ҡорттары күстәренең һуңғы 50 йыл эсендә ике тапҡырға кәмейәсәге хаҡында хәүефле мәғлүмәттәр тулы фәнни хеҙмәттәр яҙыла.

Мәғлүм булыуынса, Ванга бал ҡорттарының күпләп юҡҡа сыға башлауын 2004 йылда башланасаҡ тип күрәҙәләгән. Артабанғы фәнни күрәҙәлектәр тағы ла хәүефлерәк: әгәр эшсән "нәҙекәй бил"дәрҙең күпләп ҡырылыуы ошо темптар менән барһа, 2035 йылға улар бөтөнләй ҡалмаясаҡ. Бөйөк ғалим Альберт Эйнштейн да хатта бал ҡорттарын кешелек хәбәрселәре итеп һанаған. Уның фаразы буйынса, ер йөҙөндә бал ҡорттары ҡалмаған көндән алып 4 йыл үтһә, цивилизация ла юҡҡа сығасаҡ. Ауыҙынан ел алғыры нәмәкәй, нимә яҙа был, тип минә һуҡранмағыҙ, йәмәғәт, был минең һүҙем түгел, бөйөк ғалим һүҙҙәре... Ләкин өмөтһөҙлөккә бирелеү, үҙегеҙгә мәғлүм - ҙур гонаһ ул. Бәхеткә, кешелек бөгөн хәүеф алдында ҡулдарын һәлендереп, башын эйеп ултырмай, ә уға ҡаршы көрәш юлдарын, кешелекте ҡотҡарыу сараларын эҙләй һәм теләһә ниндәй ҡырғынға ҡаршы тора алырлыҡ көс табырҙай үҙендә. Бал ҡорттары мәсьәләһенә әйләнеп ҡайтҡанда, был өлкәлә шөғөлләнеүсе белгестәр фекеренсә, ниндәй юлдар менән булһа ла кисекмәҫтән был йән эйәләрен һаҡлап алып ҡалыу - көн талабы. Бының өсөн, әлбиттә, ҡырғындың төп сәбәптәрен асыҡлау һәм юҡ итеү төп шарт.

Әйткәндәй, бал ҡорттары темаһы юҡтан ғына килеп ҡунманы "Был айҙа..." материалының көн ҡаҙағына. **9 август** Башҡортостан умартасылары көнө билдәләнә. Дөрөҫ, календарҙа был умартасылар байрамы тип нарыҡланһа ла, әйтеүемсә, бөгөн байрам ҡайғыһы юҡ, ә бына бал ҡорттарын һаҡлап ҡалыу саралары хаҡында ҙур һөйләшеү булып, был һүҙҙән аныҡ эшкә тотоноу көнө булырға тейештер, сөнки бал ҡорттарын һаҡлап ҡалыу глобаль проблемаға - ер йөҙөндә кешелек донъяһын һәләкәттән ҡотҡарыу мәсьәләһенә туранан-тура бәйле. Был ғәжәйеп бөжәктәр хаҡында изге Китап - Ҡөрьәндә лә бит юҡҡа ғына телгә алынмаған: уның "Ән-Нәхл" (Бал ҡорто) сүрәһенең 68-69-сы аяттарында Аллаһы Тәғәлә бал ҡорттарына Үҙе күрһәткән юлдан осоп йөрөргә ҡушҡан. Ошо бәләкәй генә бөжәктә лә хатта аңлаған кешегә Аллаһтың бөйөклөгөнә һәм аҡылына күрһәтеүсе ишара барҙыр, тиелә аяттарҙа. Быны аңлағандарҙы бәхетле тормош көтә. Аллаһ ҡушыуы буйынса осоп йөрөп, һәр төрлө емеш, сәскә һуты менән туҡланыусы бөжәктәр әҙәм балаһына шифа килтереүсе, тимәк! Шуның өсөн дә бал ҡортонон Аллаһ күрһәткән юлы быуылмаһын, ул туҡланасаҡ һәм шифалы һут йыясаҡ һәр төрлө үҫенте, емеш ағастары һәм сәскәләргә химикат һиптерелмәһен, әҙәм балалары ла, бал ҡорттарынан күрмәксе, эшсән, теремек, һиҙгер, аҡыллы булһындар - шул саҡ донъябыҙ ҙа дөрөҫ юлдан, Хаҡ Тәғәлә күрһәткән юлдан китер, ин шә Аллаһ!

Урағайҙа тағы ла ошондай көндәр билдәләп кителә: 1914-1918 йылдарҙағы Беренсе бөтә донъя һуғышында һәләк булған Рәсәй яугирҙарын хәтергә алыу көнө **(1)**, РФ Ҡоралды көстәренең тылы көнө **(1)**, Һауа-десант ғәскәрҙәре көнө **(2)**, Тимер юлсылар көнө **(2)**, Халыҡ-ара светофор көнө **(5)**, Башҡортостандың үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыуына 400 йыл хөрмәтенә Өфөлә Дуҫлыҡ монументы асылыуға 55 йыл **(7)**, Физкультурниктар **(8)**, Халыҡ-ара альпинистар **(8)**, Төҙөүселәр **(9)**, Донъяның халыҡ-ара төп халыҡтары көнө **(9)**, Башҡортостанда Архив хеҙмәте булдырылған көн **(11)**, Хәрби-һауа көстәре көнө **(12)**, Бөтөн донъя йәштәр көнө **(12)**, Өфө ҡалаһында миллионынсы кеше теркәлеүгә 40 йыл тулған көн **(12)**, Бөтөн донъя һулаҡайҙар көнө **(13)**, Археологтар көнө **(15)**, Бөтөн донъя берәҙәк хайуандар көнө **(15)**, Авиация (Рәсәй Һауа Флоты) көнө **(16)**, Бөтөн донъя гуманитар ярҙам көнө **(19)**, РФ Дәүләт флагы көнө **(22)**, Рәсәйҙең хәрби дан көнө. Курск һуғышында совет ғәскәрҙәре тарафынан немец-фашистарын тар-мар иткән көн (1943), Кино көнө **(27)**, Ядро һынауҙарына ҡаршы Бөтөн донъя хәрәкәт көнө **(29)**, Шахтерҙар көнө **(30)**, Ветеринария хеҙмәткәрҙәре көнө **(31)**.

**Урағайҙа тыуғандар:**

**20 -** спортсы, көрәш буйынса спорт мастеры, милли көрәш һәм билбау менән көрәш буйынса Башҡортостан федерацияһы рәйесе, күп тапҡырҙар Башҡортостандың абсолют чемпионы **Вәкил Ильясовҡа - 60 йәш** (1960).

**15 -** бейеүсе, БАССР-ҙың халыҡ артисы, Йәштәр һәм студенттарҙың Веналағы Бөтөн донъя фестивале лауреаты **Рәүилә Хажиеваға - 90 йәш** (1930).

**27 -** шағирә **Эльмира Сәсәнбаеваға - 70 йәш** (1950).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда Бөтә Рәсәй проекттар конкурсы гранттарына төҙөкләндерелгән өс ҡала биләмәһе асыласаҡ. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы мәғлүмәте буйынса, 26 сентябрҙә - "Бөрө ваҡыты" архитектура-парк ансамблен, 3 октябрҙә - Бәләбәйҙә "Йырлаусы шишмәләр паркы"н, 10 октябрҙә Ишембайҙа майҙансыҡты файҙаланыуға тапшырыу күҙаллана. Объекттарҙы Аксаков көндәре, Республика көнө, Ғаилә көнө саралары барышында асыу планлаштырыла. Ошо өс ҡала 2019 йылда грант алды.

✓Өфө мэры Өлфәт Мостафин ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә Рәсәйҙең Һауа десанты ғәскәрҙәре көнө алдынан десантсыларға үтенес менән мөрәжәғәт итте. "Яҡынлашып килгән байрам менән ҡотлайым һәм хөрмәтле десантсыларыбыҙға ғәмәлдәге сикләүҙәргә һәм санитар талаптарға иғтибар итеүҙәрен һорайым", - тине Өлфәт Мостафин. Әлегә республика биләмәһендә күмәкләп урамда йөрөү тыйыла.

✓Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалы программистары әҙерләгән "Башҡорт бал ҡорто" ҡушымтаһы ялған бал һатып алмаҫҡа ярҙам итә. Платформала Башҡортостандың экологик яҡтан таҙа урындарында умарталыҡ тотҡан умартасылар ғына теркәлә ала. Әле сервиста алты районДАН: Бөрйәндән, Ғафуриҙан, Иглиндан, Ишембайҙан, Күгәрсендән, Мәләүездән умартасылар теркәлгән. Ҡушымтала умартасының видеовизиткаһын ҡарарға һәм уның продукцияһы менән танышырға була.

✓Башҡортостанда, әгәр эпидемиологик хәл мөмкинлек бирһә, 15 августа кинотеатрҙар асыла башлай. Был турала Башҡортостан Республикаһы мәҙәниәт министрының беренсе урынбаҫары Наталья Лапшина хәбәр итте. "Рәсәй Роспотребнадзор идаралығының методик тәкдимдәрен үҙебеҙҙәге 47 кинотеатрға еткерҙек, уларҙа бөтәһе 133 зал эшләй. Әлбиттә, улар, тамашасыларыбыҙ кеүек үк, асылыуҙы түҙемһеҙлек менән көтә", - тине министрлыҡ вәкиле.

✓10 августа "Өфө-Арена"ла Башҡортостан Республикаһы Кубогы өсөн миҙгел алды хоккей турниры планлаштырылған. Төп трофей өсөн "Салауат Юлаев", Түбәнге Каманан "Нефтехимик", Силәбенән "Трактор" һәм Череповецтан "Северсталь" командалары көрәшә. "Салауат Юлаев" хоккей клубының генераль директоры Александр Курносов билдәләүенсә, Башҡортостандың баш ҡалаһында турнир тамашасы менән үткәрелә, әммә аренаға тамашасының дөйөм һанынан 10 проценты ғына индерелә.

✓ *Эксперттар фекеренсә, Башҡортостан эске туризмды һәм эко-туризмды үҫтереү өсөн ғәйәт ҙур мөмкинлеккә эйә. Республиканың төп өҫтөнлөгө - географик яҡтан уңайлы урын һәм төрлө, һоҡланғыс тәбиғәт.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# АЛДАНМАҪ ӨСӨН...

**1 июлдән Рәсәйҙә медикаменттар, аяҡ кейеме махсус код менән маркировкаланды. Маркировкаланмаған тәмәке изделиеларын һатыу ҙа тыйыла.**

Идентификация коды тауарҙы етештереүсенән һатып алыусыға тиклем хәрәкәттә контролдә тоторға ярҙам итәсәк. "Мотлаҡ маркировкалау системаһы баҙарҙың асыҡлығын тәьмин итәсәк һәм ҡулланыусыларҙы ялған әйбер һатып алыуҙан һаҡлаясаҡ. Был бигерәк тә кеше һаулығы һәм ғүмеренә ҡағылған дарыу һатыу өлкәһендә мөһим", - тине Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. 1 июлгә тиклем килтерелгән маркировкаһыҙ дарыуҙарҙы яраҡлылыҡ ваҡыты үткәнсе һатырға мөмкин. Ә аяҡ кейемдәрен 2020 йылдың 1 сентябренә хәтлем маркировкаларға була. Республика парламенты спикеры әйтеүенсә, был йүнәлештә тәжрибә үҙенең һөҙөмтәлелеген иҫбатланы. Ике йыл элек илдә алкоголь продукцияһын мотлаҡ маркировкалау индерелде. Һәр һатып алыусы шешәне тикшерә алды, контрафактҡа шик булғанда контроль-күҙәтеү органын йөпле итеү мөмкинлеге барлыҡҡа килде. Бөгөн магазин кәштәһендә легаль булмаған юл менән алынған тауарҙы табыуы ҡыйын. Мотлаҡ маркировкалауға шулай уҡ хушбуй, автомобиль шинаһы һәм башҡалар инә. Киләһе дүрт йылда мониторинг системаһы Рәсәй баҙарындағы тауарҙың күбеһен йөпле итергә тейеш.

Әйткәндәй, Data Matrix кодын асыу өсөн смартфондағы "Честный знак" тиләүһеҙ ҡушымтаһын ҡулланырға мөмкин. Уның ярҙамында велосипедты, уның рамын, һөт аҙыҡтарын, тәмәкене, тунды, аяҡ кейемен, дарыу, шина, фотоаппарат һәм башҡаларҙы тикшерергә мөмкин. Ҡушымта маркировканы, штрихкодты, чекты һәм ҡаптағы билдәләрҙе күрһәтә.

# КЛАСС ЕТӘКСЕҺЕНӘ...

**Яңы уҡыу йылы башынан Рәсәй уҡытыусылары класс етәкселеге өсөн 5 мең һум өҫтәмә түләү ала башлай. Был хаҡта Рәсәй Федерацияһының мәғариф министры Сергей Кравцов хәбәр итте.**

"1 сентябрҙән Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡушыуы буйынса класс етәкселәренә 5 мең һум өҫтәмә түләүҙәр була", - тип министрҙың һүҙҙәрен килтерә ТАСС. Мәғариф министрлығы башлыҡы шулай уҡ төбәк һәм муниципаль түләүҙәрҙең бөтөрөлмәүен билдәләне. Бынан алда Кравцов яңы уҡыу йылын традицион форматта башларға планлаштырыуҙары, ә дистанцион уҡытыуҙың өҫтәмә булараҡ ҡулланыласағы хаҡында белдерҙе.

# ИРЕКМӘНГӘ

**Республикала "Башҡортостан Республикаһында хәйриә һәм ирекмәндәр эшмәкәрлегенә дәүләт ярҙамы тураһында" законға төҙәтмәләр көсөнә инде.**

Хәҙер ирекмәндәр ғүмер йәки һаулыҡ өсөн хәүеф менән бәйле хәлдәрҙә аҡсалата компенсацияға иҫәп тота ала. Һаулығына зыян килгән осраҡта ирекмәнгә бер тапҡыр бирелә торған түләү ҡаралған. Әгәр ул һәләк булһа, пособие уның ғаиләһенә түләнә. Түләүҙәр төбәк бюджеты аҡсаһы иҫәбенә тормошҡа ашырыла. Түләү шарттарын, күләмен һәм тәртибен республика Хөкүмәте билдәләй. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышында белдереүҙәренсә, коронавируҫҡа бәйле хәл арҡаһында законға ошондай төҙәтмәләр индерелде.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИҪКӘРТЕҮ САРАҺЫ

**Бөгөн Башҡортостанда 21 меңдән ашыу кеше, шул иҫәптән хеҙмәткә саҡырылыусылар һәм 60 йәштән өлкәндәр пневмониянан прививка алды.**

Быйыл республика федераль бюджет иҫәбенә бер йәшкә тиклемге 43 800 балаға һәм 40 500 сабыйға ҡабаттан вакцина һалыу өсөн 95 600 доза һатып алды. "Эпидемиологтар менән кәңәшләшеп, республикала дауахананан тыш пневмониянан өҙлөгөү сәбәпле үлем осраҡтарын кәметеү өсөн тиҙ биреше үсән төркөмдәр араһында ныҡлы иммунитет булдырырға ҡарар ителде, - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Артабан да оло быуынды ошо хәүефле инфекциянан тулыһынса яҡлау өсөн вакцинация темпын шул уҡ кимәлдә һаҡларбыҙ. Тикшеренеүҙәр раҫлауынса, өлкәндәрҙә пневмококктан иммунитет биш йылдан ашыу һаҡлана".

Республика өлкән йәштәгеләрҙә иммунитет булдырыуҙы 15 августҡа тиклем тамамларға ниәтләй. Бөтәһе 40 мең кешегә прививка яһау күҙаллана. Был күрһәткес былтырғынан дүрт тапҡырға күберәк. Башҡортостанда үпкә сирле 60 йәштән өлкән 68 989 кеше медицина ойошмаларында иҫәптә тора. Ҡалған 18 989 кешегә прививка эшләү 2021 йылға планлаштырыла. Шулай уҡ башҡа хәүеф төркөмдәрө өсөн пневмококк вакцинаһын һатып алыу күҙаллана. "Хроник үпкә сиренән яфаланған 60 йәштән өлкән граждандарға вакцина яһау мөмкинлеге һәм кәрәклеге мәсьәләһен хәл итеү өсөн йәшәгән урын буйынса поликлиникаға мөрәжәғәт итергә кәңәш бирәбеҙ", - тип хәбәр иттеләр Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан.

# ЯЛ ИТТЕҢМЕ?

**Башҡортостанда Рәсәйҙең көньяҡ курорттарынан ҡайтыусыларҙы аэропортта, авто- һәм тимер юл вокзалында, шулай уҡ автомобилдә сәйәхәт итеүселәр өсөн өйҙә коронавирусҡа тикшерә башлайҙар. Башҡортостан Республикаһында коронавирус инфекцияһының таралыуына юл ҡуймау буйынса оператив штаб ултырышында ошондай ҡарар ҡабул ителде. Уны республика Башлығы Радий Хәбиров уҙғарҙы.**

Хәҙер барлыҡ курорттарҙа ла ял итеүселәр күп, социаль дистанция һаҡланмай, кешеләр битлек кеймәй - был инфекцияның таралыуына булышлыҡ итә, тип билдәләнде Штаб ултырышында. Шулай уҡ Рәсәйҙең көньяғындағы бер нисә ҡалала һәм районда коронавирус инфекцияһы сығанағы бар. Айырыуса Краснодар крайы (Сочи, Адлер, Анапа һәм башҡа), Ҡырым (Ялта, Алушта, Евпатория) курорттарында ял итеп ҡайтҡандарҙы тикшерәләр. Оператив Штаб быйыл Башҡортостанда йәшәүселәргә курорттарға барыуҙан тыйылып торорға кәңәш бирә, сөнки коронавирус инфекцияһы таралыу хәүефе һаҡлана, ә курорттарҙа ул юғары.

# ТӨРКИӘГӘ ОСОРҒА БУЛА

**Рәсәй 1 августан халыҡ-ара авиабәйләнеште тергеҙә, тип хәбәр итте "РИА Новости" Рәсәй Федерацияһы Премьер-министры Михаил Мишустиндың белдереүенә һылтанма менән.**

Рейстар Мәскәүҙән, Мәскәү өлкәһенән, Санкт-Петербургтан һәм Дондағы Ростовтан башҡарыла. "Халыҡ-ара авиабәйләнеште тергеҙеү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Шул уҡ ваҡытта беҙ эпидемиологик хәл, сир күрһәткесе һәм урталыҡ принциптарынан сығып эш иттек", - тине Мишустин Рәсәй Хөкүмәтендәге кәңәшмәлә. Премьер-министр билдәләүенсә, был ҡарар рәсәйҙәрҙең сит илдән ҡайтыуын да тиҙләтергә тейеш. Авиабәйләнеш тәү сиратта Бөйөк Британия, Төркиә һәм Танзания менән тергеҙелә, тип вице-премьер Татьяна Голикованың һүҙҙәрен килтерә "Интерфакс". 1 августан Лондонға осорға мөмкин. Төркиәлә 1 августан рәсәйҙәр өсөн Анкара һәм Истанбул, 10 августан Анталья, Бодрум һәм Даламан курорт ҡалалары аэропорттары асыла. Бынан тыш, Танзания, атап әйткәндә, Занзибар менән авиабәйләнеш тергеҙелә. Мәскәү, Санкт-Петербург һәм Дондағы Ростов аэропорттары өсөн килгән пассажирҙар һаны буйынса сикләү бөтөрөлә, тип белдерҙе транспорт министры Евгений Дитрих.

# ТУРИСТАР АҒЫЛАСАҠ

**Башҡортостан Рәсәйҙә турист-рекреация кластерҙарын булдырыу һәм экотуризмды үҫтереү өсөн федераль конкурстың финалсылары иҫәбенә инде. Был хаҡта 28 июлдә Рәсәй Федерацияһы Президентының тәбиғәтте һаҡлау, экология һәм транспорт эшмәкәрлеге мәсьәләләре буйынса махсус вәкиле Сергей Иванов етәкселегендәге конкурс комиссияһы ултырышы һөҙөмтәләре буйынса билдәле булды.**

Башҡортостандан федераль грантҡа һәм Стратегик башланғыстар агентлығынан профессиональ ярҙамға ике проект дәғүә итә. Улар араһында - "Мәғрүр Ирәмәл". Уға "Ирәмәл" тәбиғәт паркы һәм "Урал-Тау" дәүләт тәбиғәт заказнигы биләмәләре инде. Икенсе проект - "Башҡортостан йөрәге", уға "Еҙем" тәбиғәт паркы, "Башҡортостан" милли паркы, Торатау, Толпар шаршылыҡтары, Киндерле-Леднев-Октябрьский мәмерйә системаһы, Туғарсалған күле, Аҫҡын боҙ мәмерйәһе ҡарай. Эксперттар фекеренсә, Башҡортостан эске туризмды һәм эко-туризмды үҫтереү өсөн ғәйәт ҙур мөмкинлеккә эйә. Республиканың төп өҫтөнлөгө - географик яҡтан уңайлы урын һәм төрлө, һоҡланғыс тәбиғәт. Бындай кластерҙарҙың төп маҡсаты - туристар ағымын йәйгә һалыу.

# ЕҢЕЛЛӘШТЕРЕЛДЕ

**Ата-әсәләргә 2020 йылдың 15 июленән һуң тыуған балаларға СНИЛС юллау талап ителмәй, тип билдәләнеләр Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһендә.**

Рәсәй Пенсия фонды балаға СНИЛС-ты әсәнең Шәхси кабинетына ебәрә. Бындай сервис Дәүләт хеҙмәттәре порталында бойомға ашырыла. "Рәсәй Пенсия фондының мәғлүмәт системаһында ЗАГС реестрынан бала тыуыу тураһында мәғлүмәт килгәс, автоматик рәүештә сабыйҙың шәхси иҫәп номеры рәсмиләштерелә һәм Берҙәм дәүләт хеҙмәттәре порталында әсәнең Шәхси кабинетына ебәрелә, - тип асыҡлыҡ индерҙеләр Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһендә. - Был сервисҡа Берҙәм дәүләт хеҙмәттәре порталында теркәлгән ата-әсәләр инергә мөмкин. Электрон почта йәки SMS буйынса СНИЛС тураһында хәбәр алыу өсөн шәхси кабинетта тейешле көйләгесте һайларға кәрәк". 15 июлдә файҙаланыуға тапшырылған яңы сервис эшләй башлағандың тәүге көнөндә Дәүләт хеҙмәттәре порталында әсәләрҙең шәхси кабинетына тотош Рәсәй буйынса 5 300 баланың СНИЛС-ы тураһында мәғлүмәт ебәрелде. Баланы тәрбиәгә алған ғаиләләр өсөн СНИЛС юллауҙың элеккесә ғариза биреү тәртибе һаҡлана, сөнки кәрәкле мәғлүмәттәрҙе тәрбиәгә алыусылар үҙҙәре генә бирә ала.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓27 июлдән Өфө ҡалаһы биләмәһендә ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре "Велосипедсы" операцияһын үткәрә. Дәүләт автоинспекцияһында билдәләүҙәренсә, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙған өсөн велосипедсыларға 800 һум административ штраф һалына. Әгәр велосипедсы иҫерек булһа, 1000-1500 һумлыҡ штраф менән административ яуаплылыҡҡа йәлеп ителеүе мөмкин. Йыл башынан Өфөлә велосипедсылар ҡатнашлығында 34 юл фажиғәһе теркәлгән, уларҙа 35 кеше йәрәхәтләнгән, шуларҙың 15 осрағында - балиғ булмағандар.

✓Өфө биләмәһендә ЮХХДИ-һы хеҙмәткәрҙәре Үҙйөрешлө машиналарҙың һәм башҡа төр техниканың техник торошон күҙәтеү буйынса дәүләт инспекцияһы менән берлектә "Трактор" махсус операцияһын уҙғара. Ведомство хеҙмәткәрҙәре теркәү ҡағиҙәләрен үтәүҙе, техник тикшереүҙең, дәүләт билдәләренең һәм трактор, үҙйөрешлө юл-төҙөлөш машиналары менән идара итеүгә рөхсәттең, идара итеүгә таныҡлыҡтың (тракторсы-машинист таныҡлығы) булыуын тикшерә. Иҫкәртеү саралары 14 августҡа тиклем дауам итә.

✓Өфө Рәсәйҙең башҡа ҡалалары менән бергә 2 августа бер үк ваҡытта "Уҙыш.РФ" Бөтә Рәсәй ярыммарафонында йүгерә башлай. Йүгерергә яратыусылар һәм профессионалдар 21,1, 10 һәм 5 саҡрым араны үтергә тейеш. "Балалар өсөн бер саҡрымлыҡ трасса әҙерләнек, кескәйҙәр унан ата-әсәләре менән бергә йүгерергә мөмкин. Һәр ҡатнашыусыға - старт пакетында Өфө ҡалаһы символы менән футболка, ә финишта үҙенсәлекле миҙал тапшырыла", - тип һөйләне ойоштороусылар.

✓Халыҡ һаны артыу һөҙөмтәһендә мәктәпкәсә белем биреү балалар учреждениеларына көсөргәнеш арта. Һәм демографияның үҙгәреүе яңы балалар баҡсаларына ихтыяж тыуҙыра. Бөгөн баш ҡалала бер үк ваҡытта 325 урынлыҡ биш яңы мәктәпкәсә учреждение төҙөлә. Уларҙың өсөһө Һупайлы бистәһендә булһа, Яркий һәм Баланово-Яңы Александровка бистәләрендә - берәр буласаҡ. Улар барыһы ла быйыл сафҡа индереләсәк.

✓1 сентябрҙән Башҡортостандың Әбйәлил, Благовар, Федоровка һәм Янауыл районадарының 1-5-се класс уҡыусылары берҙәм мәктәп формаһына күсә. Был муниципалитеттарҙа һынау проекты сифатында берҙәм мәктәп формаһын индерә башлайҙар.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ ***Беҙҙең уҡыу йорто коллективына студенттарҙа башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләү, тарихҡа ҡыҙыҡһыныу уятыу йәһәтенән "Киске Өфө"нөң әһәмиәте бик ҙур. Башҡорт теле, этнография, география буйынса диктанттар беҙҙә үтә.***



## ЙОЛАНДАН ЙӘН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Орнаменталь композициялар төҙөлөшөн һәм тегеү техникаһын анализлағанда Е.Е. Никонорова таҫтарҙарҙың дүрт төркөмөн айырып ҡарай. Ике төркөм, иң традицион, оя биҙәкле (розеточный) йәки һыҙатлы (йыш осраҡта сығып торған фигуралар) орнаменттары менән айырылған. Селтәр сигеү өҫтөнлөк иткән таҫтарҙар айырым төркөмгә индерелгән. Аруҡ таҫтарҙар туҡыусылыҡты хәтерләткән киртләс шыма нағыш (уступчатая гладь) ярҙамында ҡайылған; был ҡайыу алымы һатып алынған туҡымаларҙа айырыуса йыш ҡулланылған, шул иҫәптән төҫләләрендә лә (йышыраҡ ҡыҙыл).

Таҫтар-һарауыс комплекстарының һәм уларға бәйле ҡайыуҙарҙың килеп сығышы тураһындағы һорауҙар этнографтарҙы күптән ҡыҙыҡһындыра. Авторҙар орнаменталь мотивтарҙың бик боронғо булыуы, башҡорттарҙың биҙәү сәнғәтендә лә иртә осорҙарҙа уҡ ҡулланыла башлауы һәм "башҡорт ерлегендә" бик оҙаҡ йылдар үҫеш алыуына шик белдермәй. Түбәнге сыуаш, мари, удмурт халыҡтарының "башҡа ябынған таҫтамалдары" һәм башҡорт таҫтарҙары араһында оҡшашлыҡтар булыуына күптән иғтибар иткәндәр. Н.В. Бикбулатов башҡорттар Волга-Урал буйында йәшәгән боронғо халыҡтарҙан хисаплы ҡайыу алымдарын үҙләштергән, тигән һығымтаға килә; Волга буйы булғарҙары быны киң таратыуҙа мөһим роль уйнауын фаразлай. П.В. Денисов сыуаштарҙың "сурпан"дары һәм болгарҙарҙың "убрус"тары араһындағы оҡшашлыҡтарға иғтибар итә һәм "таҫтамалға оҡшаш баш кейеме Волга-Кама буйы территорияһына Көнсығыштан килеп ингән, быға Волга буйы булғарҙары булышлыҡ иткән булһа кәрәк", тип фаразлай. В.Н. Белицер Урал буйы һәм Урта Волга буйында бындай баш кейемдәренең киң таралыуында көньяҡ-көнсығыш дала районларынан килгән "боронғо мәҙәни тулҡын" сәбәпсе тип иҫәпләй, уның фекерен Н.И. Воробьев та ҡеүәтләй. Бөтә был ҡараштар тәү сиратта Волга-Урал төбәгенә ҡағыла, әммә улар башҡорттарҙың таҫтамалға оҡшаш баш кейемдәре һәм уларға ҡараған ҡайыуҙар ҡайҙан барлыҡҡа килеүен аңлата алмай, сөнки уларҙың таҫтар-һарауыс комплексы Көнбайыш Себерҙә - Волга буйының фин-пермь халыҡтарынан ярайһы уҡ алыҫ урынлашҡан урында булған.

Ошоға бәйле Азиялағы оҡшашлыҡтар актуаль күренә: Обь уғырҙары (бигерәк тә ханттар менән), шулай уҡ Урта Азияның ҡайһы бер халыҡтары менән (ҡарағалпаҡтар, тау тажиктары). Т.М. Акимова мәғлүмәттәренә ярашлы, "ҡыя сәнсем"де сыуаштар "хант йөйө" тип атап йөрөткән. С.И. Руденко башҡорт ҡайыуҙарындағы "ҡыя сәнсем" ханттарҙыҡына оҡшаш булыуын билдәләй (сыуаш һәм мариҙарҙыҡына ла параллель). Шул уҡ ваҡытта ул изге ағас һәм уның ике яғында хайуандар торған мотив Көньяҡ-көнбайыш Азияға ҡарауын инҡар итмәй; ғалим фекеренсә, был мотив Обь йылғаһы бассейнына борондан "күсмәндәр мөхите аша" (төркиҙәргә тиклемге күсмәндәр күҙ уңында тотола) килеп инеүе ихтимал. Орнаменттың картаһын төҙөүгә ҙур иғтибар бүлгән С.В. Иванов Көнбайыш Себерҙә (көньяҡ хант һәм манси халыҡтарында) һәм Көнсығыш Европала был композицияның барлыҡҡа килеүен "Көньяҡ-көнбайыш Азия халыҡтары сәнғәте йоғонтоһо"на бәйле, тип иҫәпләй. Е.Е. Никонорова башҡорттарҙың хисаплы ҡайыу орнаменттарын тикшереп, уның күп ҡатлылығын, унда иртә һәм һуңғы, Иран һәм Көнсығыш Европа традициялары барлығын билдәләй. Улар башҡорттарға төрлө тарихи осорҙарҙа урындағы фин-уғыр халыҡтары, йә Урта Азияла һәм Уралда ҡалған Иран телле ҡәбиләләр менән бәйләнеш һөҙөмтәһендә үтеп ингән, тип фаразлай. Үткәндәрҙе күҙәтеп, ул иң боронғо орнамент ҡатламдарын Евразияның көньяғындағы беҙҙең эраға тиклемге II-I меңъйыллыҡтағы археологик мәҙәниәттәргә бәйләй.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

## *БЕҘҘЕ ЯРАТҠАН ДУҪТАР*

# УҠЫУ ЙОРТО ҺӘМ ГӘЗИТ

**Шәхестең формалашыуында ул йәшәгән мөхит, уны уратып алған кешеләр, хәл-ваҡиғалар ҙур роль уйнай. Ошо хәҡиҡәтте иҫәпкә алып, Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты үҙенең тәрбиәүи эшмәкәрлеген ойоштороғанда, иң беренсе, йәш быуынға илһөйәрлек тойғоһон һалыуҙы маҡсат итеп ҡуя һәм уны тормошҡа ашырыу өсөн бар шарттарҙы булдырырға тырыша. Бөгөн был уҡыу йортонда белем биреүҙең традицион алымдары һәм яңыса ысулдар бер-береһе менән тығыҙ үрелеп бара. Алдынғы технологияларҙың уңышлы ҡулланылыуын коронавирус инфекцияһы таралыуына бәйле килеп сыҡҡан ваҡиғалар ҙа асыҡ күрһәтте. Институт бер ниндәй ығы-зығыға бирелмәй, уҡытыуҙы дистанцияла ойоштора алды. Диплом яҡлау мәле лә уңышлы бара. Әле ҡабул итеү комиссияһы эш башланы. Абитуриенттарға, ата-әсәләргә уңайлы булһын өсөн консультация үҙәге булдырылды. Ул төп корпуста урынлашҡан, әммә инеү урыны айырым. Инфекциянан һаҡланыу маҡсатында бөтә санитария талаптары үтәлә.**




Беҙҙең студенттар - башлыса ошо төбәк ауылдары мәктәптәре уҡыусылары. Атай-әсәйҙәренә эйәреп кенә килгән балалар ярты йылдан үҙ-үҙенә ышанған, ҡыйыу ҡыҙ һәм егеттәргә әйләнә. Был тәңгәлдә эшлекле, берҙәм, рухлы коллектив мөһим эш алып бара. Төп маҡсатыбыҙ - студентты төрлө яҡлап үҫтереү. Ашағанмы, йоҡлағанмы, дөйөм ятаҡҡа ҡайтҡанмы - барыһы ла күҙәтеү аҫтында. Бөгөн йәштәр өсөн ымһындырғыс әйберҙәр бик күп, уларҙы шуларҙан араларға тырышабыҙ. Буш ваҡыттарын файҙалы һәм күңелле итеп үткәреүҙәренә булышлыҡ итәбеҙ. Тәрбиә эшен студенттарға сифатлы һөнәри белем биреү менән бергә алып барабыҙ. Бөгөн унһыҙ булмай, сөнки был системала ла конкуренция көслө. Әхлаҡлы, тәрбиәле, рухлы, фекерле, тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе белгән, физик яҡтан көслө шәхес үҫтерергә тырышабыҙ һәм был тәңгәлдә "Киске Өфө" гәзитенең беҙгә ярҙамы, роле баһалап бөткөһөҙ. Быны бергә эшләгән хеҙмәттәштәрем дә дәлилләй.

***Инна Ситнова, Сибай институты директорының уҡыу-уҡытыу буйынса урынбаҫары:*** Билдәле булыуынса, институт милли мәғарифты, мәҙәниәтте үҫтереү буйынса ошо төбәктең үҙәге булып тора һәм бар мөмкинлектәрҙе лә файҙаланырға тырыша. Беҙҙең уҡыу йорто коллективына студенттарҙа башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләү, тарихҡа ҡыҙыҡһыныу уятыу йәһәтенән, һис шикһеҙ, "Киске Өфө"нөң әһәмиәте бик ҙур. Башҡорт теле, этнография, география буйынса диктанттар һәр ваҡыт беҙҙә үтә. Иң мөһиме шул - беҙ ике йүнәлештә, атап әйткәндә, башҡорт теле, әҙәбиәте һәм филология буйынса белгестәр әҙерләйбеҙ. Бөтә факультеттарҙа ла тел өйрәнелә, студенттар туған телдәрендә ирекле фекер йөрөтә, аралаша. Мәҫәлән, тәбиғәт фәндәре-математика факультетында уҡыусы Данир Ишбаев шиғыр яҙа. Хоҡуҡ факультеты студенты Илсиә Шәмсетдинованың да рухлы шиғырҙары берәүҙе лә битараф ҡалдырмай. Инженер һөнәренә уҡыусы технология факультеты студенттары "Ыстағафирулла" КВН командаһы ойоштороп, башкорт КВН-ында кубокка эйә булды, бынан тыш, Татарстанда, Ҡаҙағстанда Башҡортостан намыҫын яҡланылар. "Инеш" түңәрәге, "Юлдаш" гәзите һәм башҡалар - былар барыһы ла беҙҙең студенттарҙы камиллаштырыуҙа мөһим роль уйнай. Шәйехзада Бабичтың 120 йыллығы айҡанлы "Бабич вариҫтары" исемле республика конкурсының йомғаҡлау тантанаһы ла Сибай институтында үтәсәк. Әйткәндәй, Бабичҡа һәйкәл тәүгеләрҙән булып 1997 йылда беҙҙә асылды. Һанлы мәғлүмәт технологияларына күсеү осоро бара, беҙҙең киләсәктә бик күп проекттар, идеялар, пландар бар. Уларҙы ла атҡарып сығыуыбыҙға ышанам.

***Ләйсән Хәсәнова, секретарь:*** Көнөнә меңәрләгән кеше шылтырата, ҡунаҡтар ҡабул ителә. Ҡабул итеү бүлмәһе - институттың иң ҡайнап торған урыны, тиһәң, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Азат Сәлимйән улы Вәлиевҡа тәғәйенләнгән гәзит-журналдарҙы ҡарап сығам да, Сибай институты тураһында ҡайһы баҫмала, нимә тураһында яҙылған, барыһын да билдәләп, етәксегә ҡыҫҡаса мәғлүмәт бирәм. Иң беренсе ҡулыма "Киске Өфө" гәзитен алам. Бик тәрән фекер йөрөткән, киң диапазонлы баҫма. Тарихи материалдарға ҙур урын бирелә. Бынан тыш, заман башҡорттары өлгөһө хаҡында мәғлүмәт күп. Минә айырыуса "Уңыш ҡаҙан" рубрикаһы оҡшай. Быға тиклем беҙ ундай белемде белмәй ҙә инек. Ә бына "Киске Өфө"нөң ошо темаға мөрәжәғәт итеүе, үҫеш серҙәре менән бүлешеүе беҙгә һәм студенттарға файҙаға ғына булды.

***Дилә Йәғәфәрова, хоҡуҡ һәм кадрҙар буйынса бүлек начальнигы:*** Эшебеҙ туранан-тура студенттарҙы уҡытыуға ҡағылмай, әммә беҙ белем усағында барған бөтә ваҡиғалар уртаһында ҡайнайбыҙ. Ғөмүмән, беҙҙә ситтән тороп күҙәтеүселәр юҡ, белем, тәрбиә эшенә иҫәп-хисапсылар ҙа, иҡтисад бүлеге лә, иҙән йыуыусылар ҙа, урам һепереүселәр ҙә, дөйөм ятаҡта эшләүселәр ҙә үҙ өлөшөн индерә. Уҡыу йорто бик күп баҫма алдырта, әммә миңә үҙенең аҡыллы, тос фекерҙәре булған, тарихи материалдарҙы яҡтыртҡан "Киске Өфө" гәзите үтә лә яҡын. Беҙҙең бүлек хеҙмәткәрҙәре уның һәр һанын күтәп ала һәм тәүге битенән алып аҙаҡҡаса ентекләп уҡып сыға. Беҙгә ҡарап, бухгалтерия хеҙмәткәрҙәре лә гәзитте ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡый. "Киске Өфө" гәзитендәге материалдарға, баҫманың һәр һанына анализ яһала. Бик уҡымлы, студенттар өсөн дә кәрәкле баҫма, тип иҫәпләйбеҙ.

***Дилә Хәмитова, уҡыу һәм производство буйынса практика етәксеһе:*** "Киске Өфө"нө бала саҡтан уҡыйым. Аҡыллы фекерҙәр тупланмаһы ул. Бер уҡыуҙа ғына әллә күпме яңылыҡ алаһың, күңелеңде байытаһың, рухыңды нығытаһың, фәһем алаһың. Шуныһы ҡыуаныслы, институт етәкселеге быны яҡшы аңлай һәм йыл да баҫмаға яҙылып, барыбыҙҙы ла ҡыуандырып тора.

***Гөлсәсәк Рәхмәтуллина, һөнәри йүнәлеш биреү һәм студенттарҙы эшкә урынлаштырыу буйынса бүлек етәксеһе:*** "Киске Өфө"нө барыһы ла ярата беҙҙә. Йыйыштырыусы апайҙарыбыҙ ҙа иҙәндәрҙе йыуып, тирә-яҡты тәртипкә килтергәс, гәзитте ҡосаҡлап йөрөп уҡый. Иң башта һәр береһе айырым уҡып сыға, аҙаҡ үҙ-ара фекер алышалар. Материалдар буйынса ҡыҙыу, йәнле бәхәстәрҙең бер нисәүһенең шаһиты булырға ла тура килгәне бар. Тимәк, баҫма уҡыусыны уйландыра, фекерләтә, битараф ҡалдырмай.

"Киске Өфө" беҙҙең ырыуыбыҙ гәзите тиһәм, һис кенә лә хата булмаҫ. Әсәйем, уның әсәһе, туғандары, бөтә нәҫелебеҙ менән уҡыйбыҙ уны. Ә уҡытыусы өсөн был баҫма - өҫтәл китабы, энциклопедия. Беҙҙең ғаилә лә уны яҙҙырмай ҡалдырмай. Ирем дә ошо институтта эшләй, студенттарға иҡтисад буйынса һабаҡ бирә. Гәзиттә иҡтисадҡа ҡағылышлы һорауҙар ҙа күтәрелеүен ул юғары баһалай. Фекерләү, дөрөҫ һүҙ һөйләү, уның кешенең тормошона, интеллектуаль үҫешенә тәьҫир итеүе - беҙҙең өсөн осо-ҡырыйы күренмәгән бер өлкә, уны өйрәнәһе лә өйрәнәһе. Ошо теманы тәүгеләрҙән булып "Киске Өфө" яҙып сығарҙы һәм беҙгә тормоштоң быға са белмәгән өр-яңы яғын асты. Институтҡа гәзитте бер район кимәлендә алдыртабыҙ. Элек-электән килгән матур йола ул беҙҙә. Дөйөм ятаҡта ла уҡыйҙар уны. Шуға ла студенттарыбыҙ тәртипле, аҡыллы, итәғәтле, уларҙы эшкә саҡырып ҡына торалар. Мәҫәлән, бөгөн бер егетебеҙ "Артек"та эшләп йөрөй. Ул ошо халыҡ-ара лагерҙа практика үткәйне, ҡулына диплом алыу менән уны эшкә саҡырҙылар. Ундай миҫалдар бик күп беҙҙә. Артабан да шулай матур студенттар тәрбиәләргә яҙһын. Шулай уҡ яратҡан баҫмабыҙ "Киске Өфө"гә артабанғы уңыштар, ижади осоштар теләйем!

**Рәүилә ХӘСӘНОВА,**
**Сибай институтының матбуғат хеҙмәте етәксеһе.**

✓ *Ҡыпсаҡтарҙың башҡорт халҡы составына инеп киткән этник төркөмдәре араһында йылан-ҡыпсаҡтар ҙа бар, һәм улар, ҡыпсаҡтарҙың үҙаллы бер ҙур этник берләшмәһенә әйләнеп, айырым ырыу исемен алған.*

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

**Башҡорттар, башҡа төрки ҡәүемдәре - ҡаҙаҡтар, нуғайҙар, төркмәндәр, ҡырғыҙҙар, ҡырым татарҙары, ҡарағалпаҡтар, үзбәктәр кеүек үк, боронғо осорҙарҙан бирле үҙҙәренең йәмғиәт төҙөлөшөн кландар аша ғәмәлгә ашырған. Уларҙың эске тормошоноң ошондай үҙенсәлеген Төрки, Хазар ҡағанаттары, Дәште Ҡыпсаҡ, Алтын Урҙа дәүләтселегененең кире ҡаҡҡыһыҙ бер сифаты итеп ҡарау фарыз. Был дәүләттәрҙең ижтимағи нигеҙен ырыуҙар системаһы хасил иткән, шунлыҡтан һәр бер төрки дәүләтендә эль (ил), иләү, уруг (ырыу), аймаҡ, түбә кеүек административ терминдар киң таралған була.**

# ЙЫЛАН ЫРЫУЫНАН,

## боронғо башҡорт затынан беҙ



Башҡорт иленең барлыҡҡа килеүендә һәм күп быуатлыҡ тарихында ырыуҙар төп роль уйнаған, уның үҫә һәм ҙурая барған ырыу-ҡәбилә системаһында 40-тан ашыу айырым, үҙаллы берәмектәрҙән тоған ырыуҙар номенклатураһы хасил булған. Дөйөм Башҡорт иле составында эске үҙаллылығын бар замандарҙа ла һаҡлап алып ҡала алған башҡорт йәмғиәте XVI быуат урталарынан башлап Рус дәүләтенә ҡушыла башлаған осорҙа ла үҙенең ырыуҙар төҙөлөшө нигеҙендә йәшәүен дауам итә. Тарихи Башҡортостан ерлегендә хасил булған һәр башҡорт ырыуы Рус административ ҡоролошонда юридик рәүештә үҙенә тәғәйенләнгән һәм беркетелгән территорияла үҙаллы олоҫ (волость) исемен йөрөтә. Ошо башҡорт олоҫтары араһында башҡорт аҫабалары йәшәгән Йылан олоҫо ла була.

Йылан ырыуы башҡорттары тарих аренаһында нисек пәйҙә булған икән? Ошо хаҡтағы мәғлүмәттәрҙе барлап уҙайыҡ.

Ҡайһы бер тикшеренеүселәр иҫәпләүенсә, йылан ырыуының тамырҙары ҡыпсаҡтарға барып тоташа. Тарихсы-этнолог Р.Ғ. Кузеев был хаҡта былай тип яҙа: "Йылан ырыуының ҡайһы бер бүлемдәрендә ҡыпсаҡ этнонимияһы осрауы йыландарҙың XIII-XIV быуаттарҙа ҡыпсаҡтар составына инеүен инҡар итмәй; 1953 йылға ҡараған ялан (полевой) тикшеренеүҙәрҙә йылан ырыуы ҡарттарының береһе "беҙ йылан-ҡыпсаҡтар", тип белдергән".

Әммә быны йыландарҙың ҡыпсаҡ нәҫеленән булыуҙары менән бер рәттән, уларҙың ата-бабаларының урта быуаттарҙағы Дәште Ҡыпсаҡ ҡәүемдәре составына инеүҙәре менән дә аңлатып була. Тап шул осорҙағы ғәрәп сығанаҡтарында Евразия далаларында көн итеүсе барса халыҡтар дөйөм ҡыпсаҡ исеме аҫтында билдәле булыуын иҫтән сығарырға ярамай. Ошоға параллель миҫал рәүешендә Алтын Урҙаның Джучи олоҫонда йәшәүселәрҙең барыһын да ул замандарҙағы Европа илдәрендә "татар", тип атап йөрөтөүҙәрен килтереп була.

Тарихсы Салауат Хәмиҙуллин һәм башҡа тикшеренеүселәр йылан ырыуы тарихының байтаҡҡа боронғораҡ осорҙарға барып етеүен билдәләй. Мәҫәлән, XII быуатта йәшәгән әрмән тарихсыһы Матвей Эдесский бына ниндәй мәғлүмәт ҡалдырған: "499 йылда (1050 йылдың 9 мартынан 1051 йылдың 8 мартына тиклем) римлеләргә бик яман һөжүмдәр булды. Күп провинциялар таланыуға, ҡырылыуға дусар ителеп, бәшәнәктәр - юҡ итеү яғынан тотоп торғоһоҙ кешеләр тарафынан харабаларға әүерелдерелде... Йылан халҡы, үҙ территорияларының сиктәрен боҙоп, "ерән сәслеләр" ерҙәренә күскәнлектән, ошо ҡасҡындар уғыҙҙарҙы һәм бәшәнәктәрҙе ҡыуып ебәрҙе, һәм барса ошо ҡәүемдәр берләшеп, үҙҙәренең ярһыуын римлеләргә йүнәлтте. Константинополь оло бәләләргә тарыны". Бында һүҙ барған йылан халҡы - йылан исеме аҫтында билдәле булған боронғо башҡорт ырыуы кешеләренең ата-бабалары булғандыр, тип фараз итергә була.

Ә "ерән сәслеләр" кемдәр булған һуң? Иң элек рустар ҡыпсаҡтарҙы "половецтар", тип атағандарын иҫәпкә алырға була. Иҫке славян телендә "плава" һүҙе булып, ул "һалам" тигәнде аңлатҡан икән. "Половый" һүҙе һары һалам төҫөн белдергән. Тимәк, ҡыпсаҡтарҙың рустар биргән "половцы" ҡушаматы һары сәсле кешеләргә ҡарата әйтелгән дә инде. Тикшеренеүсе Г.Е. Грумм-Гржимайло ҡытайҙарҙың да ҡыпсаҡтарҙың ерән сәсле, зәңгәр күҙле халыҡ икәнлектәрен теркәп ҡалдырыуын билдәләй. Әрмән авторының "ерән сәслеләре" тап ошо ҡыпсаҡтар булыуына шик юҡ. Бынан йылан ҡәүеменең ҡыпсаҡтар менән ҡәрҙәш булмауы асыҡлана, сөнки тап шул халыҡ "ерән сәслеләр" иленә баҫып ингән була.

Ошо тарихи ваҡиғалар башҡа бер сығанаҡтарҙа ла сағылыш тапҡан. Шул уҡ XII быуат башында йәшәгән ғәрәп авторы Шәрәф аз-Заман әл Мәрвәзи бик оҡшаш мәғлүмәт ҡалдырған: "Улар (төркиҙәр) араһында кун тип аталыусы төркөм бар, улар, ҡытай ханынан ҡурҡып, Ҡытай еренән килгән... Уларҙы кай исемле халыҡ эҙәрләгән... Шунан кундар шары ерҙәренә күсеп киткән, ә шарылар төркмән ерҙәренә күскән. Төркмәндәр уғыҙ ерҙәренә күсенгән, ә уғыҙҙар Әрмән диңгеҙенә яҡын булған бәшәнәктәр еренә күсеп киткән". Бында шары халҡының шул уҡ "половец-ҡыпсаҡ" ҡәүеменә тура килеүен, ә уларҙы ҡыҫырыҡлаған кайҙарҙың әлеге "йылан" халҡы икәнлегенә ышанып була. Ҡыпсаҡтарҙы бер үк заманда үҙ биләмәләренән ҡыуып ебәреүсе ҡәүемде әрмән авторы йылан тип атаһа, шул осорҙа йәшәгән ғәрәп ғалимы кай исемендә телгә ала. Был ике төрлө аталып йөрөтөлгән ҡәүемдең бер үк халыҡ булыуы хаҡында тикшеренеүсе Й. Маркварт та белдерә.

VII-X быуаттар арауығын эсенә алған "Танхуйяо" ("Тан династияһы күҙәтеүе") хроникаһында кай ҡәбиләһе тамғаһының йылан билдәһе рәүешендә булыуы теркәлгән. Шулай уҡ уғыҙҙарҙың составында кайи, төркмәндәрҙә кайы ырыуҙары булыуы билдәле. Ошоға бәйләп, тарихсы Ю.А. Зуев былай тип яҙа: "IX быуаттан башлап, кайылар төркмән-уғыҙҙарҙың бер ҡәбиләһе рәүешендә билдәле була. Төркмәндәрҙең кайыһы һәм ҡытай сығанаҡтарындағы си (һаи) халҡының бер үк ҡәүем булыуына шик юҡ, сөнки улар XIX быуатҡа тиклем 11 быуат элегерәк "Танхуйяола" килтерелгән бер үк тамғаларын һаҡлап ҡала алған".

Ҡаҙаҡ белгесе С.М. Ахинжанов "кай" һүҙенең боронғо монгол диалекттарының береһендә йылан мәғәнәһендә ҡулланылыуына иғтибар итә. Ошо ғалимдың фаразы буйынса, кай этнонимының төрки телендәге варианты ла мотлаҡ булырға тейеш. Ул бер үк төрлө тиерлек әйтелеп йөрөтөлгән "джилан", "йылан" атамаларына тап килә. С.М. Ахинжанов ошо этнонимдың төрки халыҡтарынан тик башҡорт халҡы составында ғына булыуын билдәләй. Әммә, ғалим йылан тамғалы кай ҡәбиләһененең төркиҙәрҙә башҡа бер атама - уран, тип аталыу мөмкинлеген дә күҙаллай. Уран этнонимы Дәште Ҡыпсаҡ илендә киң билдәле булған икән. Тикшеренеүсе үҙ фаразын раҫлар өсөн XIII быуатта уҡ төҙөлгән "Төрки-ғәрәп тәржемәсеһе" китабында "уран" һүҙен ғәрәпсәгә "йылан" мәғәнәһендә тәржемә ителеүен билдәләй: "Змея - елан; змея-гадюка - уран". Тимәк, боронғо төркиҙәр ҡара йыланды уран тип атаған булып сыға. Зирәк ғалим "уран" һүҙенең килеп сығышында "ура" төрки тамыры булып, урандың уралып ятыусы йылан, йәғни, уран-йылан мәғәнәһен аңлатыуына ишаралай. Шуға ҡарамаҫтан, тарихсы Салауат Хәмиҙуллин боронғо сығанаҡтарҙағы йылан халҡы һәм башҡорт ырыуҙары составында айырым урын биләгән йылан ырыуы араһында тура-нан-тура тарихи бәйләнеш һәм күсәгилешлек булыуын ысынбарлыҡҡа яҡынираҡ, тип иҫәпләй. Ҡыпсаҡтарҙың башҡорт халҡы составына инеп киткән этник төркөмдәре - ҡара-ҡыпсаҡ, суун-ҡыпсаҡ, бошман-ҡыпсаҡ, ҡарағай-ҡыпсаҡ кеүек аймаҡтары араһында йылан-ҡыпсаҡтар ҙа бар, һәм улар, ҡыпсаҡтарҙың үҙаллы бер ҙур этник берләшмәһенә әйләнеп, айырым ырыу исемен алған.

Шуныһы ҡыҙыҡлы, С.М. Ахинжанов "уранхай", "уранкай" этнонимдарын ике һүҙҙән - уран һәм кай өлөштәренән хасил булып, икеһененең дә йылан мәғәнәһендә ҡулланылыуын билдәләй. Күрәһең, боронғо йылан исемен йөрөткән ҡәүемдәр монгол-төрки солғанышында йәшәп, бер юлы ике атама алған. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр ошо халыҡтың боронғо осорҙарҙа Төньяҡ-Көнсығыш Монголия һәм Көнбайыш Манчьжурия территорияһында йәшәүен фаразлай. Алдараҡ ғәрәп авторы әл Мәрвәзинең кун исемле халыҡтың Ҡытай еренән кай ҡәүеме тарафынан ҡыуылып сығыуы хаҡындағы мәғлүмәте хаҡында иҫкә алғайныҡ. Совет синологы (Ҡытай тарихы белгесе) Н.В. Кюнер ҡытай хроникаларында телгә алынған улянха (уранкай) ҡәбиләһененең боронғо хи (һаи) тоҡомонан булыуын билдәләй. Улянха, ҡытайҙар яҙыуынса, тау жундары ере булып, Ҡытай династиялары тарафынан си (хи) халҡы башлығына биләмә итеп бирелә. Тикшеренеүселәр П. Пельо, В. Минормкий һәм Ю. Зуев хроникаларҙағы ҡытайса "си", "хи" атамаларының халыҡ телендә "һаи", йәғни, "кай" тигәнде аңлатыуы хаҡында яҙалар. Ә ғалим К.Х. Менгес хәҙерге ҡытай теленең кантон диалектында "си" һәм "хи" һүҙҙәренең боронғо "һаи" формаһын һаҡлап ҡалыуына иғтибар иткән.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар артҡа сигенмәй

Гәрәй Нафиҡов, Лобановкалағы яугирҙарына ярҙам һорап, ике тапҡыр 15-әр кешенән торған төркөмдө Әлибаев һәм Колесник эскадрондарына ебәрә, әммә улар, күрәһең, дошман уты аҫтына эләгеп, уның заданиеһын үтәй алмай, күбеһе һәләк була.

Лобановканың таш өйҙәрен немецтар ут нөктәләренә әйләндергән була: һәр береһендә пулемет, автоматтар менән ҡоралланған 6-10 фашист һалдаты ҡаршылыҡ күрһәтә. Сиреғолов һәм Мирсаяпов эскадрондары, ярҙам килеп етеүен дә көтөп тормай, немецтарҙы ошо өйҙәрҙән бәреп сығарырға керешә. Атыша торғас, кесе лейтенант А.Абдрахманов взводында патрондар бөтә. Шул сағында ул йәшертен генә немец пулеметы ут һипкән өйгә килеп инеп, штык менән пулемет расчетын юҡ итә, дошман пулеметын урамға алып сығып, немец автоматчиктарына ут аса.

Таң атыуға Лобановка немецтарҙан тулыһынса таҙартыла. Әммә төнгө урам һуғышында командир Нафиҡов та, штаб начальнигы майор Юренко ла яралана. Шулай ҙа полк командиры алыш менән идара итеүен дауам итә. Әммә ул үҙенә ярҙам килмәйәсәген белмәй әле. Дивизия командирында ла Нафиҡовтың ҡайҙалығы һәм уның яугирҙарының ниндәй хәлдә икәнлеге хаҡында мәғлүмәт булмай, сөнки элемтә өҙөлгән була.

Тынсыу июль төнөндәге һуғыш иртәнгә табан ғына тына. Шул саҡта дошман ауылда совет һалдаттарының бик аҙ булыуына төшөнә, яңы көстәре менән ауылды ҡамап ала. Аяуһыҙ алыш яңынан башланып китә. Беҙҙең офицерҙар һәм һалдаттар ҙа ҡамауҙа ҡалғандарын белә, әммә һуңғы патронға ҡәҙәр ҡаршылыҡ күрһәтеп, трофей немец автоматтарынан ут аса. Ауылға немецтар килеп инә башлағас, улар сигенә башлағандарын күрһәтәләр, шул саҡта беҙҙең һалдаттар артынан ҡыуа төшкән немецтар өҫтөнә өй арттарында йәшеренеп торған яугирҙарыбыҙ гранаталар ташлай, ҡулдарына эләккән немец автоматтарынан ут аса. Дошман кире сигенергә мәжбүр ителә. Ауыл урамдарында немец һалдаттарының һәм офицерҙарының мәйеттәре генә ятып ҡала. Әммә майор Нафиҡовтың төркөмө лә аҙайғандан-аҙая бара: байтаҡ яугир батырҙарса һәләк була, ҡалғандарының күбеһе - яралы. Артабан ауылда ҡалыуҙың бер мәғәнәһе лә ҡалмай. Командир Нафиҡов, яралы булыуына ҡарамаҫтан, аныҡ приказдар бирә, нисек итеп ауылдан сығып китеү юлдарын билдәләй.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ **"Хәҙер һеҙ мине тыңлағыҙ", тием дә, эй, ҡысҡырып йырлай башлайым. Улар ишетеп торалар тип уйлайымдыр инде. Аҙағынан "Алла бирһә, мин булырмын Косыгиндың килене" тигән куплет менән тамамлап ҡуям.**



**Сәхнә күгендә Бибисара Азаматова йондоҙоноң сағыуланып китеүен тамашасы ҡыҙыҡһынып күҙәтте. Йырсы бер нәҙекәй генә ялпылдаҡ ҡыҙыҡай булһа, берәүҙең дә артыҡ иҫе китмәҫ ине, был ирҙәргә хас тәрән тауышлы, мул кәүҙәле… инәй булып сыҡты. Ә күпме тыңлаусы йыйҙы ул! Тап ана шул үтә лә зарлы, баҫалҡы моңло тауышы һәм ретро йырҙары менән яуланы ул күңелдәрҙе. Был йырҙар артында еңел булмаған яҙмыш та, ҡатмарлы ғүмер юлы ла, үҙенсәлекле характер ҙа тойолдо. Һәм тап ана шулары хаҡында һөйләштек тә инде беҙ Бибисара АЗАМАТОВАның үҙе менән.**

# МИН

**Бибисара апай, һеҙҙе тәүге тапҡыр тыңлауымдың ҡыҙығын һөйләп китәйем әле. Редакция водителе командировкаға сыҡҡанда оҙон юл буйына бер бәрхәт тауышлы ир кешене йырлатты ла йырлатты. Ахырҙа, "Ниндәй ағайҙы тыңлайһың ул?" тип һораным. "Ағай түгел, Бибисара апай был", - ти водитель. Аптыраным. Аҙаҡ ҡына һүрәтегеҙҙе күреп аңланым. Ошолай уйлаусыларға, әйтеүселәргә үпкәләмәйһегеҙме?**

- Юҡ, әлбиттә. Мин хәҙер үпкәләй торған йәштән үткән. Нисек бар - шулаймын.

**Баймаҡтан сыҡҡан йырсы икәнегеҙҙе беләбеҙ, ә тыуып-үҫкән ерегеҙ, тәрбиәләнгән ғаиләгеҙ, ата-әсәгеҙ хаҡында ла үҙ ауыҙығыҙҙан ишетке килә?**

- Мин Баймаҡ районының Талкаҫ күленә китеп барғандағы Бәхтегәрәй йәки Әпек ауылында тыуғанмын. Һуғыш башланғанда әсәйемә ун дүрт йәш булған, шул үсмер бала үгеҙ егеп, Магниттан тракторҙарға яғыулыҡ ташыған. Юлда туктап, үгеҙҙәренә һалам һалып, шул һаламды өйөп яндырып, көлөндә картуф бөтөп ашап, серем итеп йөрөгәндәр. Бер саҡ хатта бүреләр ҙә ҡамаған ҡыҙҙарҙы. Әлеге һаламды яға-яға ҡайтып еткәндәр...

Үҙем хаҡындағы һүҙҙе әсәйемдән башланым. Уның ауыр һәм бәхетһеҙ яҙмышын бәйән итеүҙән. Бәлки, был ғәҙәти тормош ҡыналыр, әммә ҡатын-ҡыҙ бәхетен беҙ ир бәхете, ғаилә бәхете аша баһалап өйрәнгәнбеҙ бит инде. Ундай бәхет яҙмаған уға. Һуғыштан һуң да көслө ир-егеттәр сатан-сулаҡ ҡына ҡайтҡас, ҡыҙҙар һаман да сплав, урман ҡырҡыу, ер һөрөп-урыуҙа йөрөгән. Әсәйем дә йәшләй генә ирҙәр эшенә егелә, унан һауынсы булып китә. Ҡырҡ туғыҙынсы йылда мин тыуам. Атайым Сибай яғынан килгән уполномоченный була. Ул үҙенең ғаиләле булыуын йәшерә. Аҙаҡ йыш ҡына мине күрергә тип килә, тик әләсәйем бәләкәс баланы урман араһына алып барып йәшерә лә ҡуя икән. Шул хәлдә хатта хәтерләйем дә әле. Элек малайҙарҙы бабаға ултыртҡанда, шул баба менән ҡурҡыталар ине. Ә мине "Мостафа" менән ҡурҡыттылар. Өләсәй "Бала йыйыусы Мостафа килгән" тип, ағаслыҡҡа алып барып, ҡулыма шәкәр киҫәге тоттора ла, ҡалдырып китә. Сепрәктәр, таштар бирә, шәкәрҙе ялап, сепрәксапракты уйнатып, "Мостафа"нан йәшенеп ултырам. Беҙгә килгән кешенең атайым икәнен кем генә белгән инде? Оҙаҡ йылдарҙан һуң, әсәйемде ерләгәндә генә беренсе тапҡыр күрҙем атайҙы...

Аҙаҡ мин өләсәйемдә үҫтем. Әсәй район үҙәгендә баракта йәшәп, һыйыр һауа. Мин уны күрергә тип, йәйәүләп, матур милли күлдәк кейеп, өләсәйемдең итәгенә тотоноп ҡына барам. Камзулым, ҡашмауым да бар ине. Аяғымда бәләкәй галуш. Һигеҙ саҡрымды шулай тәпәйләйбеҙ. Өләсәйем мине әүрәтеүгә уйын уйлап таба, "Бар шул ташҡа тиклем йүгер, бар шул ағасҡа тиклем", тип алдан ебәрә. Йүгереп барып етәм дә, ул килгәнсе ҡысҡырып йырлай торам. Шул 4-5 йәшемдә үк әллә күпме йырҙар белә инем...

Өләсәйем дә өйҙә ултырмай. Ул ике ауыл араһындағы йәйләүҙә бейә һауа. Ә мин, әс йәше лә тулмаған бала, шунда ураланып йөрөйөм. Ҡайҙалығымды күреп тороу өсөн өләсәйем башыма сөм-ҡыҙылдан яулыҡ ябындыра икән. Шулай бер көн ҡатындар ҙа, көтөүселәр ҙә мине күҙҙән яҙҙыралар ҙа, таба алмай яфаланалар. Зымзыя юҡ булам да ҡуям. Өсөнсө көнөнә генә Ғөбәйт ағай һыбай килеш тау ҡаяһына менеп ҡарап, ялан юлында бер ҡыҙыл таптың йыбырлауын аңғарып ҡала. Бысранып, себен-серәкәйҙән таланып, шешенеп, илапхәлһеҙләнеп бөткән булғанмын, ә яулығымды һалмағанмын. Был минең беренсе тапҡыр үлем менән осрашыуым, әммә унан ҡотолоп ҡалыуым булды. Ә ғүмер юлымда улар бер нисәү булды.

**Һуғыштан һуң тыуған балалар быуыны бит инде һеҙ. Белеүебеҙсә, уларҙың яҙмышы еңелдән булмай. Шулай ҙа һеҙ хеҙмәт өлкәһендә лә, ижад өлкәһендә лә үрҙәр яулағанһығыҙ. Нимәләр нигеҙ булды был үҫешкә?**

- Әсәйгә ҡунаҡҡа барып йөрөнөк тип әйттем бит инде. Ер иҙәнле саман бараҡтарҙа өйһөҙ яңғыҙ ҡатындар йәшәй ине. Аҙағыраҡ, өләсәйҙең улы өйләнеп, унда балалар ишәйә башлағас, әсәйем усаҡтан бура ҡороп, тыштан һалам менән балсыҡ һылап, бәләкәс кенә өй һалды ла, мин икенсе синыфҡа бара торған йылда икебеҙ йәшәй башланыҡ. Көҙ көнө мине, йәше тулмаған, тип, мәктәпкә алманылар, мәктәпкә йөрөрлөк кейемем дә юҡ ине. Әммә мәктәпкә барыу теләгем шул тиклем көслө булғас, өләсәйем уҡытыусы менән барып һөйләште. Улайһа, быйма кейер мәл еткәс, уҡырға килер, тигәндәр. Өләсәй торф сығарыусыларға ойотҡан биреп, һалдат шинеленә алыштырып алып, көпө тегеп бирҙе. Шулайтып, декабрь айында шул көпөнө һәм быйма кейеп, мәктәпкә барҙым.

Был ҡарлуғас ояһындай ғына өйҙә беҙ бик бәхетле йәшәнек. Кескәй генә ике тәҙрә, усаҡлы мейес, тәпәш урындыҡ, урындыҡ өҫтөндә ҡаралды. Әсәйгә яҡшы эшләгәне, райсовет депутаты булғаны өсөн быҙау биргәйнеләр, шуны ла өйҙә тотоп үҫтерәбеҙ. Мөйөштә ҡалпаҡлы радио эленеп торҙо. Сәғәт берҙә башҡортса концерт башлана. Аяғөҫтә баҫып, радиоға күҙ ҙә йоммай тексәйеп тороп тыңлайым. Фәриҙә Ҡудашева, Хөсәйен Ҡудашев, Мәғәфүр Хисмәтуллиндар йырлай. Уларҙы тыңлап бөткәс, "Хәҙер һеҙ мине тыңлағыҙ", тием дә, эй, ҡысҡырып йырлай башлайым. Улар ишетеп торалар тип уйлайымдыр инде. Аҙағынан "Алла бирһә, мин булырмын Косыгиндың килене" тигән куплет менән тамамлап ҡуям.

Әсәйем яҡшы тегенсе лә булды. Тупаҫ эштән ярылып-теленеп бөткән ҡулдарын кистәрен туң май менән һылап бәйләйем. Ә ул уралған бармаҡтары менән теген машинкаһы артына ултыра. Ҡатын-ҡыҙҙарға күлдәк-костюмдар тегә. Ә мине сигеүгә өйрәтә. Мин кейәүгә китә торған апайҙарға оҙон-оҙон таҫтамалдар сигә башланым. Әсәй теккән ҡульяулыҡтарға рауза гөлдәре, һандуғастар төшөрөм, янсыҡтарға ҡускарҙар яһайым, ситтәрен ынйылап ҡайыйым. Әсәйем йырлай-йырлай теген тегә, мин ҡушылам. Ныҡ матур йырланы ул. Апайҙар, инәйҙәр кис ултырырға киләләр. Урындыкта урын юҡ, иҙән тар, мөйөштә быҙау, мин урындыҡ аҫтына фуфайка түшәйем дә инеп ятам. Эй, йырлашалар бит! Урындыҡ аҫтынан мин дә ҡушылып йырлайым...

Дүртенсе класты тамамлағас, Таулыҡай ауылында бер туғандарыбыҙҙа ятып уҡыным. Ял һайын егерме биш саҡрым арағаәсәйем янына ҡайтып килә торғайным. Бишенсе класҡа Сибай интернатына барҙым. Бер саҡ ялға ҡайтһам, әсәйем биш балалы һуғыш ветеранына кейәүгә сыҡҡан. Димләп биргәндәр. Тегеағайҙың ҡатыны үлгән дә ваҡ балалар менән тороп ҡалған. Былашул хәлдән һуң минең әсәйем менән бергә йәшәгән саҡтағы бәхетле көндәрем тамамланды. Һеҙ һуғыш ветерандары тураһында китаптарҙан уҡып, кинолар ҙан ҡарап ҡына беләһегеҙ, ә беҙ уларҙың һуғышта алған йән һәм тән яралары һөҙөмтәһендә психикалары ҡаҡшауы, эскелеккә бирелеүҙәре афәтен үҙ елкәбеҙҙә татыныҡ... Каникулдарға ҡайтһа ла, ҡыштарын мал аҙбарында, йәйҙәрен картуф баҡсаһында йәшенеп йөрөп кителә. Фронтовиктар булған ғаиләләрҙә күптәр шулай йәшәне. Әсе булһа ла хәҡиҡәт был. Ошондай бала саҡ мине сыныҡтырҙы. Йәшәүҙән дүндерманә, киреһенсә, көрәшсе, яугир итте. Әгәр берәүҙең иркә генә ҡыҙы булып наҙланып үҫһәм, мин тормошомда осраған һынауҙарҙы үтә лә алмаҫ инем..

**Өләсәй тәрбиәһе алып үҫкән кеше бит инде һеҙ. Кем булды һеҙҙең өсөн өләсәй?**

- Эйе, үҙемде белә-белгәндән өләсәй итәгенә тотоноп йөрөнөм. Уның һымаҡ хәбәр һөйләп, ул өйрәткән йырҙарҙы йырлап, уныңса ҡыланып үҫтем. Ғәҙәттә, өләсәйҙәр янында үҫкән балалар шулайыраҡ була бит. Бәлки, уның йәшәйешенең фәлсәфәһен аңлап та етмәгәнмендер, әммә уның донъяһы минең өсөн изге һәм таҙа ине. Бәләкәйҙән уға эйәреп намаҙ уҡыным, аяттар ятланым. Хатта ураҙа тотҡанында ла таңдан тороп сәхәр ашайым, көндөҙ ашап алам да, кис тағы бергәләп ауыҙ асабыҙ. Көтөп алған байрамдары Ураҙа һәм Ҡорбан ғәйеттәре ине. Шул байрамдарҙа ул минә яңы күлдәк теген кейҙерә. Аҙаҡтан да шул байрамдарҙың яҡтылығы һәр ваҡыт күңел түрендә генә йәшәне...

Өләсәйем һатыу өсөн киндер һуға, ҡорама ҡорай, ҡул эштәре менән булыша. Мин дә ҡуша ултырып, уға йөн тетешәм, иләшәм, ҡорама өлгөләрен теҙешәм. Бәләкәймен бит инде, арып та китәмдер инде. Шул саҡта ул миңә кәсәһенән алып, шәкәр киҫәге тоттора ла, "Бар, башҡаларға күрһәтмәй генә ашап кил", ти. Өйҙә ағайҙың ваҡ балалары күп кенә, улар күреп ҡалмаһын тип, шәкәрҙе тотам да йүгерәм аҙбарға. Шунда берәй мөйөштә боҫоп ҡына ултырып, шәкәрҙе ялап, күңелем булып кире киләм...

**Бибисара апай, һеҙ бит мәктәп йылдарынан хеҙмәткә егелгән, хеҙмәт сыныҡтырыуы үтеп үҙегеҙҙең төп эшегеҙгә килгән кеше...**

- Беҙҙең заманда бар балалар ҙа үтә ине инде хеҙмәт сыныҡтырыуын. Етенсе класты тамамлағандан һуң мине лә ауылда ике ҙур бригадаға ашнаҡсы итеп ҡуйҙылар. Көнөнә ике тапҡыр мейескә егерме бишәр икмәк һалам, унан сөсикмәк бешерәм, һурпаға баҫып һалма йәйәм. Тәшкөлөккә бишбармаҡ, кискелеккә туҡмас өлгөртәм. Шул арала ат өҫтөндә тырмала ла йөрөйөм әле. Артабан мине һыйыр һауырға ҡуштылар. Йәйләүҙә ятабыҙ, һыйырҙарҙы өс тапҡыр һауабыҙ, кистәрен ауылға ритайымға ҡайтабыҙ...

Унынсы класты бөткәс, әсәй: "Бер һыйырҙы һатып, аҡсаһын бирәм, уҡыуыңды дауам ит",- тине. Бер баш һыйыр алты йөҙ һум тора, ул ғына аҡсаға кейенепйәшәп буламы ни? Һауынсы булып эшләргә ҡарар иттем. Комсомолдың беренсе секретары саҡыртып алды ла: "Һинә уҡыуыңды дауам итергә кәрәк, быйылға һуңланың, киләһе йыл Стәрлегә пединститутҡа ебәрәбеҙ",- тине. "Ә мин хирург булырға хыялланам", - тим. "Улай булғас, әйҙә, дауаханаға эшкә урынлашып тор",- ти был. Шулай итеп, рабфакка тиклем тип, мине Баймаҡтың операция бүлегенә санитарка итеп эшкә урынлаштырҙылар. Шул тиклем яратып башҡарҙым был эште, халаттарымды ап-аҡ итеп крахмаллап ҡына торам. Операцияларҙан һуңғы ҡанды йыуып-һөртөүгә лә һис сирҡанмайым, ауылда мал һуйыуҙа ҡатнашып, бәләкәйҙән әсәк-ҡарын йыуып өйрәнгәс, бында ла тынысмын, йыйнаҡмын. Табиптарға ла ошолай һалҡын ҡанлы, тилбер булыуым, йәһәт-йәһәт ҡыбырлап эшләп йөрөүем оҡшай. Әммә бер мәл минең өсөн хәл иткес ваҡиға булды. Гинекологик операцияға шаһит булдым. Психикам бындайҙы күтәрә алманы һәм шул операциянан һуң дауахана тупһаһы аша ҡабат атлап инә алманым. Шуның менән "хирурглығым" тамам булды. Бынан ары комсомол секретары күпме генә өгөтләһә лә, "Хирург булмайым, һауынсы булам", тип илап тик торҙом. Ахырҙа, был ағай мине ауылға кире ҡайтармау ысулын тапты, яңы асылған һыра заводына комсомол секретары итеп ебәрҙе. Шулай итеп барып ҡаптым мин артабан ғүмеремдең 30 йыллабы үтәсәк был заводҡа.

Предприятиела комсомол секретары итеп кенә түгел, секретарь-машинист итеп тә, кадрҙар бүлеге хеҙмәткәре итеп тә ҡуйҙылар. Бар сараларҙы ойоштором, спорт ярыштарында ҡатнашам, саңғыла ла, еңел атлетикала ла разрядым бар, бейейем, йырлайым, агитбригадаларҙа йөрөйөм, ҡыҫҡаһы, бик әүҙем тормош менән йәшәйем. Ҡайһы көн эштән ҡайтмайым, заводта ултырғыстар теҙеп ятып йоҡлайым.

1968 йылда Баймаҡтың 30 йыллығына арналған концертта йырланым. Репетиция ваҡытын-



***✓ Яңғыҙ ҡарағасҡа оҡшатам. Хатта шулай итеп тоям да үҙемде. Тамырҙарым ныҡ, көслө минең. Өләсәйем шулай булды, унан әсәйем... Икеһе лә ҡара көс, сабырлыҡ, талғын аҡыл менән йәшәнеләр, балалар үҫтерҙеләр.***

# ЯҢҒЫҘ ҠАРАҒАС

да композитор, ул саҡта Өфө дәүләт сәнғәт институты ректоры Заһир Исмәғилев тыңлап ултырған икән. Мин ул саҡта тал сыбығындай ғына ҡыҙыҡай, шаянмын үҙем килеп. Заһир ағай мине Өфөгә уҡырға саҡырҙы. Был тәҡдимдән ҡанатланып осоп ҡайтып киттем, ауылғаса йәйәү йүгерҙем. Тик әсәйем ҡырҡа ҡаршы төшөп, артист та булдымы һөнәр, тип кире дүндерҙе. Беҙҙең халыҡта борондан артист һөнәрен ниндәйҙер түбән хеҙмәт итеп ҡабул иттеләр бит, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ өсөн. Бына шулай итеп был мәсьәләне япты ла ҡуйҙы әсәйем. Ул әйткән һүҙ минең өсөн закон ине, барманым. Һыра заводында ҡалдым...

**Эш кенә түгел, башҡорт ҡыҙҙарына хас булғанса, йәшләй генә тормошҡа ла сыҡҡанһығыҙ, әсәй ҙә булғанһығыҙ...**

- Буласаҡ ирем менән бергә бейеп, саңғы ярыштарында ҡатнашып, оҙаҡ ҡына дуҫлашып йөрөнөк. Ул минән ун айға ғына өлкән ине. Ахырҙа, мин уҡырға, ул армияға китмәгәс, өйләнешергә булдыҡ. Миңә ун һигеҙ, уға ун туғыҙ йәш. Ул күмәк ғаиләнән, мин үгәй атай йортонда сит баламын, шулайтып, бер түшәк, бер ҡалаҡ менән йәшәп киттек. Ирем Волгоградта уҡып ҡайтып, машзаводта мастер булып эшләп йөрөй. Мин дә ул саҡта инде райсовет депутаты булып киттем. Эш бар, аҡсаны арыу ғына алабыҙ, йәшәр мөйөш тә бирҙеләр. Ул заманда эшләгән кешегә юлдар асыҡ ине бит. Торараҡ иремде армияға алдылар. Ул ике йыл хеҙмәт итеп, арыуыҡ ҡына боҙолоп, эсергә өйрәнеп ҡайтты. Ҡайтты ла уңлы-һуллы йөрөп китте. Ҡайным сыбыртҡы тотоп эҙләргә сығыр, ярып алып ҡайтып һалыр ине. Шундай хәлдәр ҙә булғыланы...

Ә беҙҙең заводта белгестәр етешмәй, ситтән саҡырылғандар бер-ике йыл эшләй ҙә китәләр. СССР ваҡытында Одессала тиҙ арала белгестәр әҙерләй торған Ломоносов исемендәге институт бар ине. Шунда уҡырға ебәрҙеләр мине. Һигеҙ ай уҡып, производство мөдире, технолог, лаборатория мөдире, мастер тигән танытмалар алып ҡайттым. Мастер итеп ҡуйҙылар.

Иремдең эске-уйынға, ҡатын-ҡыҙҙарға әүрәүе арҡаһында ғаиләнең тыныслығы китте. Тик һынау был ғына булманы әле: ирем төндә һуҡмыш ҡайтып, газды асыҡ ҡалдырған да, мин белмәй барып ҡабыҙып... 25 йәшемдә тәнемдең һикһән дүрт проценты бешеп, дүрт ай ярым Өфө дауаханаһында яттым. Ике ай буйы бөтөнләй ҡуҙғалманым, күмер шикелле булғайным. Тере ҡалырыма берәүҙең дә өмөтө юҡ ине...

Иң тәүҙә ике бармағым ҡыбырлап китте. Хирургка шул ике бармағымды күрһәтәм, "Үлтермә, зинһар, ике балам бар", тигәнде аңлатырға тырышам, аңланы: "Тырышабыҙ, шул балаларың хаҡына һин дә көрәш",- тине. Аҙаҡ шул хирург мине студенттарына күрһәтеп: "Был ҡатын тере ҡалырға тейеш түгел ине, бер ышаныс та юҡ ине, бары тик үҙенең рухи көсө, характер ныҡлығы менән генә бирешмәне, иламаны, һынманы",- тип һөйләне. Үкенескә ҡаршы, ирем бер тапҡыр ҙа килеп хәл белмәне...

Күп нәмәләр үҙгәрҙе ошо хәлдән һуң. Беренсенән, миңә дүрт кило ла һигеҙ йөҙ грамм сит ҡан ҡойолдо һәм организмда гормондар тайпылышы китте, уны контролдә тотоу бик ауыр булды. 62 килонан 122 килоғаса тиклем һимерҙем. Элекке сағыу тауышым урынына ғырылдаҡ ирҙәр тауышы килеп сыҡты, сөнки тын юлдары, тауыш бәйләүестәре зарарланғайны. Битемдә һәм тәнемдә янғын эҙҙәре, ҡалын-ҡалын йөйҙәр, сөйәлдәр барлыҡҡа килде, сәс юҡ. Ошо хәлдәр ҙә һынау булғандыр инде ирем өсөн, ул уны үтә алманы. Шулайтып, 27 генә йәшемдә ике бала менән яңғыҙ тороп ҡалдым. Ирем киткәс, нервыларҙандыр инде, аяҡтарым йөрөмәй аптыратты, кис етһә, телем көрмәлер булып китте. Табиптар ҙа, булдыра алғандың барыһын да эшләнек, артабан үҙеңдән тора, тинеләр. Шул саҡ мин "Нисек тә аҙаҡҡа тиклем көрәшергә", тигән ҡарарға килдем. Халыҡ табиптарына йөрөп өшкөрөлдөм, велосипедҡа ултырҙым, йүгерҙем, саңғыла елдем, һыу индем, спорт залынан ҡайтманым, сыныҡтым. Иртәнге алтыла ике баламды ла эйәртеп, йүгерергә сығам, уларҙы ла спортҡа күнектерҙем. Шундай ваҡыты ла булды тормошомдоң һәм, Аллаға шөкөр, үтеп китте...

**Баймаҡ һыра заводын етәкләргә нисек батырсылығығыҙ етте?**

- Яйлап тормошом яҡшы яҡҡа үҙгәрә башланы, маҡсаттарым да, вазифаларым да, дәрәжәм дә үҫте. Мине тағы Мичуринский, Воронеждағы квалификация күтәреү институттарына уҡырға ебәрҙеләр. Уҡып ҡайтҡас, ҡалалағы Мебель фабрикаһына, унан баш тартҡас, Икмәк заводына етәксе итеп ҡуйырға өгөтләнеләр. Быныһынан да баш тартҡас, үҙем эшләгән һыра заводына ҡоҙаланылар. Ете-һигеҙ айҙай хужаһыҙ ине завод. Тағы ла баш тартырға сәбәптәр таптым. Әммә икенсеһендә саҡыртып өгөтләп тә торманылар, был вазифанан баш тартыу - ул партбилетты өҫтәлгә һалыу икәнде аңғарттылар. Шулай итеп, 29 йәшемдә мин һыра заводында директор булып киттем.

Завод тауыҡ тәпәйҙәрендә генә торған бер ҡоролма ине ул саҡта. Ете вагон-һауыт асыҡ һауала ерҙә ята. Складтар юҡ. Станоктар ҡул менән эшләнә, кешеләр итектәрҙә һыу кисеп йөрөй. Уйланым-уйланым да, райкомға мөрәжәғәт иттем, заводты яңыртырға кәрәк, тимен. Йәш кенә башым менән шундай оло хәбәр һөйләп килгән миңә аптыранылар башта. Унан иркемә ҡуйҙылар, йәнәһе, ни башҡара алаһың? Тап шул мәл Йылайыр совхозы комбайнеры, Социалистик Хеҙмәт Геройы, СССР-ҙың Юғары Совет депутаты Риза Яхиндың Мәскәүгә съезға юллана икәнен ишетеп ҡалдым. Ул үҙе менән Мәскәүгә тағы бер кешене алып бара ала икән. Риза Хажиәхмәт улына шылтыратып, мине юлдаш итеп алыуын үтенеп, эйәреп тә киттем. Съезд барған мәлдә тәнәфес ваҡытын көтөп тороп, СССР Юғары Советы рәйесе Косыгиндың кабинетына барҙым да индем. Бөтөн хәбәремде бер юлы теҙеп, райондың һәм Хеҙмәт Геройы Риза Яхындың хатын күрһәтеп, шул ҡағыҙҙарға рөхсәт имзаһы һуҡтырҙым. Бала саҡта "Берәй ваҡыт мин булырмын Косыгиндың килене" тип йырлап йөрөгән шәхескә килдем бит! Килене үк булмаһам да, ышаныына инеп, 180 дикалитрға тип планлаштырылған завод урынына 250 мең дикалитрға иҫәпләнгән, тутыҡмай торған ҡоростан ҡойолған яңы ҡоролмаларға йүнәлтмә йүнләнем. Урындағы, республикалағы баҫҡыстарҙы һәм етәкселәрҙе урап үтеп, тура-нан-тура Косыгинға барып атҡарҙым был эште һәм тауарым да төбәп кенә Баймаҡҡа килеп төштө.

1984 йылға яңы ҡоролмаларҙы ҡороп бөтөп, эшләй генә башлағайныҡ, Горбачев алкоголле эсемлектәр заводтарын яба башланы. Иҡтисади планды үҙгәртергә мәжбүр булдыҡ. Коллективты урамға сығарып ебәреп булмай бит. Тиҙ генә яңы технологиялар үҙләштереп, мармелад, помадка, петушоктар, газлы һыуҙар, вермишель етештерә башланыҡ. Аҙағыраҡ һыра етештереүгә лә рөхсәт булды. Чехославакиянан, Американан вагон-вагон арпа, Сыуаштандан ҡомалаҡ килә, үҙебеҙҙәге ҡомалаҡ ярамай икән был эсемлеккә. Производствоны киңәйттек, реконструкциялар үткәрҙек. Продукция бөтөн ил буйлап таратыла. Йоҡларға өс-дүрт сәғәткә генә ҡайта алам. Балаларҙы уятып, сәстәрен үреп, мәктәпкә оҙатам да, тағы завод донъяһына сумам. Шулай хеҙмәт ителде. Заводтың гөрләп, шаулап эшләп торған ошондай ваҡыттары булды. Үкенес, хаҡлы ялғаса эшләргә яҙманы. Заводта утыҙ йыл эшләнем, 20 йыл директор булдым, киткәндә хатта һаҡлыҡ кенәгәм дә юҡ ине. Өләсәйем менән әсәйемдең "Хөкүмәттекенә теймә!" тигәне мейемә һеңгән ине, ғүмер буйы шул кәңәште тоттом. Һәм тағы. Утыҙ йыл һыра еҫен еҫкәп эшләргә тура килде. Шул дәүер эсендә өс бокал да һыра эсмәгәнмендер. Яратманым. Сифатын төҫөнә ҡарап, бик булмаһа, бармағымды тығып ялап та билдәләй ала инем...

**Хеҙмәт батыры булған Бибисара Азаматова ни арала йырсы Бибисараға әүерелде?**

- Ә улар ғүмер буйы икеһе бергә йәшәне ул. Хеҙмәткәр һәм йырсы Бибисара булдым мин. 1997 йылда беренсе тапҡыр радиоға "Халыҡ таланттары" тапшырыуына һигеҙ йыр яҙҙырғайным. Унан "Юлдаш йыры"на саҡырҙылар. Шунда "диск сығарығыҙ" тигән тәҡдим булды ла, мин дәртләнеп киттем һәм ун алты йыр менән диск сығарҙым. Ул ваҡыт Өфөлә йәшәй инем һәм беренсе концерт менән Баймаҡҡа ҡайттым. Биш баянсы алып барып, шуларҙың алмашлап уйнауына ҡушылып йырлап, тулы залдарҙы илаттыҡ. Миңә ул саҡта 56 йәш ине.

**Һәр кеше тәбиғәттәге бер нәмәгә, йәнлек-хайуанғамы, үҫемлеккәме оҡшай тиҙәр. Һеҙ кемгә оҡшатаһығыҙ үҙегеҙҙе?**

- Яңғыҙ ҡарағасҡа. Хатта шулай итеп тоям да үҙемде. Тамырҙарым ныҡ, көслө минең. Өләсәйем шулай булды, унан әсәйем... Икеһе лә ҡара көс, сабырлыҡ, талғын аҡыл менән йәшәнеләр, балалар үҫтерҙеләр. Уларҙың шул яҙмышын мин ҡабатланым. Бер кемгә, бер нәмәгә ышанмайынса, һалышмайынса, ярҙам көтмәйенсә, беләктәремде һыҙҙым да, ике ҡулымды эшкә ҡуштым. Үкенескә ҡаршы, әлеге яҙмыш ҡыҙҙарыма ла ятты... Был ниндәйҙер бер һыҙат беҙҙең затта, ҡатындар балаларҙы яңғыҙ үҫтерә...

**Яңғыҙлыҡты тормош иптәше булмауға ҡайтарып ҡалдыраһығыҙмы? Тормошоғоҙҙа ниндәйҙер урын биләгән ир кеше булдымы йылдар ағымында?**

- Миңә терәк булыр ир табылманы. Мин ирҙәргә таянырға кәрәктер, уларҙан яҡлау эҙләргәлер, тип, уйламаным да хатта. Киреһенсә, үҙем туған-заттағы ир-егетте етәкләп, коллективтағы ир-атты өҫтөрәп, тәрбиәләп, ғаиләһенә атай итеп йәшәттем. Ирҙәрҙең исемен, данын, намыҫын яҡлап та аҙ даулашманым. Шуға ла ирҙәр мине тиңдәш, фекерҙәш итеп ҡабул итте. Бөгөн дә ветерандарымды барлап, шылтыратып, гәзит-журналдар яҙҙырып торам.

**Һеҙ халыҡсан характерлы, оло хужалыҡ менән идара иткән боронғо бейбисәләргә, халыҡ кәңәшкә килер ағинәйҙәргә оҡшағанһығыҙ, был аралашыуҙа һиҙелә...**

- Эйе, мин хакимә. Әммә ҡаты күңелле ҡатын түгел. Ғәфү итә һәм үтенә beləm. Телем тупаҫ, тупһыҙ түгел. Кәрәк саҡта һығылмалы ла була алам. Сигенә, позицияны ҡалдыра беләм. Әммә алға барыуҙы һәм көрәшеүҙе туҡтатмайым. Ҡул ҡаушырып ултырыу хас түгел миңә.

**Йырҙарығыҙ үтә лә зарлы... Башлыса ретро йырҙар йырлайһығыҙ. Заманса йырҙар ылыҡтырмаймы?**

- Әлеге мәлдә етмеш өс йырым бар, береһе лә еңел-елпе һәм осраҡлы йыр түгел. Уларҙың күптәрен бала саҡтан ишетеп, йырлап үҫкәнмен. Яҙмышыма ягылып килгән улар, шуға ла бик тә зарлылар һәм йәнемә ауаздаштар. Өләсәйемдең, әсәйемдең, ауылдағы апайҙарҙың йырҙары. Ниндәйҙер ваҡиғаларға, ғүмер бороолоштарына, кисерештәргә бәйлеләр.

Заманса йырҙарым да бар, тик уларҙы ла эстәлекле, мәғәнәле итеп кенә һайларға тырышам. Бөгөнгө йырҙарҙың хаҡы ҙур ҙа, баһаһы самалы һәм ғүмерҙәре лә ҡыҫҡа. Шуға мин халыҡ тарафынан ижад ителгән һәм һәр кемдең йөрәгенә үтеп инер сере булған йырҙарҙы һайлайым...

**Йәштәр менән эшләп алдығыҙ, шоу-бизнеста ла ярайһы ғына тәжрибә тупланығыҙ. Һеҙҙең ҡарамаҡҡа, нисек ул бөгөнгө эстрада донъяһы?**

- Ике тапҡыр "Юлдаш йыры"нда, ике тапҡыр "Башҡорт йыры"нда Гран-при яуланым. Был үҙе лә эстрадалағы бер күренеш булды. Ә йәштәр менән эшләүгә килгәндә, улар араһында мин үҙ кеше. Улар минән ситкә тайпылманы. Гастролдәрҙә әсәй генә түгел, өләсәй һымаҡ та инем, уларҙы ҡарап, бәпләп йөрөттөм. Егеттәр-ҡыҙҙар шылтыратып торалар, бөгөн дә әле бергә ижад итеүгә тәҡдимдәр бар.

Шоу-бизнес - ул алыш-биреш, аҡса донъяһы. Унда ижад һәм һәләт артыҡ кәрәкмәй ҙә һымаҡ. Унда мине лә алдарға, файҙаланырға тырышыусылар булманы түгел. Был өлкәлә тәжрибәһеҙ оло кеше итеп ҡаранылар, буғай. Ә минең нисә йылдар оло коллектив менән етәкселек иткәнемде, СССР кимәлендәге завод проблемаларын хәл итеп йәшәгәнемде күҙ уңынан ысҡындырҙылар. Мин бит йәштән йырлап-бейеп кенә йөрөгән һәм сәхнәнән башҡа донъя күрмәгән артист түгел, мин производство хеҙмәте менән сыныҡҡан, тормоштоң әсе-сөсөһөн күргән, яҡшы менән яманды айырып өйрәнгән ветеранмын. Ә йырлау - ул минең күңел торошом ғына. Йыр миңә һалынған, минең менән ҡуша яралған һәм бер ваҡытта ла ташламаған тормош юлдашым, яҙмышым саҡһыһы. Мин бөгөн йыр аша дан яуларға ла, аҡса эшләргә лә, исемдәр алырға ла тырышмайым. Ирекле рәссам кеүекмен. Теләгем һәм күңелем булһа, йырлайым, юҡ икән, әллә кемдәр бергә йырларға саҡырып торғанда ла баш тартам. Һәм, йырҙарымды популярлаштырам, тип, телемде лә алыштырмайым. Ундай тәҡдимдәр ҙә булды, баш тарттым. Телем башҡортса асылған һәм тәүге йырҙарҙы өләсәйем туған телемдә өйрәткән икән, мин шул телемә һәм рухыма тоғро булып ҡалам инде. Минең холҡом шундай. Тоғролоҡ - ул намыҫ.

**Шулай итеп, "Бибисара" тигән серҙе астым үҙемә. Һәм һеҙгә был ҙур яҙмыш үткән, һынауҙар кисергән һәм һаман да күңелендә эскерһеҙ йырлы донъя йөрөткән апайҙы бөтөн тәрәнлегендә күрһәткем килде. Көслө рухлы, тандыр тәбиғәтле, йомарт һүҙле ағинәй, ижадсы ул.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Әле мин ҡолағым төбөндәге аҫтың тын алышын ишетәм, һулышын тоям. Әммә алабарман кейек быныӊ менән генә сикләнмәне, бар булған оятын юғалтып, башыма уҡ барып менде лә, өҫтән ынтылып, күҙҙәремә ҡараны.***



*Иҙрис НОҒОМАНОВ*

# ҺУНАРСЫ ЯҘМАЛАРЫ

## МӨҒЖИЗӘ

Әле генә тетелгән мамыҡтай өлпәләнеп, күбек ише күперелеп, аҙ ғына елгә лә елпелдәп осорға әҙер, табан аҫтында ғырт-ғырт ятҡан сафтан-саф, пактан-пак тәүге ҡарҙы иң көтөп алғаны беләһегеҙме кем? Ул - һунарсы. Сикһеҙ түҙемһеҙлек менән, өмөт тулы уйылдарға бирелеп көтә ул ошо көндө. Ни өсөнмө? Сөнки уның өсөн нәҡ ошо көндән мөғжизә тыуа - ҡара көҙ ахырынаса шымтайып, эсендәген тышына сығармай торған урман - мөғжизәләр иле - йомартланып китеп эс серҙәрен сисә башлай. Әлбиттә, ҡырпаҡ ҡар өҫтөндәге үҙе серле, үҙе хикмәтле яҙма-һыҙмаларҙы "уҡый" белгән кешегә генә сиселә улар. Әйтәйек, таң алдынан ғына ҡабаланып ерән төлкө үткән. Ул бер урында ла туҡталып тормаған, уны бер нәмә лә ҡыҙыҡһындырмаған, тимәк, төнгө һунары уңышлы булған - тамағы туҡ. Күп тә бармай көндөҙгө ялға ятасаҡ. Төлкө ғәҙәттәрен яҡшы белгән һунарсыға уны ошо мәлдә эләктереүе бер ни тормай.

Ана, төлкө эҙҙәренә иғтибар ҙа итмәйенсә, үҙ юлын яҙлыҡтыра-яҙлыҡтыра шешкҙолаҡ ҡуян да көндөҙгө ятағына ашыҡҡан. Әйе, ашыҡҡан. Ни өсөн тигәндә, был юлы, күрәһең, эҫенгән төйәгенән алыҫраҡ киткән. Ә был мәлдә инде яҡтыра башлаған. Бәләкәс ҡуянға бит йыртҡыс күҙенә салыныу һис ярамай. Бына уның алдын-артын ҡарамайынса ашығыуының сәбәбе. Әммә ашығыуҙың аҙағы насар бөткәнлеген һәр кем белә: ашыҡҡан - ашҡа бешкән. Был әйтемде урман һылыуы һыуһар ҙа үҙләштереп алған. Ҡылыйҙың ҡайһы тирәнән үтерен ул алдан һиҙгән. Һиҙгән дә ағас ботағында сабыр ғына аңдып ултырған. Уны-быны уйламай килгән ҡуян уның тырнаҡтарына үҙе уҡ килеп эләккән, тип әйтергә була. Был турала ҡар өҫтөнә һибелгән ҡан таптары, туҙғып ятҡан аҡ йөн киҫәктәре һөйләй. Бына хәҙер баяғы төлкөнөң ашығып барыу сәбәбе лә асыҡланды: һыуһарҙан ҡалған ҡуян емтеген эләктереп һыҙған бит хәйләкәр!

Арыраҡ, тын әрәмәлек эсендә, тигеҙ сылбыр булып сысҡан юрғалаған эҙҙәре күренә. Уны юллаптыр, һәр ҡыуаҡ, һерәйеп торған һәр ҡыу үлән төбөн ентекләп тикшерә-тикшерә, һикерәнләп йылғыр көҙән уҙған. Унан ҡалышмайым, тигән кеүек, артынса һыҙылмалы йәтсә үтеп киткән. Һомғол йәш ҡарағайлыҡ ышығында ирәйеп китеп ҡоштар бәһлеүәне - һуйыр сүпләнеп йөрөгән. Ул, ғәҙәттә, туйынған еренән алыҫ китмәй. Мине күҙәтеп ошо тирәлә ултыралыр әле... Ана үҙе! Ботаҡтарға бәрелә-һуғыла ауыр гөрһөлдәп осоп та китте. Алдан күрә-белә барыуға ҡарамаҫтан, хатта тертләп ҡуйҙым - шул ҡәҙәре лә тауыш ҡуптарыр икән.

Белеп уҡый, тикшерә китһәң, күп ул һәр төрлө урман яҙмалары. Шуныһы ысынбарлыҡ: әлеге яҙмаларҙың байтағы фажиғә менән тамамлана. Ҡырағай тәбиғәттә шунһыҙ булмайҙыр ҙа. Берәүҙең ғүмере ҡыйылмайса, икенсеһенә йәшәү юҡ. Ә үҙең һуң, үҙең, һунарсы, шул уҡ фажиғәне юллап йөрөмәйһеңме ни? Эйе, һунарҙың уңышлыһы мотлаҡ ҡан ҡойоу, уның эҙемтәһе булып - йән ҡыйыу менән осланырға тейеш. Башҡаса юлы юҡ.

Алдан ҡыуанғанмын: күпме генә йөрәкһеп-ашҡынһам да был көн һунарсы өсөн булмай сыҡты. Ҡырпаҡ ҡар, үҙенең ышанысһыҙ икәнлеген иҫбатлағандай, саҡ ҡына йылытыу менән тәүҙә һыуланып епшене, унан ихласлап иреп, күҙ алдында юҡҡа сыға башланы. Алдаҡсы ҡар менән бергә уңышлы һунарға өмөттәр ҙә һүрелә барҙы. Күпмелер ваҡыт үтеүгә, ысынлап та, эҙ юллап һунар итеү хаҡында уйлап та булмай ине. Һунар килеп сыҡманы. Уңмағанды ҡыума, тиҙәр, шулай уҡ иҫтә ҡалырлыҡ бер нәмә лә күрмәйенсә әйләнеп ҡайтырға тура килерме икән? Улай анһат ҡына һис ҡайтҡы килмәй бит әле. Шулай тип бошонһам да, далан тигән нәмә бөгөн мине бөтөнләйгә ҡыйырһытып, ташлап китмәне...

Яҙмышҡа, дөрөҫөрәге, сәғәт һайын алышынып торған көҙгө һауа торошона тамам буйһоноуҙан башҡа сара ҡалманы. Аяҡтарға ял биреп, бер юлы тамаҡ та ялғап алмаҡ булып, ҡарт ҡайын төбөнә ултырҙым. Һунары барып сыҡмаһа ла, уның ҡарауы, ҡырҙар гиҙеп, ер-һыу күреп йөрөп ҡайтыуы - үҙе бер ғүмер бит ул. Үҙ-үҙемде ошолай йыуатҡан булам. Биштәремдән ашамлыҡ сығарып, еүеш ергә йәйелгән гәзит өҫтөнә теҙҙем.

Мин ултырған урындан алыҫ түгел, сөм-ҡара итеп һөрөлгән баҫыу ситендә, былтырғы һалам эскерте тора. Арыраҡ, һөҙөк ҡалҡыу битендә йәйрәп, йөм-йәшел ужым күҙ яуын алып ята. Йәшел балаҫ өҫтөндә йылы яҡтарға китергә өлгөрмәгән ҡарғалар мәж килә. Нимә тапҡандарҙыр инде унда? Дәү эскерт ышығындағы ҡар әле иреп бөтмәгән. Уның өҫтөндә ниндәйҙер ваҡ эҙҙәр күҙгә ташлана. Ул эҙҙәрҙең ҡайһы йәнлектеке икәнлеген бынан тороп айырырлыҡ түгел.

Ҡапыл күҙ ҡырыма ниндәйҙер хәрәкәт салынып ҡалғандай булды. Ҡанға һеңешкән ғәҙәт: иғтибарымды шул яҡҡа йүнәлтә һалдым. Эскерт тәңгәлендә кескәй генә кейек күренеп ҡалды. Күренде лә шунда уҡ юҡ булды. Бер аҙҙан тағы килеп сыҡты. Был юлы яҡыныраҡтан. Йығылып, ергә йәбешеп һоро япраҡтар менән ҡапланырға өлгөргән ҡаулан өҫтөндә ул иремәй ҡалған ҡар йомарламын хәтерләтә ине. Кемдер һелтәп ебәргән дә, тәгәрәп бара. Селт-аҡ йәнлек асыҡ урында ус төбөндәгеләй күренә. Ошо хәтәр аҙымға уны кем этәргән? Ҡарғаның ҡарғаһына уны эләктереп алыуы бер ни тормай хәҙер. Ниндәй ауан йән һуң ул? Йәтсәме, әллә уның яҡын ҡәрҙәше аҫмы?

Бәләкәс кейек туҡтала биреп һауаны еҫкәштерҙе. Шунда аңлап алдым: уны, күрәһең, минең табындағы тәмле ризыҡ еҫе, барлыҡ ҡурҡыныстарҙы инҡар итеп, көпә-көндөҙ күҙ алдына килеп сығырға мәжбүр иткән! Фаразымды дөрөҫләгән һымаҡ, йәнлек ашыҡмай ғына миңә табан килә башланы. Инде бар доньямды оноттом да, һынағасҡа әүерелдем. Был ерҙә, гүйә, әлеге кейек тә мин генә ҡалдыҡ. Еүешлектән өшөргәнә башлаған тәнем йылынып китте, йөрәк тибешем йышайҙы, башыма ҡайнар тулҡын йүгерҙе. Әйтерһең дә, өҫтөмә ниндәйҙер быңа-быңа ташланырға әҙер ҙур йыртҡыс килә.

Хәйер, ысын һунарсы өсөн табыштың эреһе-ваҡы юҡ. Үҙен һунарсыға һанағандар ҡуянына ла, айыуына ла берҙәй ҡыуанасаҡ. Башҡаса икән, тимәк ул - һунарсы түгел, ә бары урман тапап, еңел кәсеп көҫәүҙән буштан төшкән ҙур ит киҫәге эҙләп йөрөүсе генә.

"Ҡар киҫәге" һығылмалы-оҙонса кәүҙәһен матур уйната-уйната, аҡланды киҫеп үтте. Ул, гүйә, йөҙөп кенә бара. Хәрәкәттәре шундай еңел һәм ыҡсым. Инде ул миңә бөтөнләй яҡынлашты, хәҙер, хәҙер һиҙеп-шәйләп ҡаласаҡ. Шәйләп ҡалыр ҙа, шуның менән мөғжизә лә тамамланыр. Ләкин мин яңылыштым - мөғжизә тамаланманы, ул яңы башлана ғына ине әле. Кейектең ҡойроҡ осо ғына ҡарайып күренә. Тимәк, минең алдымда - аҫ үҙе. Йәтсәнең ҡойроҡ осонда ҡараһы булмай. Аҫтың саҡ ҡына эрерәк булыуын һанамағанда, уларҙың ошонан башҡа айырмаһы юҡ тиерлек. Үҙемдең белемсеҙлектән ҡәнәғәт ҡалып ултырам.

Аҫ был мәлдә ҡатып ултырған мине аптыратып, аяҡтары осона уҡ килеп етте лә, йәбешкәк мәтегә буялған итектәрҙе еҫкәштереп алды. Быңа арҡты тәпәйҙәренә баҫты һәм ифрат ентекләп күҙәтә башланы. Мин хәҙер таш һынға әйләндем. Тын алырға, хатта керпек ҡағырға ла ҡурҡам. Ә тегенең муйынсаҡ бөртөгөләй йылҡылдаған күҙҙәре фәҡәт миңә төбәлгән. Аҫ минең ҡарашымды тоя. Уның күҙҙәрендә бер сама хәүефләнеү ҙә, аңлайышһыҙ ғәжәпләнеү ҙә сағыла. Арҡты тәпәйҙәренә баҫҡан килеш, ул миңә ялбара ла кеүек. Ни һорап ялбара - уныһы билдәһеҙ. Кейектең ғәжәп хәрәкәтсән, ҡара төймәсек морон осо туҡтауһыҙ ҡыймылдай. Ул күҙҙәренә ҡарағанда моронона ныҡыраҡ ышана, буғай. Ҡупшы, матур ҡолаҡтары һаҡсыл тырпайған. Кейек ошо мәлдә бер хәрәкәтте лә күҙҙән ыскындырмай, бер тауышты ла иғтибарһыҙ ҡалдырмай ине. Аҙ ғына хәрәкәт, йәиһә, саҡ ҡына тауыш - һәм ул юҡҡа сығасаҡ. Ә минең был әкиәткә тартым мөғжизәне нисек тә һуҙаһым килә.

Ҡыҙыҡ, аҫ мине кем, йәки нимә тип ҡабул итә икән? Тик шуныһын асыҡ әйтә алам: алдымдағы йән эйәһе йәш, булыуы бала ғына. Ошоғаса уның әҙәми зат менән осрашҡаны юҡ. Шуның өсөн дә ул кеше еҫен һиҙә тороп, уның менән ошо рәүешле тап булышыуҙың ниндәй эҙемтәләргә килтеререн белмәй. Белгән саҡта былай алабарман ҡыланмаҫ ине.

Кейек миңә текләгән килеш тора бирҙе. Ҡарашы шул тиклем ентекле: көлөп ебәреүҙән көскә тыйылып ултырам. Шулай ҙа көлмәйем, түҙәм. Ҡайҙа барыр тиһең, тороп-тороп ҙа китер әле. Әммә ләкин йәнә яңылыштым. Ҡырағай кейек, ҡырағай урмандың барлыҡ ҡанундарын боҙоп, көтмәгәндә резина итек өҫтөнә килеп менде лә, ынтыла биреп, гәзит өҫтөндәге ризыҡты еҫкәштерҙе. Икмәккә ул бөтөнләй иғтибар итмәне, ә быңа бешкән иттән семтем генә өҙөп алып тәмләп ҡараны. Тоҙло тәғәмде оҡшатманы, ахыры, башҡаса һонолоп торманы. Ул, ризаһыҙлыҡ белдергәндәй, тамаҡ төбөнән ғырылдыҡ тауыш сығарҙы ла, оҙаҡ уйлап тормаҫтан, штормовканы шытырлатып тырнай-тырнай... иңбашыма менеп ҡунаҡланы. Бындайын инде мин һис көтмәгән инем. Нисектер, түҙеп ултырыр көс таптым. Артабан ни булыр? Мине хәҙер ошо ҡыҙыҡһындыра ине.

Әле мин ҡолағым төбөндәге аҫтың тын алышын ишетәм, һулышын тоям. Әммә алабарман кейек быныӊ менән генә сикләнмәне, бар булған оятын юғалтып, башыма уҡ барып менде лә, өҫтән ынтылып, күҙҙәремә ҡараны. Мин барыбер ҡуҙғалманым. Ахырҙа, ул ултырған ерендә бер-ике әйләнде лә, яурыныма кире төштө. Ҡулға өйрәтелгәнме ни! Артабан һалҡын мороно менән ҡолағыма ҡағылып алды, яға буйлап килеп битемә үрелде. Һалҡын мороно сикәмә тейҙе. Рәхәтләндереп ҡытыҡ килеүҙәнме, сирҡаныс ытырғаныуҙанмы, белмәйем, тәнем сымырҙап китте. Быңа-быңа урман яңғыратып көлөп ебәрәм инде. Әммә ләкин һаман түҙәм әле. Тик кейектең һөмһөҙлөгө һуңғы сиккә етеп танауыма ынтылғанда, үҙем дә теләмәҫтән, башымды бора бирҙем. Саҡ ҡына сыҙамлыҡ етмәне. Ә тегегә ошо ғына хәрәкәт артығы менән булды. Йылғыр аҫ күҙ асып йомған арала ергә һикерҙе лә, йәшен тиҙлегендә тамырҙар араһына инеп юғалды. Шунда башыма барып етте: тимәк, ошонда өңө бар. Уның төнгө һунарҙан ҡайтып килгән сағы булған, ә юлында мин осраным. Осраным һәм үкенмәйем: уйламағанда тағы бер мөғжизә күрҙем бит. Мөғжизәнең дә ниндәйе бит әле! Инде үҙеңде тыйып тормайса, ярып сығып килгән хистәргә ирек бирһәң дә була. Шулай иттем дә. Һил урманды яңғыратып көлгән тауышҡа ҡара болот булып ҡарғалар һауаға күтәрелде. Уларҙың шау-шыуы хатта минең тауышты баҫып китте. Көлөүҙән туҡтағас та, тынислана алмайса, йылы кисерештәргә бирелеп, ҡарт ҡайын тамырында байтаҡ ҡына ултырҙым. Нишләптер был ерҙән киткем килмәй ине. Селт аҡ кейек быңа-быңа яңынан килеп сығыр төҫлө. Әммә тылсымға тартым мөғжизәләр ҡабатланмай шул.

Ҡапыл ғына ҡурғаш ише ауыр болоттар таралып, көн яҡтырып киткән һымаҡ тойолдо. Төшкән кәйеф күтәрелеп, бошоноуҙың эҙе лә ҡалманы. Ҡырағай мөхиттең барлыҡ ҡанундарын инҡар итеп, үҙен донъя батшаһы һанап йөрөгән кеше һынлы кешенең башына уҡ килеп менгән кес кенә тәбиғәт балаһы үҙенә ҡарата, берҙән, ихтирам тойғоһо уятһа, икенсе яҡтан, уның ошо аҡылһыҙлыҡҡа тиң ҡылығы ысын-ысынында шаҡ ҡатырҙы. Осраҡтың бындайы һунарсы ғүмерендә бер генә булалыр. Уныһында ла барыһының да түгел. Шуның өсөн дә онотолмай.

Мин һыуыҡ иттән мул ғына киҫәк умырып алдым да, әле генә ғәжәп кейек инеп юғалған тамырҙар араһына һалдым һәм, ойой башлаған аяҡтарымды яҙып, ары ҡуҙғалдым. Артабан күтәренке күңелгә атлауы еңел ине.

## АЛЫШ

Быйылғы яҙ ныҡ ҡына һуңлауға ҡарамаҫтан, барыбер үҙенекен итте. Баҫыу-ҡырҙар әкренләп ҡарҙан асылып бөттө. Сағыл урындарҙа, ҡара ер күренер-күренмәҫ, йәш, әрһеҙ үлән морон төртә. Умырзая, көкүк ҡатаһы,

*✓ Күҙ алдында ҡойроҡһыҙ ҡалған ғорур торна ғәрлегенән айбарланып киттеме, этте яман типкесләргә тотондо. Тегеһе лайыҡлы ҡаршылыҡ күрһәтергә тырышты: хужаһы ҡарап тора бит.*



кәзә һаҡалы кеүек өлгөр, шунлыҡтан беренсе һаналған сәскәләр еләҫ елгә иркәләнеп, ҡояшта наҙлана. Шулай уҡ беренсеме икән? Ана, үгәй инә сәскәһе бит (тәбиғәттең бер мөғжизәһе!) ҡайһы аралалыр, ут-һары сәскәһен ҡойорға ла өлгөргән. Инде ул, мамыҡ башын елберләтеп, тирә-йүнгә орлоҡ сәсә. Бына ҡайҙа ул сәскәләрҙең иң беренсеһе! Шаян ел тулышҡан орлоҡтарҙы эләктереп ала ла әллә ҡайҙарға алып китә. Киләсәктә улары ла, ҡар асылыр-асылмаҫ шытып сығыр ҙа, йәһәт кенә сәскә атыр һәм баҙыҡ күҙҙәрен йымылдатып яр буйҙарын, уйһыу үҙәктәрҙәге бысҡыл урындарҙы биҙәр. Һағындырған яҙҙың тәүге хәбәрселәренә ҡарап кешеләр һөйөнөр.

Яҙ миҙгеле - бар тереклек нәҫел ҡайғыртҡан мәл. Кейеге менән осар ҡошо ла, үләне менән ағасы ла үҙе ишеләрҙе арттырып ҡалырға тырыша. Хатта тырнаҡ осондай ғына бөжәгенә тиклем парын эҙләп зыҡ ҡуба. Оҙон ҡышты йоҡлап үткәргән әүҙем бөжәк заты ерҙә лә, һауала ла ҡайнап тора. Сөнки, нәҫел-нәсәбең ни тиклем ишлерәк булһа - шул тиклем яҡшыраҡ. Киләсәк өсөн.

Һурығып, кибә барған һөрөнтөлә, һаламлы юл ситтәрендә һәр төрлө ҡошҡорт тулып йөрөй. Уларҙың барыһы ла ояһында баҫып ултырған икенсе яртыларын туйындырыр өсөн тырышып ята. Үҙҙәре ашамаһа-ашамай, ә оялағы ас булырға тейеш түгел. Араларында күҙгә иң ташланғаны - тынғы белмәҫ тәгәрлектер. Ул әллә шул ҡәҙәре ҡыҙғансыҡ, әллә шул тиклем көнсөлмө, яҡын-тирәләге башҡа ҡоштарға ла сүпләнергә ирек бирмәй, үҙенә лә кәрәкмәгән мәшәҡәт өҫтәй. Сарғалап-бартандап, хатта минең баш кейемenә саҡ һуғылмай кәйелеп үтергә лә ваҡыт таба. Ергә төшһә, туҡтауһыҙ йүгерә, һауаға күтәрелһә, талсығыу белмәй оса. Шул уҡ ваҡытта өҙлөкһөҙ сайҡылдай. Нисек ялыҡмай тиһең. Әкәмәт ҡош. Ә, ана, баҫалҡы сәпсек унының тап киреһе: берәй оҡшаған суҡайсыҡҡа ҡунаҡлап ала ла, тыныс ҡына ҡойроҡ һикертеп ултыра. Ул бер кемде лә бимазаламай. Төпһөҙ зәңгәрлектә талпынған һабан турғайына, күрәһең, бүтән ҡоштар араһында ҡыҙыҡ түгел. Ул мәңге һауала, тыуған еренә дан йырлай. Бына кемдә ул талмаҫ ҡанаттар! Һабан турғайы башҡа ҡоштарҙың ҡотон алып осоп үткән уҫал ҡарсығаға ла иғтибар итмәй. Унның өсөн бары йылғыр ыласын - яғалбай ғына ҡурҡыныс.

Мин, сымыры Буянымды эйәрләп, ужым арышының хәл-торошон белешергә, тип сыҡҡанмын. Әле бына, гөрләп торған ошо йәшәйешкә, яҙ хозурлығына һоҡланып бөтә алмайса китеп барам. Ужым тигәндән, күңел йылыһы биреп үҫтермәгән арыш - арыш булмай. Ул башағы бармаҡ осондай ғына сүп үләне. Арышҡа йыл әйләнәһенә тәрбиә һәм хәстәрлек кәрәк. Мин белгәндән башҡа бер ашлыҡ та уның кеүек хәстәр талап итмәй. Уның ҡарауы, талапсан булһа ла, тейешле тәрбиә алған арыш һине емерелеп уңған уңышы менән ҡыуандырасаҡ. Беҙҙең яҡтарҙа уңыш буйынса арышҡа еткән ашлыҡ юҡ.

Тотам ҡалмай артымдан эйәреп йөрөргә күнеккән Тузик иғтибарға лайыҡ бер нәмәне лә күҙҙән ысҡындырмай: һәр ҡайһыһына тейешле "билдәһен" һала бара. Тәбиғәткә сығып әйләнеү уның өсөн дә бер байрам.

Бына мин күрергә ашыҡҡан баҫыу. Иртә яҙҙың сөм-ҡара һөрөнтөләре араһында йәм-йәшел ут булып күҙҙең яуын алып ятҡан ужымға һоҡланмайынса ла, һөйөнмәйенсә лә ҡарауы мөмкин түгел. Шөкөр, арышыбыҙ иҫән-һау ҡышлаған. Игенсе өсөн ошонан да ҡыуаныслыраҡ ни бар? Тимәк, уның һалған хеҙмәте менән түккән тире бушҡа булмаған.

Күҙ күреме ерҙә, йәшел бәрхәтте кисеп, яңғыҙ торна йөрөй. Ул ҡабаланмай, эйелә биреп ниҙер суҡыштыра ла, беҙгә ҡарап тора. Осоп китергә уйламай ҙа. Миңә ул яҡшы күренһә лә, Тузик әлегә шәйләмәй. Эттең башҡа мәшәҡәттәре күп. Шулай ҙа, ни аралалыр, һонтор ҡош уның да күҙенә салынды. Торна эт ҡарашын тойҙо, буғай, әкрен-әкрен генә йыраҡлашып, ары күренгән һаҙлыҡҡа яҡынлаша башланы. Тузик, унан ҡалышмаҫҡа тырышып, инде йүгереүгә күскән ҡоштоң артынан төштө. Ҡасып барғанды ҡыумаған эт - эт буламы? Эттең тәбиғәте шул. Әммә был юлы икенсерәк, дөрөҫөрәге, уйламаған хәл килеп сыҡты. Торна йүгереп барған еренән шып туҡтаны ла ҡуйҙы. Бындайын көтмәгәнлектән, ҡапылғара ҡаушай төшкән эт тә, икеләнеп, ҡатып ҡалды. Бер-береһенә ҡарашҡан көйө улар байтаҡ ваҡыт торҙолар. Күрәһең, артабан ни эшләргә икәнен береһе лә белмәй ине. Мин, түҙем генә, ни булырын көттөм. Миңә ҡыҙыҡ: ситтән ҡарап, эйәрҙә ултырам. Ни менән бөтөр был осрашыу?

Билдәһеҙлекте башлап торна боҙҙо. Ул, себештәрен һаҡлаған ата ҡаҙ ише муйынын һона биреп, этгә килә башланы. Албырғап торған Тузикка мәсхәрәле рәүештә сигенеүҙән башҡа сара ҡалманы. Быны күргән торна үтә батырайып китте, ахыры, этте ихласлап ҡыуырға тотондо. Мин уларҙың әкәмәт ҡыланышына көлөп ебәрҙем.

Эттең бит, яҡшымы ул, яманмы, тағы бер ғәҙәте бар: хужаһы янында әллә кем булып шәбәйә лә китә. Эт ояһында көслө, тигән һымаҡ, хужаһы янында көслө булмаһа ла ҡыйыу. Ошоно раҫлағандай, Тузик кинәт әйләнде лә хәтәр ышылдап килгән торнаға ҡаршы һөжүмгә күсте. Бындайҙы мин көтмәгәйнем. "Харап итте торнаны!" тип уйларға ла өлгөрмәнем, ҡош, күҙ асып йомған арала, өҫкә һикерҙе. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәйсә сабып барған эт уның аҫтынан зыйлап үтеп китте. Ярай әле эләктерә алманы. Киреһенсә, торна, һауала килеш, осло суҡышы менән уның ҡаҡ маңлайына тондороп өгөрҙө. Үҙе саҡ ҡыбырлап йөрөгән һымаҡ, ә ғәжәп сос икән! Бындай кәмһетеүгә түҙеп тора алмаған эт ауыртыуҙан оторо ярһыны. Ҡыҙыу алыш башланды. Иң ҡыҙығы шунда: Тузик һөжүм итә, ә туҡмаҡтың башы, торна суҡышы сүрәтендә, әленән-әле уға төшә. Күренеп тора, торна эттең күҙен соҡоп алырға самалай. Бер мәлгә минең баштан: "Ысынлап та күҙһеҙ ҡалдыра бит был этте", - тигән хәүефле уй үтте. Шул рәүешле башта мәрәкә генә күренгән эштең ҡыҙығы бөтә барып, ул ҡурҡынысла ҡыйнашҡа әүерелде. Бер кем дә бирешергә теләмәй ине. Бына нисек итеп уйындан уймаҡ сыға икән. Эттең маңлайында, торнаның оҙон томшоғонда ҡан күренеп ҡалғандан һуң мин ҡаршымда булып ятҡандың уйын түгел икәнен асыҡ аңланым һәм һуғыш суҡмарҙарын айырмаҡсы булдым. Ошо урында Тузик, нисектер сосайып, торнаның ҡойроғон йолҡоп алыуға иреште. Күҙ алдында ҡойроҡһыҙ ҡалған ғорур торна ғәрлегенән айбарланып киттеме, этте яман типкесләргә тотондо. Тегеһе лайыҡлы ҡаршылыҡ күрһәтергә тырышты: хужаһы ҡарап тора бит. Тирә-яҡҡа ҡаурый ҡатыш эт баҡтаһы осто, тупраҡ сәселде. Былай барһа, бер нәмә сығара бит былар.

Мин артабан тамашасы сифатында түҙеп тора алманым, атымдың ҡабырғаһын төйгөсләй-төйгөсләй һуғыш суҡмарҙары янына ашыҡтым. Торна, яҡынлашып килгән һыбайлыны күреп, тиҙерәк ҡасып ҡотолоу яғын ҡайырҙы: ҡанаттарын хәлһеҙ йәйә биреп, йән фарманға йүгерә башланы. Яҡлау тойған этем уны эҙәрлекләй төштө. Ләкин, етерһең торнаға, етмәй ни! Ә ни сәбәптән һуң ул осоп китмәй? Бәй, ҡанаттарының эре ҡаурыйҙары юҡ та баһа! Тимәк, түләп йөрөгән сағы. Бәлки, уның ояһы ла ошо тирәлә, яҡында ғыналыр әле. Юғиһә, алағайымға йән аямай һуғышып йөрөмәҫ ине.

Эт тәнендәге яра тиҙ уңала. Тузиктың да йәрәхәттәре аҙна-ун көн эсендә уңалып бөттө. Шулай ҙа өҫкө ҡабағы өҙөп алынған уң күҙе ғүмеренең ахырынаса зәғиф булып ҡалды.

**(Аҙағы. Башы 24-30-сы һандарҙа).**

*ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП*



# НӘФСЕ. ЙӨРӘК. РУХ.

## Йөрәк

**28. Ышаныcһыҙ йөрәк.** Өс осраҡта йөрәк ышаныcһыҙға әүерелә: медитация ваҡытында кешенең иғтибары Аллаһы Тәғәләнән ситкә тайпылһа; Аллаһы Тәғәләгә, унның бөйөклөгөн танымайынса, үҙе хаҡында ғына һөйләп мөрәжәғәт иткәндә; әгәр ҙә кеше Аллаһы Тәғәлә барлыҡҡа килтергәнде унан да юғарыраҡ ҡуйһа.

**29. Йөрәктең күреү һәләте.** Йөрәк күҙ күрмәгәнде күреүгә һәләтле. Алит ибн Али Талиптан "Аллаһы Тәғәләне күрҙеңме һуң?" тип һорағандар. "Күрмәгәнгә нисек табынайым һуң", - тип яуаплаған ул. "Йөрәк яңылыш күрмәй", тип әйтелә Ҡөрьәндә.

**30. Нәфсе - күп төрлөлөктө, йөрәк берҙәмлекте теләй.** Нәфсе - йөрәкте аҙҙырыусы, ә йөрәк - хакимлыҡ министры. Йөрәк - күп төрлөлөк менән берҙәмлек араһында барған һуғыш майҙаны, яу яланы.

**31. Интеллектты йөрәк менән сағыштырыу.** Йөрәктән айырмалы рәүештә интеллект аңлау һәләте менән бәйле, шуға күрә лә ул Аллаһы Тәғәлә ихтыярына буйһонмай. "Зирәклек - Аллаға табыныусының берҙән-бер маҡсаты", тигән бәйғәмбәр.

**32. Тәхетте йөрәк менән сағыштырыу.** "Аллаһы Тәғәләгә ышаныусы кешенең йөрәге рәхимлек тәхете", тигән бәйғәмбәр.

**33. Өс төрлө йөрәк була:** шаһит йөрәк, йәғни Аллаһы Тәғәләгә илтеүсе ҡапҡаларҙың барлығына шаһит йөрәк; саф йөрәк, йәғни икеләнеүҙәрҙән азат, Аллаһы Тәғәләнең үҙендә йәшәүсе йөрәк; үкенеүсе йөрәк, йәғни үҙ гонаһын аңлап, Хоҙайға өндәшеүсе йөрәк. Үкенеүсе йөрәк - ул ғазаптар keләте.

**34. Йөрәктең ете рухи кимәле бар:**

**Күкрәк.** Ул йөрәкте нәфсенән айырып һаҡлап тора. Күҙ ҡараһы өсөн күҙ ағы нисек кәрәк булһа, йөрәк өсөн күкрәк тә шул тиклем кәрәк. Йөрәккә төбәлгән һәр төрлө емерткес көстәр иң тәүҙә күкрәккә килеп һуғыла. Күкрәк өсөн - йөрәк, быуа өсөн - һыу. Йөрәк - тамыр йәки принцип, ә күкрәк - ботаҡ йәки һөҙөмтә.

**Йөрәк үҙе.** Күҙ һуҡыр түгел, күкрәк аҫтындағы йөрәк һуҡыр.

**Йөрәк - Мөхәббәттең ижад урыны.**

**Йөрәк - күреү урыны.** Йөрәк күргән нәмәһендә яңылышмай.

**Йөрәк - Аллаһы Тәғәләгә мөхәббәт урыны.** Ундай йөрәктә башҡаларға ҡарата мөхәббәт йәшәмәй.

**Йөрәктең үҙәге.** Ул - ихласлыҡ, зирәклек сығанағы, Илаһи серҙәр һандығы. Йөрәктең үҙәгенә хатта фәрештәләр ҙә үтеп инә алмай.

**Йөрәктең Илаһиәт үҙәге.** Ул - Аллаһы Тәғәлә урыны.

**35. Йөрәккә мөнәсәбәте булған төш күреүҙәр.** Әгәр ҙә кеше төшөндә көмөш күрһә, был - дөрөҫлөк, алтын - ихласлыҡ, ынйы - Аллаһы Тәғәләнең бөйөктәрҙән берәү генә булыуы, рубин - Илаһи зирәклек һәм ысын мөхәббәт, гәрәбә - йондоҙҙарҙы таныу, кристалл - матди донъя зирәклеге һәм шиғри оҫталыҡ, зөбәржәт - сафлыҡ, аҡыҡ - ҡыйыулыҡ символы һ.б. Күп осраҡта рубин, сапфир һәм аҡыҡ йөрәкте символлаштыра.

**36. Йөрәкте таҙартыу.** Таҙарынған һәм камиллашҡан йөрәктә Илаһи-лыҡтың барлыҡ билдәләре сағыла. Тик камиллашҡан, таҙарынған йөрәк кенә тән ағзаһы булған йөрәктән рухи йөрәккә әүерелә. Йөрәк күҙе ябай күҙ менән күрмәгәнде күрә, йөрәк ҡолағы тынлыҡты ишетә, йөрәк танауы еҫһеҙҙе лә тоя. Йөрәкте таҙартыу уның күреү, ишетеү һәм һиҙеү ағзаларын таҙартыуҙы аңлата.

Йөрәкте таҙартыуҙың төрлө юлдары бар. Ҡайһы берәүҙәр нәфсеһе теләгәндең киреһен үтәп, үҙҙәренең холҡон үҙгәртеп ҡараны. Әммә холоҡтоң бер генә кире яғын үҙгәртеү өсөн дә тотош ғүмер талап ителә. Әгәр ҙә кеше саҡ ҡына онотолһа, нәфсе барыһын киренән ҡайтара. "Нәфсе - ул аждаһа, кем уны, үлгән, ти һуң?" тигән Руми. Ә суфыйҙар үҙ йөрәген матди донъянан, үҙ-үҙенән китеп кенә таҙарта алған. Кеше тик осраҡлы уй-фекерҙәрҙән ҡотолоп ҡына нәфсенән һәм Иблес мөхитенән сыға ала.

## Рух

**Кешенең йөрәге - берҙәмлек һәм күп төрлөлөк араһындағы тигеҙлек ул. Әгәр ҙә унда теләктәр яугиры - нәфсе хакимлыҡ итһә, йөрәк ҡыйрала һәм тотҡонға әләгә. Әгәр ҙә инде мөхәббәт ғәскәре нәфсене ҡыуып сығара алһа, рух тантана итә. Рух бер нисә сифатҡа эйә:**

**1. Рух - мөхәббәт урыны.** Дуҫлыҡ өс баҫҡыстан тора: теләк - тән билгеһе, изгелек яратыу - йөрәк билгеһе һәм мөхәббәт - рух билгеһе. Теләк - нәфсенән, изгелек яратыу - йөрәктән, мөхәббәт рухтан ярала. Нәфсе - теләктән, йөрәк - изгелек яратыуҙан, ә рух мөхәббәттән азат түгел. Мөхәббәт - ул ғашиҡтар төйәге, ә ғашиҡтар - ғазаптар төйәге.

**2. Рух билгеһе булған мөхәббәт өс төргә бүленә:**

**Ысын мөхәббәт** - Аллаһы Тәғәләнең барлығын һәм берҙән-бер булыуын аңлаған һәм танығандың мөхәббәте;

**Иҫерек мөхәббәт** - һөйөүҙән башын һәм тыныслығын юғалтҡан, теләк менән янған мөхәббәт. Шарап интеллектты еңһә - нәфсе иҫерә, яҡынлыҡ һиҙгерлекте еңһә - йөрәк иҫерә, эскерһеҙлек яҡынлыҡты еңһә - рух иҫерә;

**Тормошта булмаған мөхәббәт** - үҙ нәфсеһен еңгән, Аллаһы Тәғәләгә һыйынған, шул уҡ ваҡытта ике донъяла ла татылмаған һөйөү. Ике донъя ла ундайҙарға мөхәббәт вәғәҙәләй, әммә ул икеһендә лә был тойғоно татымай.

**(Дауамы бар).**

✓ *Улар тәҡдим иткән ысул ябай, әммә барыбер ҡурҡыныс икән. Ни тиһәң дә, урман хужаһы булған айыуҙың иҫәбен алырға китеп барабыҙ бит. Ә улары был ваҡытта йоҡлап ятмай.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАН БАҪЫМЫ ТҮБӘНМЕ?

■ Ғалимдар билдәләүенсә, үҙ йәшенән күпкә йәшерәк күренгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың ғәҙәттә ҡан баҫымы түбән була, был иһә улар араһында йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән ауырыу хәүефен түбәнәйтә. Шуға ла бындай ҡатын-ҡыҙҙар оҙағыраҡ йәшәй. Табиптар әйтеүенсә, улар беренсе тапҡыр тышҡы ҡиәфәт менән түбән ҡан баҫымы араһындағы бәйләнеште өйрәнә. Эксперименттарҙа 514 кеше ҡатнашҡан, уларҙың уртаса йәше 63 йәш була. Шулай уҡ нәҫелендә оҙаҡ йәшәүселәр ҙә йәшерәк күренә икән, был яңылыҡ ир-егеттәргә лә ҡағыла.

■ Америка ғалимдары раҫлауынса, бәләкәй генә сағынан даими рәүештә телевизор ҡараған балалар йәше тулған мәленән үк үҫеш буйынса тиҫтерҙәренән ҡалыша башлай. Тайпылыштар психик йәһәттән һәм аҡыл үҫешендә күҙәтелгән. Белгестәр 259 ғаиләне тикшергәндән һуң бындай һығымтаға килгән. Бигерәк тә өлкәндәр өсөн тәғәйенләнгән тапшырыуҙар зыян килтерә. Мәҫәлән, бала һөйләшмәүе ихтимал, сөнки ата-әсә уның менән тейешенсә шөғөлләнмәй. Иң ҡыҙығы, был факт ғаиләнең түбән йә юғары килемле булыуына ҡарамай. Ғөмүмән, тәүге ике йылда бала өсөн телевизор мәғлүмәт биреү функцияһы үтәмәй. Киреһенсә, ул баланың аҡылын үҫтереүгә зыян һала. Хатта балалар өсөн махсус тәғәйенләнгән тапшырыуҙар ҙа хәлде ҡотҡара алмай. Шуға ла балағыҙ үҙ йәшенә күрә дөрөҫ үҫешһен өсөн уның менән бергә телевизор ҡарамағыҙ, ә уның менән аралашығыҙ, ти ғалимдар.

■ "Time" журналы яҙыуынса, бер юлы бер нисә электрон ҡоролма менән файҙаланыу күҙҙәр көсөргәнешенә килтерә. Мәҫәлән, һеҙ компьютерҙа ултыраһығыҙ, әммә эргәгеҙҙә ятҡан тағы бер нисә гаджетҡа ла иғтибар бүлеп өлгөрәһегеҙ. Тикшеренеүҙәрҙә 10 меңдән ашыу өлкән кеше ҡатнашҡан. Уларҙың 70 проценты бер юлы бер нисә ҡорамал менән ҡулланыуын белдергән, 65 проценты был осраҡта физик дискомфорт кисереүен - күҙҙәр әсетеүен, күҙҙәрҙең насар күрә башлауын, баш ауыртыуын таныған. Етмәһә, экранды күҙҙәргә ныҡ яҡын тотоу сәбәпле, күҙ ҡабаҡтарын йомоп алыу һирәгәйә. Был тағы ла күреү һәләтенең түбәнәйеүенә килтерә. Цифрлы ҡорамалдар экрандары бүлеп сығарған зәңгәр төҫ тә насар йоғонто яһай. Был төҫ үҙенең сифаты менән ультрафиолет нурланышына яҡын. Ул күҙҙең селтәрле ҡабығына зыян итә. Күҙҙәр арымаһын өсөн белгестәр 20-20-20 ҡағиҙәһен күҙәтергә тәҡдим итә. Һәр 20 минут һайын күҙҙәргә 20 минутлыҡ ял бирергә һәм 20 фут (6 метр тирәһе) алыҫлыҡта урынлашҡан предметҡа ҡарарға.

ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

# ҠУРСАУЛЫҠТА НИСӘ АЙЫУ?



**Башҡорт дәүләт ҡурсаулығы биләмәһендә йыл әйләнәһенә ҡырағай йәнлектәрҙең иҫәбен алыу эштәре башҡарылып килә. Мышы, марал, айыу, илек, бүре, һеләүһен, ҡабан, ҡама, ҡондоҙ, аҫ, йәтсә, тейен, ҡуян, терпе (һанай китһәң, күп инде улар) артҡанмы-кәмегәнме икән - бына ошо һорауҙы асыҡлай инде иҫәпте алыу эштәре.**

Иҫәп-хисап эштәренең береһе менән яҡындабыраҡ танышып китәйек әле. Бына июль айында урмандың төп хужаһы булған айыуҙың иҫәбен алыу эштәре башҡарылды. Ә уны нисек һанайҙар икән? Әлбиттә, бындай һорауҙы күптәр үҙ-үҙенә биргәндер. Тайыштабанды һанау тәртибен аңлатып китәйем. Күптәр беләләр (ә, бәлки, белмәйҙер ҙә), айыуҙың төп аҙығы булып ит түгел, ә үлән, уның тамырҙары, өлгөрөп еткән емеш-еләк иҫәпләнә. Күптәр, айыу әйләнгән һайын йә һыйырҙы, йә атты, йә боланды тотоп ашай, тип яңылыш уйлай. Улай түгел шул. Дәү кәүҙәле айыу күбергән үлән-тамыр менән туҡлана. Июль башында уларға аҙыҡ етәрлек. Был мәлдә, бигерәк тә йылға буйҙарында, үлән кеше бейеклеге булып үҫеп ултыра. Айыуҙы һанау ысулын тәҡдим иткән ғалимдар тап бына ошо хәлде иҫәпкә алған. Һәм бына ошондай ысулды тәҡдим иткәндәр - июль айында таң менән, ысыҡ кипмәҫ борон, йылға үҙәндәре буйлап үтергә һәм айыуҙарҙың эҙҙәрен һанарға! Әйтергә кәрәк, ғалимдарҙың фараҙы дөрөҫкә сыҡҡан. Ысынлап та, был мәлдә йылға буйҙарында айыу күпләп туҡлана һәм ысыҡ кипмәҫ борон уның эҙе асыҡ күренә икән. Ыңғай һөҙөмтә биргән был ысул үткән быуаттың 70-се йылдарында тәҡдим ителгән һәм ул бөгөн дә уңышлы ҡулланыла. Уны бөгөн дә илдең башҡа ғалимдары, был ысул ябай, әммә уңышлы, тип һанай. Ярты быуат буйы ошо һыналған ысул менән илдең барлыҡ ҡурсаулыҡтары эшләй. Ошо урында бер аҙ маҡтанып китергә лә форсат бар - был ысул тап беҙҙең Башҡорт ҡурсаулығында тәҡдим ителгән һәм тәү башлап беҙҙә башҡарылған. Ҡурсаулыҡ биләмәһе буйынса бөтәһе 14 маршрут һалынған. Уларҙың дөйөм оҙонлоғо 224 км тәшкил итә. Һәр маршрут буйлап йәйәүләп икешәр кеше йөрөй. Айыуҙар һаны үтелгән маршруттарҙың һөҙөмтәһе буйынса билдәләнә.

Ярай, бер аҙ тарихҡа байҡау яһаныҡ. Хәҙер бөгөнгө көнгә әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Бына беҙгә 9-сы маршрут эләккән. Беҙ, тигәнем, мин һәм бүлек дәүләт инспекторы Фирзар Мортазин. Ҡағыҙға төшөрөлгән маршрутҡа күҙ һалам. Тәғәйен юлыбыҙ 6 йылға үҙәне буйлап үтә. Беҙ үтәһе йылғалар барыһы ла үҙ һыуҙарын Үҙән йылғаһына ҡоя. Дөйөм үтәһе юлыбыҙҙың оҙонлоғо сама менән 18 км. Тотош маршрутты бер көндә үтеп булмаясаҡ, сөнки ысыҡ кибеп өлгөрәсәк. Кәм тигәндә лә ике көн ваҡыт кәрәк буласаҡ. Бөгөн тәүге көн. Беҙ таңғы 6-ла урман төпкөлөндә, Үҙән йылғаһы буйында, баҫып торабыҙ. Урманға ҡарап шуны уйлап торам, ул әле тулыһынса уянып бөтмәгән. Ара-тирә ишетелеп ҡалған ҡош тауыштарын иҫәпкә алмағанда, урманда тынлыҡ һәм тыныслыҡ хөкөм һөрә. Әммә мин (моғайын, Фирзар ҙа шул хәлдәләр) тулыһынса уянып бөткәнмен. Үҙем дә һиҙмәй ҡалам, һәр тауышҡа, һәр ҡыштырлауға баш шул яҡҡа ялп итеп ҡала. Ғалимдарҙы әйтәм, улар тәҡдим иткән ысул ябай, әммә барыбер ҡурҡыныс икән. Бында таһыллыҡ та, оҫталыҡ та һәм башҡаһы ла кәрәк. Ни тиһәң дә, урман хужаһы булған айыуҙың иҫәбен алырға китеп барабыҙ бит. Ә улары был ваҡытта йоҡлап ятмай. Күптән инде урман буйлап ашарға эҙләп тегеләй-былай йөрөп ята.

Беренсе үтәһе юлыбыҙ - Әлмөхәмәт йылғаһы. Бисмиллалар әйтеп, уның үҙәненә тәүге аҙымдарҙы яһайбыҙ. Күп тә барманыҡ, айыу эҙенә тап булдыҡ. Тирә-яҡты байҡай һалып (берәй ерҙә боҫоп тормаһын), уның эҙен-эшмәкәрлеген өйрәнәбеҙ. Был айыу унанбынан ғына, йыбанып ҡына ҡырмыҫҡа ояһын туҙҙырып киткән. Был тайыштабан әллә ни ҙур түгел. Табан яҫылығы 12 см. Әйткәндәй, айыуҙың ҙурлығын уның табан яҫылығына ҡарап билдәләйҙәр. Ғалимдар бына ошондай һандар килтерә. Әгәр табан яҫылығы 8-9 см икән, тимәк, был быйылғы (йәше тулмаған) айыу балаһы, уның ауырлығы 40-50 кг-дан артмай. Былтырғы (бер йәше тулған) айыу балаһы 11-12 см-ға еткән эҙ ҡалдыра, уның ауырлығы 70-80 кг була. Табан яҫылығы 13 см икән, тимәк, был өсөнсө йәше менән барған айыу, ауырлығы 130-150 кг. Дүрт-алты йәшлек айыу 14-15 см эҙ ҡалдыра, уның кәүҙә ауырлығы 180-190 кг була. 16 см-ҙан үткән табан яҫылығы алты йәштән өлкән айыуҙыҡы (180-220 кг). Әгәр 17-18 см булһа - был үтә ҙур кәүҙәле айыу, ауырлығы 400 кг-дан күберәк. Әйткәндәй, былтыр ҡурсаулыҡ биләмәһендә табан яҫылығы 22 см булған айыу эҙе осраған. Был әлегә дөйөм ҡурсаулыҡ буйынса иң юғары күрһәткес булып иҫәпләнә. Бындай дәү айыуҙың кәүҙә ҙурлығын күҙ алдына ла килтереүе ҡурҡыныс.

Тәүге айыу эҙен ҡағыҙға теркәйбеҙ ҙә юлды артабан дауам итәбеҙ. Күп тә бармайбыҙ, бына тағы айыу эҙе. Быныһы мүкле ерҙән үтеп киткән. Фирзар усы менән эҙгә баҫып, уның ҙурлығын самалай. Сама менән табан яҫылығы 16 см, тиған һығымтаға килә ул. Бер аҙ шомло булып китә, сөнки бындай табанлы айыу ҙурҙар исемлегенә инә (Әйткәндәй, бәләкәй айыу менән дә күҙмә-күҙ осрашмауың хәйерле, уны барыбер еңеп булмаясаҡ). Бер аҙ



Үләнде тапап йөрөгән.



Ҡарағайға һыҙып киткән.



Муйыл ашаған.



Тамыр соҡоп ашаған.



### 3 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.05 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
23.30 Д/ф Премьера. "Охотники за ураном. Красноярское дело геологов". К 175-летию Русского географического общества. [12+]
0.30 Т/с "Тот, кто читает мысли" ("Менталист"). [16+]
2.15 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Наживка для ангела". [12+]
1.50 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 Ради добра. [6+]**
**17.30 "Пофутболим?" [12+]**
**18.00 "Бай баҡса". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.30 Спектакль "Не улетайте, журавли!" [12+]**
**2.45 Спектакль "Операция". [12+]**
**4.45 "Опавшие листья". Концерт трио "Light Musik" (Москва). [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 4 АВГУСТА ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.05 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
23.30 Д/ф Премьера. "Лефорт. Балтийская легенда". К 175-летию Русского географического общества. [12+]
0.30 Т/с "Тот, кто читает мысли" ("Менталист"). [16+]
2.15 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Наживка для ангела". [12+]
1.50 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**18.00 Спортивная история. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 Мусорная реформа. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Детей много не бывает. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.30 Спектакль "Ильгизар+Вера". [12+]**
**2.45 Спектакль "Заноза". [12+]**
**4.30 В зазеркалье "Петербургских сезонов". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 5 АВГУСТА СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.05 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
23.30 Д/ф Премьера. "Чукотский спецназ". К 175-летию Русского географического общества. [12+]
0.30 Т/с "Тот, кто читает мысли" ("Менталист"). [16+]
2.15 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Наживка для ангела". [12+]
1.50 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. 12+**
**11.45 "Криминальный спектр".[16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00, 5.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Спектакль "Дочь степей". [12+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Любишь - не любишь?" [12+]**
**4.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**4.30 "Пофутболим?" [12+]**
**4.45 Ради добра. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 6 АВГУСТА ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.45, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]
23.30 Премьера. "Гол на миллион". [18+]
0.20 Т/с "Тот, кто читает мысли" ("Менталист"). [16+]
2.00 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 Т/с "Наживка для ангела". [12+]
1.50 Т/с "Доктор Рихтер". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай баҡса". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.15, 23.00 Автограф. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр".[16+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Времечко". [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.30 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]**
**2.45 "Шаляпинские вечера в Уфе". XXVI фестиваль оперного искусства им.Ф.Шаляпина. Репортаж. [12+]**
**3.30 Гала-концерт "Шаляпинские вечера-2018". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 7 АВГУСТА ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 "Дороги любви". Юбилейный концерт Дмитрия Харатьяна. [12+]
23.30 Олимп Суперкубок России по футболу. "Зенит" (Санкт-Петербург) - "Локомотив" (Москва).
1.45 Х/ф "Любовь-морковь по-французски". [18+]
3.15 Большие гонки. [12+]
4.35 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия". [12+]
17.15 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.20 "Юморина". [16+]
23.10 "Новая волна".
1.10 Шоу Елены Степаненко. [12+]
2.05 Х/ф "Моя мама против". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр".[16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 21.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30, 2.30 Новости**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**17.15 Моя планета Башкортостан.**
**19.00 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00, 4.45 Караоке по-башкирски.**
**23.30, 5.45 Уфа. Живое. [12+]**
**0.15 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]**
**3.00 Спектакль "Пещера". [12+]**
**5.15 Теге өсәү. [12+]**

### 8 АВГУСТА СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Михаил Державин. "Во всем виноват Ширвиндт". [12+]
11.15, 12.15 "Видели видео?" [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.50 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.00 Т/с "А у нас во дворе..." [12+]
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
18.00, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
22.40 Х/ф Премьера. "Лучше дома места нет". [16+]
0.40 Большие гонки. [12+]
2.00 Наедине со всеми. [16+]
2.45 Модный приговор. [6+]
3.30 Давай поженимся! [16+]
4.10 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 "Сто к одному".
11.00, 20.00 Вести.
11.30 "Аншлаг и Компания". [16+]
13.25 "Доктор Мясников". [12+]
14.30 Х/ф "За лучшей жизнью". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Этим летом и навсегда". [12+]
1.00 Х/ф "Его любовь". [12+]
4.03 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30, 6.00 "Йәйләү". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Онлайн "Детский Байыҡ-2020". [6+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.15 Земляки. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]**
**1.30 Итоги недели (на баш. яз.) [12+]**
**2.15 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]**
**4.00 Магия Барокко-2018. [12+]**

### 9 АВГУСТА ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30, 6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.20 Т/с "Тонкий лед". [16+]
8.20 Д/ф Премьера. "Великие реки России. Лена". К 175-летию Русского географического общества. [6+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Д/ф Премьера. "Атос влюбленными глазами". К юбилею Вениамина Смехова. [12+]
11.20, 12.10 "Видели видео?" [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.50 Премьера. "На дачу!" с Ларисой Гузеевой. [6+]
15.00 Т/с "А у нас во дворе..." [12+]
17.05 "Русский ниндзя". [12+]
19.10 "Три аккорда". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с "Налет". [16+]
23.30 Премьера. "Щас спою!" [12+]
0.45 Большие гонки. [12+]
2.00 "Моя мама готовит лучше!" [0+]
2.50 Модный приговор. [6+]
3.35 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.10, 3.05 Х/ф "Не покидай меня, Любовь". [12+]
5.50 Х/ф "С чистого листа". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Устами младенца".
9.20 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
10.10 "Сто к одному".
11.00, 20.00 Вести.
11.30 "100ЯНОВ". [12+]
12.15 Т/с "Фальшивая нота". [12+]
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.00 Х/ф "Собачий рай". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Моя вершина. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**10.45 "Байтус". [6+]**
**11.00 "Книга сказок". [0+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45, 5.00 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00, 15.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Мои крылья - мои сыновья". Вечер памяти Амира Абдразакова. [12+]**
**18.15 Бизнес-обзор. [12+]**
**18.45 Дела и люди. [12+]**
**19.45, 2.15 Әлләсе... [6+]**
**20.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 Спектакль "Великий обольститель". [12+]**
**3.00 Гала-концерт фестиваля "Петербургские сезоны в Уфе-2019". [12+]**
**5.45 "Пофутболим?" [12+]**

---

Башҡорт дәүләт педагогия институты башҡорт филологияһы факультетының 1993 йылғы сығарылыш 4д төркөмө төркөмдәштәре Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы 1-се мәктәбенең директор урынбаҫары, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, БР Мәғариф отличнигы

**Рәсимә Камил ҡыҙы Ибраһимованың (Хәмитова)**

фажиғәле вафаты айҡанлы тәрән ҡайғы белдерә һәм иренең, балаларының, туғандарының һәм яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

✓ *Ҡатын-ҡыҙҙар тураһында насар һөйләгән ир, ғәҙәттә, бер генә ҡатын-ҡыҙҙы күҙ уңында тота.*

*(Реми де Гурмон).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ДИН ИМАН МЕНӘН КӨСЛӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**30-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Съезд. Сәғитов. Таған. Барби. Тәхет. Крузо. Агроном. Назар. Әрҙәнә. Ата. Бау. Ҡараҡ. Лупа. Ауыл. Йәйен. Есаул. Исем. Абонент. Аулаҡ. Һолобаш. Ҡортбаш.

**Вертикаль буйынса:** Асанбаев. Бураҡаева. Нужа. Ала. Серб. Бурһыҡ. Икмәк. Сәғәт. Балан. Еҙғорт. Ғиззәтуллин. Стела. Диван. Шеш. Төн. Ҡайма. Арба. Алҡа. Тир. Ҡунаҡ.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Июль - Август (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (13) дүшәмбе | 4:02 | 5:32 | 13:30 | 19:41 | 21:11 | 22:41 |
| 4 (14) шишәмбе | 4:04 | 5:34 | 13:30 | 19:39 | 21:09 | 22:39 |
| 5 (15) шаршамбы | 4:05 | 5:35 | 13:30 | 19:37 | 21:07 | 22:37 |
| 6 (16) кесе йома | 4:07 | 5:37 | 13:30 | 19:35 | 21:05 | 22:35 |
| 7 (17) йома | 4:09 | 5:39 | 13:30 | 19:33 | 21:03 | 22:33 |
| 8 (18) шәмбе | 4:11 | 5:41 | 13:30 | 19:31 | 21:01 | 22:31 |
| 9 (19) йәкшәмбе | 4:13 | 5:43 | 13:30 | 19:29 | 20:59 | 22:29 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



"Киске Өфө"нөң алыштырғыһыҙ хеҙмәткәрҙәре, береһе бөркөттәй, береһе ыласындай һылыу йәш йөрәктәр -

**Алһыу Кинйәбаева менән Артур Батыршинды**

законлы никахаҡа инеп, матур ғаилә ҡороуҙары менән шатлыҡтан күккә ашып, һоҡланып, ихласланып ҡотлайбыҙ.

Алһыу, Артур беҙҙең башҡорт ҡыҙҙарына һәм егеттәренә баш ҡала үҙ иштәрен, үҙ бәхеттәрен, насип мөхәббәттәрен табып бирә. Һеҙҙе лә Өфө таныштырҙы, ҡауыштырҙы, никахлы булып, бер-берегеҙгә алтын менән көмөш булдығыҙ. Ошо бәрәкәттән ҡалмағыҙ, ғүмер буйы бер-берегеҙгә алтын менән көмөш булығыҙ. Бер-берегеҙҙе йәлләгеҙ - ауыр һүҙҙән, ауыр күҙҙән, тәмһеҙ аштан, дыуамал баштан бер-берегеҙҙе ҡурсып ҡына тороғоҙ, ғаиләгеҙ ныҡ булыр, оҙаҡ йәшәрһегеҙ. Аяғығыҙ еңел булһын, һеҙҙең кеүек бөтә матур башҡорт ҡыҙҙары һәм егеттәре гүзәл Өфөбеҙҙә үҙ иштәрен-парҙарын тапһын, татыу-татлы никах менән ҡауышһындар. Ҡотлайбыҙ!

**"Киске Өфө"ләр.**

БАҠСА

# ТОҘ, СОДА, ГӘРСИС, КЕФИР...

## ҡороҡҡостарға ҡаршы?

**Яҡшы уңыш алыр өсөн һәүәҫкәр баҡсасылар нимә генә уйлап тапмай. Ағыулы матдәләр түгел, ә тоҙ, ойоған һөт, сода, йод кеүек һәм башҡа ҡул осонда булған әйберҙәр ниндәй осраҡта ярҙам итә?**

**Тоҙ.** Япраҡ ярғансы емеш ағасына тоҙло һыу һипһәгеҙ, бәшмәк ауырыуҙарына бирешмәҫ, һуғанығыҙ себенләмәҫ. Сөгөлдөр ҙә тоҙ ярата: 4-5 япрағы сыҡҡас һәм ҡаҙып алырға бер ай самаһы ҡалғас, 10 литр һыуға 100 грамм тоҙ һалып түтәлгә һибегеҙ.

**Сода.** Аш содаһы баҡсала бөтә йәһәттән файҙалы. Виноград бешә башлау менән 10 литр һыуға 75 грамм сода һалып, ботаҡтарҙы ҡойондороғоҙ. Был процедура сереүҙән һаҡлай, емештең шәкәрен арттыра. Ошондай уҡ иретмә менән бөтә емеш ағасын эшкәртһәгеҙ, уларҙы япраҡ ашаусы ҡарышлауыҡтарҙан һаҡларһығыҙ. Сода - онло ысыҡ тип аталған үҫемлек ауырыуынан да яҡшы сара. Бер балғалаҡ соданы 1 литр һыуҙа иретеп, ҡыяр түтәленә һипһәгеҙ, япрағы иртә һарғаймаҫ. 1 ҡалаҡ сода, 1 таблетка аспирин, 1 балғалаҡ һауыт-һаба йыуа торған шыйыҡса йәки шыйыҡ һабын, 1 ҡалаҡ үҫемлек майын 4,5 литр һыуға һалып һипһәгеҙ, ҡарағат, крыжовникты зыян итеүселәрҙән һаҡларһығыҙ. Шулай уҡ содалы һыу кәбеҫтә ҡарышлауығын иҫкәртә. Сәсер алдынан орлоҡто сода һалынған төнәтмәлә эшкәртеп алһағыҙ, тағы ла яҡшы булыр.

**Гәрсис.** Ҡороҡҡостарҙың күбеһе гәрсис яратмай. Төрлө пестицидтарға ҡаршы булһағыҙ, уны һәр ваҡыт ҡул аҫтында тотоғоҙ. Кәбеҫтә, боросоғоҙҙо лайлалы ҡусҡарҙан һаҡлау өсөн улар араһына һибеп сығығыҙ. Гәрсисле төнәтмә кебләне, төрлө ҡарышлауыҡтарҙы ла иҫкәртә. Уны эшләү өсөн 10 литр һыуға 100 грамм гәрсис һалып, ике көн төнәтегеҙ ҙә, һөҙөп, 50:50 нисбәтендә һыу өҫтәп, һәр күнәккә 40 грамм һабын һалығыҙ һәм алма ағасы сәскә атып, 15-20 көн үткәс, ә еләк ҡыуаҡтарына йәй башында һибегеҙ.

**Кефир йәки эркет һыуы.** Әсе һөт продукттары бактериялары үҫемлеккә зыян итмәй генә бәшмәк ауырыуҙарын юҡ итә. Ҡыяр япрағы иртә һарғаймаһын өсөн бер күнәк һыуға ике литр кефир һалып һибегеҙ. Ошондай уҡ һыу менән крыжовниктағы ысыҡ онон бөтөрөргә мөмкин. Фитофторҙы иҫкәртеү өсөн 10 литр һыуға ярты литр кефир, 1 стакан пепси йәки кока-кола ҡушып, помидорға һибегеҙ. Бер күнәк һыуға 1 литр кефир һалып ҡойоу ҙа яҡшы ашлама була. Кефир урынына эркет тә ярай.

**Сүпрә.** Сүпрә үҫемлектәрҙең үҫешен яҡшырта. Ул туҡлыҡлы матдәләргә бай, тупраҡтың микрофлораһын яҡшырта, сир барлыҡҡа килтергән микроорганизмдарҙы юҡ итә. Ул бөтә культура өсөн дә яҡшы ашлама. Уны түбәндәгесә әҙерләргә: 1 килограмм пресланған сүпрәне 5 литр һыуҙа ебетергә лә һибер алдынан 1 литр әсеткене 10 литр һыуға ҡушып, түтәлгә һибергә. Ашламаны ҡоро сүпрәнән дә эшләргә мөмкин: 10 литр һыуға 10 грамм сүпрә, 2 ҡалаҡ шәкәр һалып, ике сәғәткә ултыртығыҙ. Аҙаҡ уны 1:5 нисбәтендә һыу һалып ҡойоғоҙ. Картуф, помидор, баклажан, бороҫҡа ла әсетке бик һәйбәт тәьҫир итә. Үрсетмә өсөн дә сүпрәнең файҙаһы ҙур: буйға үҫмәй, ергә ултыртҡанда тамыры ныҡ була. Сәскә атыр алдынан еләккә 10 литр һыуға 100 грамм сүпрә һалынған иретмә һипһәң, еләк серемәй. Помидорҙы ла фитофторҙан һаҡлай. Сүпрә калийҙы "йота", шуға күрә тупраҡҡа көл индерергә онотмағыҙ.

**Һөт.** Ҡыярҙағы онло ысыҡты түбәндәгесә юҡ итергә мөмкин: 9 литр һыуға 1 литр майһыҙ һөт, 10-12 тамсы йод һалып һибегеҙ. 10 литр һыуға 20 грамм кер һабыны, 1 литр һөт, 30 тамсы йод һалынған иретмәне ҡойоп, ҡыяр япрағын алдан һарғайыуҙан һаҡларға була. Ойоған һөт үрҙә атап кителгән ысулдарҙа кефир йәки эркетте алмаштыра.

**Кока-кола йәки пепси.** Пепси йәки кока-кола һәм кефир ҡушылған һыу помидор үрсетмәһе өсөн яҡшы. Уны ҙур булмаған һауытҡа ҡойоп, баҡсаға ултыртһағыҙ, лайлалы ҡусҡар өсөн һәйбәт алдатҡыс булыр. Кебләһәм бетте бөтөрөү өсөн дә ҡулланығыҙ.

ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ

# ИРЕҢДЕ БАТША, ТИП ҺАНАҺАҢ...

## үҙең дә батшабикә булырһың



**Башҡорт халҡының туй йолалары бик бай: килен төшөрөү, һыу юлын күрһәтеү, ҡыҙ йәшереү, һатыу, йыртыш йыртыу. Миңә лә бикәс һатыу кеүек бик тә яуаплы йоланы атҡарырға тура килгәне бар. Иң беренсе, ошо тема буйынса эҙләнеп, интернет киңлектәрен гиҙҙем, йолаларҙы өйрәнеп, үҙемсә сценарий яҙҙым. Еңгәләр, бәлки, һеҙгә лә кәрәге тейер, тип, ошо тәжрибәм менән уртаҡлашырға булдым.**

Мәсеттә вәғәз тыңлап, никах уҡытып, ҡыҙ йортона килгәс, ҡоҙалар менән яҡындан танышып, уларҙы ашатып-эсереп, йырлап-бейеп күңел асҡан арала, ипләп кенә бикәсте саҡырып сығарҙым да ҡоҙаларҙы уйната башланым. Ҡунаҡтар бер-береһенә төрлө йырҙарҙың берәр юлын йырлап, эстафета кеүек тапшырырға тейеш. Бына йыр конкурсы китте ҡыҙып, кәләш ҡайғыһы онотолдо. Әмәлгә ҡалғандай, иң аҙаҡҡы йыр йырлаған ҡоҙа йыр һүҙҙы: "Иртәнсәккәй тороп, бер ҡараһам, телефоным юҡ, урлағандар".

- Телефон нимә ул, кәләш юҡ, урлағандар, - тигәйнем, табындағылар гөж итеп ҡалды.

Алдан яҙылған маршрут ҡағыҙын тапшырып та өлгөрмәнек, кейәү һәм уның егеттәре саң туҙҙырып "тимер ат"тарына атланып, сығып та сапты. Ҡыҙҙы 5-6 урам аша йәшергәйнек. Былар урау-урау юлдарҙан беҙҙең өйҙө тапҡансы, ҡайта һалып, ҡапҡаны шарт бикләп, ишек уйымына ептән ау һуҙып, бөйөргә таянып ҡаршы алдым. Осҡондары осоп, тай-тулаҡтай үрәпсеп торған егеттәр кәртә аша ғына һикереп, штурм менән алырға уйлағайны, килеп сыҡманы. Был йәһәттән Рексҡа рәхмәт - этем абалап, ҡапҡаның теге яғындағыларҙың ярһыуын бер аҙ баҫты. Ул арала мин һөжүмгә күстем. "Кем унда?" - тип ҡысҡырған булам. Кейәү балаҡай ҙа шаян:

- Өфөнән посылка ебәргәйнеләр, асығыҙ әле, - ти.

- Юҡ, бер ниндәй ҙә посылка көтмәйем, ана бара юлығыҙ, - тим.

- Ҡыҙ эҙләйбеҙ, һеҙҙә юҡмы? - тиҙәр.

- Беҙҙә ниндәй ҡыҙ булһын? Шытыр өс малай! - тигән булам, асыулы тауыш менән.

- Кәләш бар тиҙәр һеҙҙә, - тип ярыҡтан ҡарай кейәү үңгәрҙәре.

- Мин бараммы? Тик өс балам бар... - тим.

- Бара, - тиҙәр тыштан.

Ҡапҡаны астым да:

- Кейәү бала, ҡайҙа йөрөйһөң, үрмәкселәр ау һуҙғансы, - тим.

Үңгәрҙәр сыҙамай, шатыр-шотор үтеп китмәксе.

- Туҡтағыҙ әле, егеттәр, был тирәлә мин хужа, минең һүҙҙе, минең шарттарҙы үтәгәндә генә дуҫығыҙҙы кәләшле итерһегеҙ, һынауҙар аша үткәрмәйенсә, бикәсемде тоттороп ебәрмәм инде, мине тапап китһәгеҙ, өс баламды етем итерһегеҙ, кем дә кем мине тыңламай, үҙ кеҫәһенән штраф түләйәсәк, - тигәйнем, бөтөнләй йыуаштандылар.

Тәүге һынау - ҡайсыһыҙ-ниһеҙ ау аша үтергә. Дуҫтарының ярҙамы менән кейәү уны ут менән өҙөп үтте.

Икенсе һынау - "Мин һине яратам", тип ҡысҡырып, серенада йырларға. Кейәүҙән алда дуҫтары кем уҙарҙан "яратам" тип ҡысҡыра ла башланы. Йыр тамамланыу менән икенсе ҡаттан тәҙрә асылып, ҡулъяулыҡ болғанылар, йәнәһе лә, мин бында!

Өсөнсө һынау - бикәстең исемендәге хәрефтәргә матур һүҙҙәр әйтеү. Кейәү быны ла уңышлы үтте. Ингәс, унан сынаяҡ йыуҙырып, саң һөрттөрөп, гөлгә һыу ҡойҙороп ҡараным, йәғни ҡатын-ҡыҙҙың ҡырылмаһа ҡырҡ эшенең бер нисәһен эшләттем. Быны мин шулай тип аңлаттым:

- Кәләшеңдең эшен һиңә ауҙарырға уйлайҙар икән тимә. Бикәс йә командировкаға китер, йә бәпес алырға барыр, шул арала өйҙә сүп-сарға батып, астан аяҡ һуҙып ҡуймауыңды хәстәрләп, һинең киләсәгеңде ҡайғыртыуҙан булды был һынау.

Артабан икенсе ҡатҡа менеп еткәнсе бикәскә ҡағылышлы һорауҙар яуҙырҙым. Уныһын да үтте. Шунан бер бүлмәнең ишеге төбөндә ике мәҡәл әйтәм, береһен һайла тинем: "Сила есть - ума не надо" һәм "Беләге йыуан - берҙе йығыр, белеме йыуан - меңде йығыр". Икенсе мәҡәлде һайлауына, әйҙә инде, ҡарап ҡарайыҡ, тип ишекте асып ебәрҙем. Унда, тренажерҙар бүлмәһендә, бокс бирсәткәләрен кейеп, бик ажар ҡиәфәттә улдарым тора.

- Йә кейәү, беҙҙең ҡыҙҙы яҡларһаҡлар көс-ғәйрәтең, аҡылың бармы икән? - тим кейәүгә. Ҡәйнештәренә аҡса биреп килеште был.

Киләһе һынауҙы ҡуйырғамы, тип оҙаҡ ҡына уйланым, шулай ҙа атҡарырға булдым. Шаршауға төрөп, "ялған" кәләш ултырттым.

- Кәләшеңде таптың, ҡосағыңа ал, - тим.

Кейәү икеләнеп кенә алға ынтыла бирҙе лә, артҡа сигенде.

- Кейәү, юлыңда быуар йыландай арбап, юхалай һылашыр сырмалсыҡтар ҙа, бәлки, осрар. Берүк тайғаҡ юлға төшмә, әрәм булырһың, - тинем.

Бына кәләш йәшенгән бүлмәгә лә килеп еттек.

- Ишек бауы бер тәңкә, бикәс хаҡы мең тәңкә , - тип һатыулашып, һамаҡлап, йыртыш йырттырып, бикәсте кейәү ҡулына тапшырҙым.

Был кәмит нимәгә кәрәк, тип уйламағыҙ. Борондан ҡалған традицияларҙы хөрмәт итеп, хәлегеҙсә үтәргә кәрәк. Йыртыш йыртыу - ҡыҙҙың намыҫын, егеттең көс-ғәйрәтен күрһәтеү, ҡыҙ йәшереү - йәш ғаиләне яман күҙҙән, яуыз күҙҙән йәшереп, күҙ яҙлыҡтырыу маҡсатында килеп сыҡҡан йолалар.

- Иреңә тоғро ҡатын бул, йылы һүҙең, яҡты йөҙөң, тәмле ашың менән ҡаршы ал. Иреңде батша, тип һанаһаң, батшабикә булырһың, ҡол итеп күрһәң, ҡол бисәһе булырһың. Аҡыллы ҡатын бул, бикәс. Иманлы, аҡ уйлы булығыҙ, башҡорт телле, башҡорт рухлы балалар үҫтерегеҙ. Аҡ юлдар, аҡ бәхеттәр насип итһен һеҙгә, йәштәр, - тип кейәүгә аҡ түбәтәй, бикәскә аҡ селтәр яға бирҙем. Ярты литрлыҡ банкыны биҙәнем дә:

- Бына һеҙҙең тәүге ғаилә банкығыҙ, нишләп бәләкәс кенә икән тимәгеҙ, тиндәрҙән һумдар йыйыла, үҙ көсөң менән тапҡан ҡәҙерле лә, бәрәкәтле лә була, - тинем.

Бына шулайыраҡ булды ҡыҙ һатыуым. Ҡытыршы урындары ла булғандыр, әммә ихлас күңелдән, барлыҡ изге теләктәремде теләп, бәхетле, оҙон ғүмерҙәр юрап атҡарҙым был эшемде. Күреүегеҙсә, һуңғы тиненәсә аҡсаһын һығып, алйытып-арытып маташманым кейәүҙе. Төп маҡсатым - уның кешелекле, сос, отҡор, ҡыйыу, алдынғы ҡарашлы, утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ, шәп Кеше икәнен үҙенә лә, кәләшкә лә, йыйылған йәмәғәткә лә иҫбатлау ине.

Мәжлес тамамланып, ҡайтырға йыйынғас, баяғы йәш-елкенсәктең: "Һеҙ - супер еңгә, ундайҙарҙы күргәнебеҙ юҡ әле", - тип хөрмәтләп, оҙатып ҡалыуҙарынан һуң уларҙың күңеленә осоҡ ҡына булһа ла халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәте, халыҡ ижады ынйылары орлоғон һибә алғанмындыр, тип ҡыуандым. Ҡасан да булһа ул орлоҡтар шытып сығыр, тип ышанам. Йәштәребеҙҙе шулай үҙ йолаларыбыҙға ылыҡтырайыҡ, тип әйтмәксе инем.

**Гүзәл МЫРҘАЕВА.**
**Баймаҡ районы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИКЕ ЙӨҘЛӨЛӨК КЕНӘ...

## ярлыҡанмай торған гонаһ

Күңел - ҡурҡаҡ, ҡул - батыр: эшләһәң, эш ҡарышмай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Беҙ алға барырға тейешбеҙ: яҙмышҡа ҡаршы тороу өсөн түгел - быныһы мөмкин булмаған хәл, ә яҙмыштың ҡаршыһына табан барыу өсөн.

**(Фридрих Геббель).**

Өйләнгән кешене Адриатик диңгеҙ менән никахҡа ингәндәй итеп тоям: ул әле кәләш итеп алған ҡатын-ҡыҙҙа ынйы ла, башҡа байлыҡтар ҙа, ҡот осҡос йәнлек тә, еңелмәҫ дауылдар ҙа тупланыуын белмәй.

**(Генрих Гейне).**

Башҡа кешегә оҡшау сәнғәте бик ябай: уға үҙең тураһында бөтөнләй һөйләмә һәм өҙлөкһөҙ уны маҡта, ҡыҙыҡһынып һорауҙар бир.

**(Гонкур).**

Ҡатын-ҡыҙҙар тураһында насар һөйләгән ир, ғәҙәттә, бер генә ҡатын-ҡыҙҙы күҙ уңында тота.

**(Реми де Гурмон).**

Үлемгә уңайлыраҡ һәм ныҡлыраҡ әҙерләнеү кәрәк, шуға ла ул ғүмерҙең иң аҙағына ҡуйылған...

**(Козьма Прутков).**

Әгәр ҙә бәхет йорто төҙөһәләр, иң ҙур бүлмәне көтөү залы итерҙәр ине.

**(Жюль Ренар).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡараңғы төндә юл буйлап китеп барған бер суфый яҡындағы ҡоҙоҡтан ярҙам һорап ҡысҡырған кешенең тауышын ишетә. "Әй, ни булды?" - тип һорай суфый ҡоҙоҡ эргәһенә яҡын килеп. "Мин - тел белгесе. Мин ҡараңғыла юл тапмай йөрөп, ошо ҡоҙоҡҡа килеп төштөм", - тигән тауыш ишетелә аҫтан. "Түҙеп тор инде, дуҫ кеше, мин хәҙер, баҫҡыс менән бау ғына табып алып киләйем дә..." - ти суфый. "Бер генә минут тороп тороғоҙ әле, - тигән тауыш ишетелә тағы ҡоҙоҡтан. - Һеҙ дөрөҫ һөйләшмәйһегеҙ. Һеҙ һүҙҙәрҙе бөтөнләй дөрөҫ әйтмәйһегеҙ". "Ярай, улайһа. Әгәр ҙә һеҙҙең өсөн һүҙ уның мәғәнәһенән мөһимерәк икән, мин ул һүҙҙе дөрөҫ итеп әйтергә өйрәнгәнсе, ҡоҙоҡта ултырып тороғоҙ", - ти суфый һәм үҙ юлы менән китеп бара..."**

1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
30 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 598/07